✓ "Һинән бәхетһеҙерәк кешеләр ҙә бар был донъяла". Әлбиттә, был һүҙҙәр һине һыйындырыр ҡыйыҡ түгел, әммә улар ниндәйҙер дауылдан йәшеренергә етеп тора.

(Г. Лихтенберг).

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12 - 18 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№7 (425)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Хеҙмәт маймылдан кеше яһаған,**



ә эскелек кешенән маймыл яһай

6-7

**Башың менән дуҫ булып,**

аңың менән үҫеп ҡайт, йәш кеше!



8-9

**Алты йәшлек малайҙың...**

алтмыш йәшлек ҡарт менән бесән сапҡаны



11

**Милли байлығыбыҙ -**

Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ



13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Беҙҙең халыҡты заманға яраҡлаша алмауҙа ғәйепләйҙәр. Был - ғәйепме, әллә беҙ заманға яраҡлашырға тейеш түгелбеҙме?

*Тимер НИӘТШИН, шағир:* Минә яраҡлашыу тигән һүҙ, ғөмүмән, оҡшамай. Яраҡлашыуҙы мин кемдендер көсөнә, кемдендер фекеренә, кемдендер ихтыярына буйһоноп, унын ышығында йәшәүҙер тип аңлайым. Башҡортттоң хәҙерге заманға тап килмәгән иң төп сифаттарының береһе - үҙ асылына тоғролоғо. Заман беҙгә хәҙер үҙ асылыбыҙҙы үҙгәртеү шартын ҡуя. Әгәр башҡорт заманға яраҡлашып йәшәйем, тиһә, ул, иң беренсе нәүбәттә, дәүләтте таларға тейеш ине. Икенсе нәүбәттә көсһөҙҙәрҙе алдарға тейеш ине, өсөнсө нәүбәттә, заманса үҙгәреп китеп, башҡортлоғон да онотоорға тейеш ине. Әлбиттә, боронғо милләт үҙенең бына тигән йырҙары, бына тигән йолалары, бына тигән шөғөлдәре, бына тигән аштары, ҡурайы, балы, аты, шәле, сихри тәбиғәте һәм башҡаһы булған башҡорт заман аҡылдан шаша тип, аҡылдан шашманы.

Башҡорт заманға яраҡлашырға тейеш түгел, әммә ләкин замандың ыңғай, аҡыллы, йәшәү һәләтен күтәргән ярҙамынан, башҡа сараларынан баш тартырға тейеш түгелбеҙ. Әйтәйек, мәғлүмәткә һәм заман һөнәрҙәренә эйә булыу, электрон технология ҡулланыу, үҙ байлыҡтарын заманса ҡуллана белеү, уларҙан ниндәйҙер табыш алыу һ.б. Үҙен тирә-яҡтан уратып алған милләттәрҙең башҡортҡа тик яҡшы сифаттары ғына йәбешергә тейеш. Ниңә әле беҙгә урыҫтың үҙ һүҙенә, үҙ ихтыярына башҡаларҙы күндерә алыу сифатын, татарҙың һығылмалылығын, сыуаштың сабырлығын алмаҫҡа?

*Сәбилә СӘЛӘЙМӘНОВА, элекке мәғариф министры:* Беҙҙең асыл, милли булмышыбыҙ тиҫтәләгән мең йылдар буйына формалашҡан. Шуға күрә беҙ, заманға яраҡлашырға теләһәк тә, үҙ тәбиғәтебеҙҙән ҡаса алмайбыҙ. Беҙҙең йәшәйеш электән тәбиғәт менән бер ҡатар булған, шуға күрә үҙ ихтыярың менән тәбиғәт торошон үҙгәртеп булмағандай, булмышың да үҙгәрешһеҙ ҡала. Шуға күрә беҙ күпме үҙгәрәбеҙ, заманға яраҡлашабыҙ, тиһәк тә, барыбер тәбиғәт балаһы булып ҡалабыҙ.

Беҙҙең халыҡ эшлекле, уңған, унын ҡулынан бөтә эш килә, әммә ул башҡалар ниндәйҙер ғәмәлде башҡарған өсөн генә унын артынан эйәрергә ашыҡмай. Бәлки, дөрөҫ тә эшләйҙер, әммә хәҙер заман икенсе, шуға күрә, яраҡлашмаһаҡ та, хәҙерге замандың еленә ҡушылмай әмәлебеҙ юҡ беҙҙең. Бигерәк тә йәштәребеҙ эшҡыуарлыҡҡа, аҡса эшләргә өйрәнергә бурыслы. Беҙгә байлыҡ маһайыр өсөн түгел, көн итер өсөн, мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереү өсөн кәрәк. Яраҡлашмаһаҡ та, үҙгәрергә бурыслыбыҙ.

*Айҙар ҠУСЕЕВ, эшҡыуар:* Заманға яраҡлашыу кәрәкмәй, унын ыңғай яҡтарын үҙ мәнфәғәтебеҙҙә файҙаланырға кәрәк. Мәҫәлән, һөнәр һайлау мәсьәләһе. Беҙ үҙебеҙҙең үҫеш өсөн кәрәкле һөнәрҙәрҙе генә һайларға бурыслыбыҙ. Әйтәйек, Америкала программист булып эшләгән башҡорт егетенә ҡарағанда милләтебеҙ өсөн үҙебеҙҙә шофер булып эшләгәне кәрәгерәк. Үҙебеҙҙә эшләгән һәм йәшәгән егет, программист егеткә ҡарағанда эш хаҡын 100 тапҡыр аҙыраҡ алһа ла, ул үҙенең тапҡан-таянғанын ғаиләһен ҡарауға, башҡорт рухлы балалар тәрбиәләүгә файҙалана. Ниндәйҙер кимәлдә заманға яраҡлашыу булһа ла, ул беҙҙең рухи үҫешкә ярҙам ғына итһен. Йәғни заманға яраҡлашыу рухи булмыштан алыҫлашыуға алып килмәһен. Икенсенән, яраҡлашыуҙы ярамаған ғәмәлдәрҙән алыҫлашыу тип тә атарға була. Әйтәйек, эсеүҙән һәм тәмәке тартыуҙан туҡтаған кеше үҙенән-үҙе һүгенеүҙән туҡтала. Яраҡлашыу - ул яҡшы ғәмәлдәргә яраҡлашыу, кешенең, башҡаларҙың тик яҡшы яҡтарын ғына күрергә тырышыу.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

ФАРАЗ

# ҠУЯН ЙЫЛДАРЫНЫҢ...

## яҡшыһы ла, насары ла булды

**Байтаҡ ғүмер кисергән кеше булараҡ, быйылғы ҡуян йылы тураһында берәй фараз әйтергә тип, шәхси күҙәтеүҙәрем менән уртаҡлашмаҡсымын.**

1975 йылдағы Ҡуян йылынан башлайыҡ. Урта йәштәге һәм унан өлкәндәр был дәүерҙе яҡшы хәтерләй, сөнки Украинанан, Балтика буйы республикаларынан һалам менән бергә колорадо ҡуңыҙы эйәртеп алып ҡайтып, икенсе икмәк һаналған картуф үҫтереүҙә ҙур ҡыйынлыҡтар башланды. Ниндәй "аҡыллы баш" тәҡдим иткәндер һалам ташыуҙы, әммә ил етәкселәре ошо афәтте булдырмау, таҙа еребеҙгә ҡуңыҙ таралыуҙы иҫкәртеү өсөн сара күрмәне. Бының ни менән бөтөрөн алдан белгән ғалимдарҙың да был афәткә ҡаршы көрәшмәүе хайран ҡалдыра. Күпме генә үкенһәң дә, хәҙер һуң инде. Ул хатаны мәңге төҙәтеп булмаҫ кеүек тойола. Иҫ китмәле ауыр ҡаза һалынды халыҡ елкәһенә. Шул арҡала бөгөн ағыулы картуф ашарға мәжбүрбеҙ.

1987 йылдағы ҡуян йылы әллә ни насар булманы. Минең яҙмаларым күрһәтеүенсә, колхоз сәсеүгә һуңлап, 8 майҙа ғына төштө. Ямғыр етерлек үк булмаһа ла яуғыланы. Унын ҡарауы, ураҡ осоронда ямғырҙар китеп, яҫмалағы игендәр шытты, һуғылмай ҡалғаны ла булды. Ә бына сөгөлдөр, картуф, кукуруз ишелеп унды. Етерлек бесән әҙерләнде. Ҡыҫҡаһы, 1987 йылды яманларлыҡ түгел.

1999 ҡуян йылын бер аҙ шөбһәләнеп ҡаршы алдыҡ. Әммә ҡурҡыуыбыҙ бушҡа булды: ифрат яҡшы килде йыл. Уңайлы шарттарҙа сәсеү тиҙ тамамланды, үҙ ваҡытында ямғыр ҙа көттөрмәне. Йылылыҡ, дым булғас, иген гөрләп үҫте. Сөгөлдөр, картуф һәм башҡа йәшелсә унды. Ураҡ башланғас, көн аяҙ торҙо. Иген юғалтыуһыҙ йыйып алынды. Был хәл Мәләүез төбәгендә генә түгел, бөтә республикала күҙәтелде. Ошоларҙан сығып, 2011 ҡуян йылы ла уңышлы булыр, тигән өмөттә ҡалайыҡ. Яҡшыға юрайыҡ, йәмәғәт.

**Рәшит МАЕВ.**
**Мәләүез районы.**



Флүр Ғазин фотоһы

БЕЛ КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## ҠАНЫБЫҘҘА...
### сабый бала хисе

Күңелем күтәрерлек бик һәйбәт дауа таптым әле. Ҡулыма китап алып, шиғриәт донъяһына сумам. Һиҙәм, күңел торошом һәйбәтләнгәндән һәйбәтләнә бара, хатта йылмая башлайым. Бына әле Рәми Ғариповтың "Диңгеҙ һәм сабый" шиғырын уҡып, йылмайып ултырам. Иҫегеҙҙәме?

*Төҫә ҡасҡан. Һары буръяҡ баҫҡан,*
*Ни булған һуң бөгөн диңгеҙгә?*
*Ел дә юҡ бит, ә ул ҡоторона! -*
*Ҡоторона шулай өлһеҙ ҙә...*
*Ситлектәге ас арыҫлан һымаҡ,*
*Дулап йөрөй һыймай ярына.*
*Сал ялдарын сайҡап, асыу менән*
*Ҡорбанынмы көтөп ярһына?*
*Бер сабыйға әллә асыу итеп,*
*Йоторғамы уны самалай?*
*Ярҙа уға бер ҙә иҫе китмәй,*
*Таш ырғытып йөрөй бер малай!..*
*Ниңә йылмая һуң?*

Ошо сабый балаға оҡшаттым мин халҡымды. Глобалләшеү ярһып баҫып барғанда һис тә иҫе китмәй генә гүзәл телен, халҡының ижадын һаҡлай, артабан үҫтерә. Һабантуйҙар, шәжәрә байрамдары, Салауат йыйынын үткәрә, "Байыҡ", "Оҙон көй" кеүек конкурстар, ҡурай байрамдары ойоштора, китаптар, гәзит-журналдар сығара. Эйе, беҙ тынысбыҙ, беҙ ярһып бармайбыҙ, ул беҙгә тәҫ түгел. Ярһыу, тигәндән, "Байыҡ" бейеү конкурсының гала-концертында быլтыр "Тау халҡы" бейеүен бер малай бейей башлағайны, хатта телевизорым һүнде. Шундай агрессив энергия ағыла уның бейеүенән. Ә беҙҙең бейеүҙәрҙә батырлыҡ, олпатлыҡ, тыйнаҡлыҡ һөкләндерә. Ниңә ярһырға? Сабый балаға хас хис ағыла, ҡаныбыҙҙа йәшәй сабырлыҡ...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИШАРА

# БАШҠОРТ ТАТЫУЛЫҠ ЯҠЛЫ,
## башҡалар ҙа татыулыҡ яҡлы булһын

**"Киске Өфө" гәзитендә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың сығыштарынан өҙөктәр бер урынға туплап бирелгәйне. Журналистың бик отошло алымы булды был. Мин уны ҡыҙыл ҡәләм менән билдәләй-билдәләй уҡып сыҡтым.**

Бик күп мәсьәләләр - коррупцияға ҡаршы көрәш, тәбиғи ҡомартҡыларҙы һаҡлау, халҡыбыҙҙың йәшәү кимәлен күтәреү, ер һатҡанда йәки арендаға биргәндә үҙ республикабыҙ халҡы мәнфәғәттәренән сығып эш итеү тураһында әйтә Президент. Уның сығыштары тупланған был яҙмаларҙы һәр район, һәр ҡала етәксеһе үҙенең эш өҫтәлендә, ҡул аҫтында һаҡлап, уларға әленән-әле күҙ һалып алыуы фарыз, тип һанайым. Был бик файҙалы булыр ине. Юҡһа, ҡайһы бер етәкселәр Президент сығышындағы үҙенә ҡулай берәй өҙөктө генә иҫендә ҡалдыра ла, үҙенең ҡырын эштәрен йәшерер өсөн шул һүҙҙәрҙе девиз итеп ҡуллана башлай.

Мәҫәлән, "башҡорт телен мәжбүри уҡытыу булырға тейеш түгел" тигән һүҙҙәрҙе ҡабатлаусылар һәм башҡорт телен уҡытыуға ҡәртә ҡороусылар табыласаҡ. Ә һәр район башлығының, Президент әйткәнсә, "Башҡорт теле - ул республикаға исем биргән тел. Ул рус теле менән бер рәттән мотлаҡ өйрәнелергә тейеш!" тигән аңы булырға тейеш, минеңсә. Уларҙың һәр сығышы республикабыҙҙың дәүләт теленә ихтирамлы ҡарашын сағылдырырға тейеш. Шуныһы беҙ Башҡортостан халҡын башҡортостанлылар тип туплай алмаясаҡбыҙ. Беҙ - бер республика халҡы, беҙ бер маҡсатлы, йәғни республикабыҙ иҡтисады үҫеүен, үҙ илебеҙҙең бай ҙа, күркәм дә булыуын теләүсе һәм уға йәм биреүсе берҙәм халыҡ булып ойошорға тейешбеҙ. Уның өсөн башҡорт теленең дәүләт теле булыуын һәр кеше танырға, уны дәүләт теле булараҡ өйрәнергә бурыслы. Шул ваҡытта "күп милләтле" һүҙен аяҡ атлаған һайын ҡысҡырып йөрөүҙең кәрәге лә ҡалмаясаҡ. Ҡайһы республика бер генә милләтле икән? Башҡа бер республикала ла "күп милләтле" төшөнсәһе юҡ. Күршеләребеҙҙә беҙ "удмурттар, сыуаштар, мариҙар, ҡаҙаҡтар, татарҙар" тип беләбеҙ. Ундағы халыҡ та үҙен шулай тоя. Ә ниңә Башҡортостандағы халыҡ үҙен төрлө-төрлө итеп тойорға тейеш әле? Ғаиләберҙәм булһын өсөн тырышҡан атаәсә: "Быныһы үгәй улым, быныһы опекунлыҡҡа алынғаны, ә бынауы үҙемдеке", - тип һөйләмәй. Бына ни өсөн дәүләт телдәре булараҡ башҡорт телен һәм рус телен берҙәй өйрәтеү мотлаҡ булырға тейеш. Был бит беҙҙе берләштереү, башҡортостанлы итеү сараһы ла.




Республикабыҙҙа етештерелгән һәр продукция халҡыбыҙҙың абруйын күтәрерлек юғары сифатлы, зауыҡлы, һатып алыусыларҙың иң юғары талабына тап килерлек булырға тейеш. Республикабыҙ халҡын тирә-яҡ күршеләребеҙгә генә түгел, ә Рәсәй һәм донъя күләмендә лә иң эшлекле, иң белемле, иң өлгөр, иң намыҫлы, иң әхлаҡлы кешеләр итеп танытыу ҙа беҙҙең мөҡәддәс бурысыбыҙ. Сөнки беҙҙең ата-бабаларыбыҙ шундай булған. Йүнһеҙ халыҡтың шундай юғары мәҙәниәте, биҙәүестәре, эш ҡоралдары, сәнғәт өлгөләре булмай ул. Ә башҡортта быларҙың барыһы ла булған һәм улар беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Шундайҙарҙан һаналған һәр күренештең үҙ традицион исеме менән аталып йөрөтөлөүен хупларға һәм яҡларға кәрәк. Башҡорт бал ҡорто, башҡорт ҡымыҙы, башҡорт аты, башҡорт ҡурайы, башҡорт халыҡ йырҙары, башҡорт бейеүе, башҡорт кейеҙе, башҡорт ҡорото, башҡорт кейемдәре тибеҙ икән, уларҙың ысынлап та тик башҡорттоҡо булыуына икәнен танымай булмай. Былар - бөтөн донъяға Башҡортостан тигән ил барлығын, башҡорт тигән милләт барлығын танытырлыҡ хазиналарыбыҙ. Береһен дә юғалтмаҫҡа, ситтәрҙең үҙләштереүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Республикабыҙ малсылыҡ, ҡортсолоҡ, игенселек, туризм, шифаханалары менән генә түгел, донъя стандарттарына тап килгән эре сәнәғәт үҙәге лә булып танылыр, тип өмөтләнәбеҙ. Ә малсылыҡҡа килгәндә, беҙҙең халыҡ өсөн уның бер ауырлығы ла юҡ. Был шөғөлдө ул үҙе теләп һәм бик оҫта башҡара. Тик был шөғөлдән табыш алыу өсөн юғарынан ярҙам кәрәк. Юғиһә, ауыл ерендә Магнитогорскиҙан килтерелгән һөт, ит ашамлыҡтары, йә Татарстандан килтерелгән билмән менән һатыу итәләр. Тимәк, халҡыбыҙ аҡсаһы шул яҡтарға ағып тора.

Ҡыҫҡаһы, Башҡортостан Президентының сығыштары республикабыҙ киләсәге яҡты булырына өмөт уята. Әммә беҙ сәпәкәйләп, ҡыуанып ҡына ултыра алмайбыҙ. Ул дөрөҫ булмай. Президент әйткән барлыҡ мөмкинлектәрҙе файҙаланып, республикабыҙ халҡы тыныс, берҙәм, ҡәнәғәт йәшәргә өйрәнергә тейеш. Берҙәм һәм татыу булайыҡ, әммә татыулыҡ бер башҡорт иҫәбенә генә булмаһын, уның менән иңгә-иң терәшеп йәшәгән башҡа милләттәр ҙә ошо татыулыҡты тәьмин итеүгә үҙ өлөшөн индерһен әйҙә.

**Рәүеф БИКТАШЕВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтайҙың Социаль сәйәсәт һәм һаулыҡ һаҡлау буйынса комитет депутаттары беҙҙең республикала уллыҡҡа һәм ҡарауға бала алыусыларға талаптарҙы күтәреү яҡлы. Күптән түгел булып үткән ултырышта ошо хаҡтағы закон проектына үҙгәрештәр индереү тураһындағы мәсьәлә ҡаралды. Закон проекты баланы уллыҡҡа һәм ҡарауға алыу шарттарын асыҡлай, төҙәтмәләр индерә.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡушыуы буйынса 100 ат көсөнә тиклемге еңел автомобиле булған граждандарға транспорт һалымын 7,5-тән 5,5 һумға (һәр ат көсөнә) тиклем кәметеү тураһында закон проекты эшләнде. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, Башҡортостанда 70 процент самаһы автомобиль хужаһы һалымды ошо льготалы схема буйынса түләйәсәк.

✓РФ Федераль Йыйылыш Дәүләт Думаһында мәҙәниәт буйынса комитеттың парламент тыңлауҙары булып үтте. "Мәғариф тураһындағы яңы закон проектында сәнғәт мәғарифы мәсьәләләре" тигән темаға арналған ултырышта Башҡортостандан Өфө дәүләт сәнғәт академияһы ректоры Әминә Шафиҡова ҡатнашты.

✓БР ЗАГС-тар идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, быլтыр республикала 34819 никах теркәлгән, уларҙың 13222-һе, йәғни 38 проценты ҡатнаш никахтар. Әммә был улай уҡ дөрөҫлөккә тап килмәҫкә лә мөмкин, сөнки никахҡа инеүселәрҙең 10 проценты үҙ милләтен күрһәтмәй. Мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, рус һәм татар, башҡорт һәм татар никахтары йыш осрай торған күренешкә әйләнгән. Мәҫәлән, 2005 йылда рус һәм татар араһында 1412 никах теркәлһә, 2010 йылда ул 3224-кә барып еткән. 2005 йылда башҡорт менән татар араһында 1372 никах теркәлһә, 2010 йылда ул 3214 булған.

✓Башҡортостан мосолмандары диниә назараты 16 февралдә Өфөлә мосолман йәштәре форумы үткәрә. Унда традицион исламды үҫтереү, йәштәр араһында наркоманлыҡты, экселекте һәм дини экстремизмды иҫкәртеү мәсьәләләре ҡараласаҡ. Йәштәр менән Диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин һәм БР Президенты ҡарамағындағы дәүләт конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет рәйесе Вячеслав Пятков осрашасаҡ.

ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




# УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

**Башҡортостанда милләт-ара татыулыҡ һәм ксенофобия темаһына арналған Дәүләт Советы Президиумы ултырышы үткәрер алдынан ғына Башҡортостан Президенты 2011 йылды Милләт-ара татыулыҡ йылы тип иғлан итте. Ғәҙәттә, йыл атамаһы иғлан ителә икән, тимәк, был өлкәлә ниндәйҙер проблема бар. Ә Башҡортостан элек-электән Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә дуҫлыҡ, татыулыҡ өлгөһө булып торҙо. Әллә халыҡ фекере икенсе төрлөмө? Әйҙәгеҙ, ошо хаҡта белеү өсөн Президент блогына күҙ һалайыҡ.**

**kudashevav.** Бындағы постарҙа бик йыш ҡына урыҫ булмаған халыҡтарға ҡарата нәфрәт һәм милләттәр араһындағы айырмалыҡтарҙы күрергә теләмәү сағыла. Телдәрҙе өйрәнеү буйынса ла башҡалар өсөн яуап бирергә кәрәкмәй. Киреһенсә, курстарҙы арттырырға, телэүселәр өсөн яңыларын асырға кәрәк. Өлкәндәр өсөн урыҫ, башҡорт, татар телдәрен профессиональ өйрәнеү курстарын әйтәм. Ҡайһы бер урыҫ кешеләре милли телдәрҙе өйрәнеүгә ҡаршы. Ә уҙҙәренең туған урыҫ телендә күпме наҙанлыҡ! Урыҫтарға ла уҡырға кәрәк. Телдәрҙе өйрәнеү һәләте - IQ-ның бер өлөшө ул.

Милләттәрҙең айырмалыҡтарын күрергә теләмәүҙе беҙ тарихи йомғаҡ - совет халҡы булып үттек. Милләт кешегә ата-әсәһенән бирелә һәм уға: телгә, йолаларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә ихтирамлы булырға кәрәк. Һәм был тейелгеһеҙ! Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең сетерекле мәсьәләһенә һаҡ ҡағылыу зарур. Әлегәсә республикала мөнәсәбәттәр тыныс, дуҫтарса. Уларҙы һаҡларға кәрәк. Республикалағы тыныслыҡ оҡшамаған бәләкәй төркөмдәр бар, улар менән закон буйынса көрәшергә мөмкин. Мотлаҡ ТВ аша төрлө халыҡтарҙың арҙаҡлы кешеләре, мәҙәниәте, ҡаҙаныштары тураһында тапшырыуҙар, төрлө халыҡтарҙың телдәрендә китап сығарыу һәм уларҙы төрлө мәғлүмәт таратыу сығанаҡтарында таратыу, сифатлы милли матбуғат кәрәк. Кире күренештәрҙең күбеһе иҡтисадтың емерелеүенән һәм властарҙың ғәҙелһеҙлегенән килә. Иҡтисадты аяҡҡа баҫтырығыҙ, торлаҡ һәм тейешле эш хаҡтары менән тәьмин итегеҙ - йәшәүе лә яҡшы яҡҡа үҙгәрер. Күп проблемалар үҙенән-үҙе хәл ителер.

**Laisr.** Халыҡ араһында милләт мәсьәләһе күтәрелмәй. 65 йыл йәшәү дәүеремдә, ҡайҙа ғына йәшәһәм дә милләт-ара мәсьәлә менән осрашманым. Ниңәлер был мәсьәлә өҫтә күтәрелә. Өҫтән аҫтағыларға төшә.

**irina_kamalieva.** Минеңсә, кеше ни тиклем күберәк телдәр белә, шул тиклем уның мәҙәниәте юғарыраҡ. Шәхсән мин үҙ милләтенә тоғро булып, бөтә шарттар тыуҙырылғанда ла башҡа телдәрҙе өйрәнеү кәрәк түгел тип иҫәпләүселәрҙе аңламайым. Мин башҡорт телен өйрәнәм, сөнки кеше менән һөйләшкәндә әңгәмәсемә үҙ туған телен ишетеүе күңелле икәнен беләм.

**vikazina1.** Беҙҙең республика үҙенсәлекле. Башҡортостанда "халыҡ" тиһәң, уның күп милләтле халҡын күҙ алдына килтерәләр. Башҡортостанда 25 йыл йәшәйем. Тәҙәйенләү буйынса килгәйнем, ошо осорҙа бер генә яман ниәттән булған милләтселек сағылышын күрмәнем. Хәҙер нимәләр тоҡана икән - ул беҙҙеке түгел, ситтән килтерелгән, ситтән һеңдерелгән. Айырым бер милләтте генә үҫтерергә кәрәкмәй, ә ниндәйҙер йомғаҡ ойоштороорға кәрәк. Республикала был йомғаҡ бар һәм халҡыбыҙҙың был характерын билдәләргә, уны хупларға кәрәк. Мин бик йыш ҡына хатта Мәскәүҙәге депутаттарҙың Башҡортостанды Чечня менән сағыштырғанын ишетәм. Был дөрөҫ түгел! Тотош халыҡ өсөн шундай һүҙҙәр ишетеүе ауыр.

**Izobbk.** Тормошобоҙҙоң төрлө өлкәләрендә баланс һәм оптималлек булдырыу буйынса комитет йәки бүлек ойоштороу тәҡдимен индергәйнем. Милләт-ара татыулыҡ - төрлө дингә ҡараған кешеләрҙең мөнәсәбәте балансы ул. Ә берәү ҙә баланс булдырыу менән маҡсатлы шөғөлләнмәй. Баланс боҙолһа, шунда уҡ талаш, ыҙғыш тыуа.

**gimranov54.** Бик етди һәм сетерекле тема. Әммә ул Башҡортостан өсөн шулай көнүҙәкме, бигерәк тә гәм алдында дәүләт кимәлендә фекер алышырлыҡмы икән ни? Ә бит республиканың күп милләтле халҡының күпселеге өсөн милләт-ара проблемалар юҡ. Тарих беҙгә "проблема тыуҙырғың килһә - уны әйтеп бир" тигән ҡағиҙәне бер тапҡыр ғына раҫламаны. Замаңында М. Горбачевҡа БДБ төҙөү темаһын ырғыттылар ҙа, СССР-ҙы тарҡаттылар, ә яңы союз төҙөмәнеләр. Һөҙөмтәлә нимә барлыҡҡа килгәне барыбыҙға ла мәғлүм. Яһалма рәүештә милләт-ара проблема тыуҙырмаһаҡ ине.

Икенсе яҡтан, әгәр проблема бар икән, уға күҙ йоморға ярамай, уны нигеҙҙә хәл итергә кәрәк. Асылда, дәүләт ябай халыҡҡа хеҙмәт һәм йәшәү өсөн шарттар тыуҙыра, улар эшҡыуарлыҡ һәм хеҙмәт эшмәкәрлеге менән дәүләт һәм муниципаль органдарға ҡаршы тороп түгел, ә уларҙың ярҙамы менән тормошҡа ашырыла. Хеҙмәт һәм эшҡыуарлыҡ менән мәшғүл, үҙ ғаиләләрен ҡарау, балалар үҫтереү мөмкинлегенә эйә кешеләргә, улар ниндәй генә милләттән булыуға ҡарамаҫтан, ксенофобия янамай!

**Karkaron.** Федерацияның урыҫ булмаған халыҡтарының ихтыяжына иғтибарлы булырға (иң күп һанлы урыҫ халҡына ла иғтибарлы булырға). Улар урыҫлашмаһын, ассимиляцияланмаһын, үҙенең милли берҙәмлеген, мәҙәниәтен һаҡлаһын өсөн - һәр халыҡта ул үҙенсәлекле һәм бай - комплекслы эшләргә. Мәғарифта алып ташланған милли компоненттты тергеҙергә. Рәсәй халыҡтары телдәрен популярлаштырырға. Ил халҡы, уларҙың тарихы, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында күберәк телетапшырыуҙар булдырырға. Әйҙә үҫеп килеүсе быуын беҙҙә колоритлы, төрлө төҫлө, күп төрлө - бай ил булыуы менән ғорурланһын. Федерациябыҙ шуның менән дә әһәмиәтле - унда тиҫтәләрсә халыҡ йәҙҙәрсә, меңдәрсә йылдар ата-олаталары үҙенең тыуған ерен дошмандарҙан һаҡлап, уның өсөн ҡан түгеп, быуындан-быуынға тәбиғәттен, һәр түбәләстең, һәр башаҡтың матурлығын үҙенең һөйләшендә, легендаларҙа һәм эпостарында маҡтаған аҫаба ерҙәрендә йәшәүен һыҙыҡ өҫтөнә алырға...

Ата-олатайҙарҙан мираҫ ителгән байлыҡты, халыҡтар барлыҡҡа килгәндән алып оҙаҡ йылдар булдырылған ҡиммәтле милләт-ара балансты һаҡларға кәрәк. Төньяҡ Кавказдағы кеүек хаталар ебәрмәҫкә (унда хәл-торош халыҡ насар булғандан түгел, ә уны көрсөккә һәләтһеҙ сәйәсәт еткерҙе). Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең бик нескә әйбер икәнен аңларға кәрәк. Тигеҙлекте боҙорға мөмкин, әммә эҙемтәләр ҡот осҡос булаcаҡ. Бер ваҡытта ла хәл-торошто яһалма рәүештә ҡатмарлаштырырға ярамай. Телеяңылыҡтарҙа көс структураларын, ФСБ-ны, бигерәк тә террорсыларға пиар эшләргә кәрәкмәй. Йомғаҡтта күптән инде ҡурҡыту һәм даими көсәргәнеш, хоҡуҡ һаҡлау органдарына, ғөмүмән, власть органдарына ышанмаусанлыҡ, башҡа милләттәргә күрә алмаусанлыҡ атмосфераһы һеңдерелеүен аңларға ваҡыт.

**Ilshats.** "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының мәғлүмәт лентаһын ғына алайыҡ. Башҡортостан атамаһы бик һирәк күренә, нигеҙҙә Башкирия тип яҙалар. Һәм был рәсми мәғлүмәт агентлығы. Ә Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 65-се статьяһында Башкирия тигән төбәк юҡ, Башҡортостан ғына бар. Республика киң мәғлүмәт сараларының бындай яйлы һәм бер үк ваҡыттағы трансформацияһы менән беҙ кемгә рәхмәтле булырға тейешбеҙ икән, белергә ине? Мин элек тә Башҡортостан тип яҙмаған, хәҙер ҙә яҙырға теләмәгән федераль СМИ тураһында әйтеп тә тормайым. Был һеҙҙе ҡәнәғәтләндерәме? Киң мәғлүмәт сараларының бындай ҡарашы милләт-ара татыулыҡты нығыта тип уйлайһығыҙмы?

**aallende.** Халыҡҡа бер ниндәй ҙә милләт-ара дошманлыҡ кәрәкмәй. Тарих һәм тәжрибә уның йә хакимдар, йә айырым элементтар тарафынан ойошоролоуын күрһәтә.

**ildar19.** Минеңсә, сәбәптәрҙең береһе булып федераль властың урыҫ булмаған халыҡтарға мөнәсәбәте тора. Атап әйткәндә, күп милләтле дәүләттә парламентта Рәсәйҙең урыҫ булмаған халыҡтарына үҙ телендә белем алыуҙы тыйыусы законды үтә икән, ирекһеҙҙән РФ-ның урыҫ булмаған халыҡтары Рәсәй граждандары түгел йәки икенсе сортлылар, тип уйлана башлайһың.

Ошо мәсьәлә буйынса минең тәҡдимдәрем:

- Рәсәйҙең милли республикаларына күберәк иҡтисади һәм сәйәси хоҡуҡтар бирергә;
- Федерация Советының федераль закондарҙы ҡабул итеүҙә статусын көсәйтергә;
- РФ-ның аҫаба халыҡтарының хоҡуғын ҡыҫыусы закондарҙы юҡҡа сығарырға;
- Рәсәй халыҡтары тураһында федераль телевизион канал асырға, унда урындағы йолалар, мәҙәни һәм башҡа ҡиммәттәр, аҫаба халыҡтарҙың башҡа ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында һөйләнелергә тейеш;
- ТВ-ла һәм башҡа киң мәғлүмәт сараларында халыҡтар дуҫлығын, толерантлыҡты пропагандаларға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡҡа уйланыу, тәҡдимдәрен еткереү өсөн тема бирелде. Блогҡа үҙ уйланыуҙарын яҙғанда, һәр кем, бәлки, ҡолаҡ һалырҙар, тип өмөтләнә. Әгәр был проблема ысынлап та юғарыла ултырғандарҙы борсой һәм улар был өлкәлә анығ эштәр башҡарырға (әммә Чечня миҫалындағы кеүек түгел) ниәтләй, шуға ла Дәүләт Советы Президиумы ултырышы Башҡортостанда үтә икән, БР Президенты үҙ блогында халыҡ фекерен белергә теләй икән, был демократия уйынының сираттағы акты ғына булмаһына ышанғы килә.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔БР Мәғариф министрлығында БДИ мәсьәләләре буйынса "Кайнар бәйләнеш" телефоны эшләй: 273-20-87. Бынан тыш, интернетта БДИ буйынса рәсми мәғлүмәт порталынан да мәғлүмәт алып була: (http://www.ege.edu.ru/).

✔Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле менән берлектә быйыл балалар хоры ойоштороорға ниәтләй. Хорҙа шөғөлләнеү өсөн 5-6 йәштән башлап өлкән сыныф уҡыусыларына тиклемгеләр саҡырыласаҡ. 14-се балалар музыка мәктәбендә балаларҙы һайлап алыу башланды ла инде. Һайлап алыу һәр кесаҙна һайын 18.30 сәғәттә үткәрелә. 284-45-54, 244-75-01 телефондары аша шылтыратырға мөмкин.

✔15-16 февралдә Өфөгә Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған сараларҙа ҡатнашыу өсөн "Төрксой" Халыҡ-ара төрки халыҡтары мәҙәниәте ойошмаһы делегацияһы киләсәк. Делегация составында "Төрксой"ҙың генераль директоры Дюсен Касеинов, уның урынбаҫары Фырат Пурташ, Төркиәнең мәҙәниәт һәм туризм министры урынбаҫары Кемаль Фахир Генч, Анкара ҡалаһының Кечиорен районы мэры Мостафа Ак, Төркиәнең башҡа эшлекле даирәләре вәкилдәре бар.

✔Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге БР Милли китапханаһында иң нык уҡылған китаптар күргәҙмәһе асылды. Күргәҙмәгә 50-ләп китап һайлап ҡуйылған. Улар араһында Чехов, Пушкин, Шекспир әҫәрҙәре, "Донъяның ҙур атласы", "Боронғо Грецияның мифтары һәм риүәйәттәре", "Слово о полку Игореве" баҫмалары бар.

✔Мартта Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылында ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәрҙең III төбәк-ара конкурсы үтә. Сарала ҡумыҙҙа уйнау оҫталары, өҙләүселәр, шулай уҡ ансамблдәр ҡатнаша. Ғаризалар Республика халыҡ ижады үҙәгендә 20 февралгә тиклем ҡабул ителә.

✔12-13 февралдә Өфөлә XXIX асыҡ Бөтә Рәсәй саңғы уҙыштары үткәрелә. Унда 10 меңләп өфөлө ҡатнаша тип көтөлә. 12 -дә Дим, Киров, Ленин, Совет, Октябрь райондарында 12 сәғәттә уҙышҡа старт бирелә. 13-дә уҙыштар Орджоникидзе һәм Калинин районы спортсылары өсөн "Биатлон" спорт комплексында үтәсәк.

✓ *Беҙ бөгөнгө көндә бал запасының 75 проценты тупланған 25 район биләмәһен дәүләт тәбиғи ҡурсаулығына әйләндерергә тәҡдим итәбеҙ. Ул "Башҡорт бал ҡорто" тип аталасаҡ, - ти Әмир Ишемғолов.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Дим** районында ғинуар аҙағында "Спорт - наркотиктарға ҡаршы" тип аталған акция сиктәрендә саңғы буйынса беренселек үтте. Уның маҡсаты - баш ҡала һәм республика спартакиадаларында ҡатнашыу өсөн райондың йыйылма командаһын туплау ине.

**Калинин** районының бер нисә мәктәбе, шул иҫәптән 140-сы башҡорт гимназияһы ла хакимиәт менән берлектә мәктәптәрҙең берҙәм мәғлүмәт базаһын булдырыу маҡсатында иң алдынғы коммуникация технологиялары компанияһы менән хеҙмәттәшлек итә. Был йүнәлештә әле төрлө саралар, түңәрәк өҫтәлдәр уҙғарыла.

**Киров** районы хакимиәте хәрби иҫәптә һәм запаста булыусыларҙы бронләүҙе иң яҡшы ойоштороу смотр-конкурсы һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләнгән.

**Ленин** районының Балалар ижады йорто базаһында "Ҡоштарға ҡышын ярҙам итәйек" акцияһы үткәрелде. Сара барышында балалар тағараҡтар, ҡоштар өсөн ҡышҡы йорттар эшләне. Шулай уҡ һүрәттәр конкурсында һәм викторинала ҡатнашты.

**Октябрь** районының 29-сы мәктәбе территорияһында яңы хоккей ҡумтаһы асылды. Бындағы ҡоролмалар Боҙ аренаһын хәтерләтә. Шунда уҡ "Алтын шайба" хоккей клубы призына район беренселеге финалистары - "Сәләмдәр" һәм "Юлаевсылар" командалары дуҫлыҡ матчы ойоштorҙо.

**Орджоникидзе** район хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә балаларҙың йәйге ялын, уларҙың мәшғүллеген, сәләмәтлеген нығытыуҙы ойоштороу эштәренә йомғаҡ яһалды. Әле 2011 йылғы һауыҡтырыу кампанияһын ойоштороу буйынса эштәр башланған. Ә инде 2012 йыл өсөн ғаризалар 1 ноябргә тиклем ҡабул ителә.

**Совет** район хакимиәте "Совет районының ете мөғжизәһе" акцияһын иғлан итә. Сараның маҡсаты - территориялағы визит карточкаһы булырҙай үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ тәбиғи, архитектура, мәҙәни объекттарҙы асыҡлау һәм пропагандалау. Конкурс ике этапта үтәсәк.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

### ҠЫШҠЫ ВАҠЫТҠА КӨН БӨТТӨ

**Рәсәйҙең башҡа төбәктәре кеүек, Башҡортостан да артабан ҡышҡы ваҡытһыҙ йәшәйәсәк. Сөнки уны бөтөн территорияла ла бөтөрәсәктәр. 8 февралдә ил Президенты Дмитрий Медведев ошондай белдереү яһаны.**

Уның фекеренсә, ҡышҡы ваҡыттан баш тартыу барлыҡ төбәктәр халҡына ла файҙаға ғына буласаҡ. Ул рәсәйлеләрҙе йылына ике тапҡыр сәғәт күсереү арҡаһында кисергән уңайһыҙлыҡтарҙан ҡотолдороп, оҙайлыраҡ көн яҡтыһы бирәсәк. Сәғәт уктарын яҙғыһын йәйге ваҡытҡа күсергәндән һуң, улар башҡаса бимазаланмаясаҡ. Ошо хаҡта норматив акттар әҙерләргә ҡушылған да инде.

### ҺАЙЛАНЫҢМЫ ӘЛЕ?

**Буласаҡ абитуриенттар 1 мартҡа тиклем Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырасаҡ фәндәрҙе һайлау менән мәшғүл. Сөнки юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү ҡағыҙәләре һәм талап ителгән имтихандар исемлеге раҫланған да инде.**

Имтихандарҙы алдан тапшырыу 20 апрелдә башланасаҡ. Был мөмкинлек менән айырым исемлеккә инган граждандар файҙалана ала. Ә имтихандарҙың беренсе тулҡыны 27 майҙан 20 июндә үтәсәк, икенсеһе 8-18 июлгә билдәләнгән.

БР Мәғариф министрлығының яҡынса мәғлүмәттәренән күренеүенсә, быйыл БДИ-ны 26500-ҙән ашыу уҡыусы тапшырасаҡ. Яңы ҡағыҙәләргә ярашлы, имтиханға өҫтәмә материалдар индерергә лә мөмкин. Мәҫәлән, математиканан имтиханға - линейка, физиканан - линейка һәм программалап булмаған калькулятор, химиянан - программалап булмаған калькулятор, географиянан - транспортир, линейка һәм программалап булмаған калькулятор. Бынан тыш, ғинуарҙа РФ Дәүләт Думаһы депутаттары БДИ тапшырғанда кеҫә телефондарын ҡулланыуҙы тыйҙы.

Ата-әсәләр, ғөмүмән, теләүселәр өсөн дә яңылыҡ бар: улар Берҙәм дәүләт имтихандарында йөмәгәт күҙәтеүселәре рәүешендә ҡатнаша ала. Әммә үҙ балалары, туғандары имтихан тапшырған участкала түгел. Әле теләүселәр өсөн аккредитация башланған.

### ҠУРСАУЛЫҠ БУЛЫРМЫ?

**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу комитеты ултырышында депутаттар Башҡортостанда бал ҡорттары ҡурсаулығын киңәйтеү мөмкинлеген ҡараны.**

Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов майҙаны буйынса республиканың өстән бер өлөшөн алып торған 25 район территорияһында бал ҡорттары өсөн ҡурсаулыҡ булдырырға тәҡдим итә. Уның фекеренсә, быңдай ҡурсаулыҡ Бөрйән популяцияһы нигеҙендә барлыҡҡа килтерелгән башҡорт тоҡомло бал ҡорттарын таҙа килеш һаҡлап ҡалыу өсөн кәрәк. Әлеге ваҡытта Бөрйән районында яҡынса 90 мең гектар майҙанлы "Алтын солоҡ" ҡурсаулығы эшләп килә, әммә Әмир Ишемғолов әйтеүенсә, тоҡомдо һаҡлап ҡалыу өсөн был ғына террритория етмәй.

-Бал ҡорттары был территориянан ситкә осоп сыға һәм унда башҡа тоҡомло бал ҡорттары менән ҡушыла. Һөҙөмтәлә - саф тоҡом юҡҡа сыға. Бынан тыш, бал ҡорттары араһында ауырыуҙар тап ошо юл менән тарала. Шуға ла беҙ бөгөнгө көндә бал запасының 75 проценты тупланған 25 район биләмәһен дәүләт тәбиғи ҡурсаулығына әйләндерергә тәҡдим итәбеҙ. Ул "Башҡорт бал ҡорто" тип аталасаҡ. Был территорияла бал ҡортонон миллионлаған күсен үрсетергә буласаҡ, - ти Әмир Ишемғолов.

Комитет составына ингән депутаттар был тәҡдимде төрлөсә ҡабул итте. Әлбиттә, республикала умартасылыҡты үҫтереү яҡшы эш. Тик республиканың 25 районын ҡурсаулыҡҡа әйләндерер алдынан был территорияларҙа кеше нисек йәшәйәсәк, нисек хужалыҡ эшмәкәрлеге алып барасағы тураһында ла уйларға кәрәклеген белдерҙе улар.

Ултырышта Әмир Ишемғолов Франция бал ҡорто продукттары нигеҙендә яһалған косметик сараларҙы һатып ала башлауҙары тураһында ла белдерҙе. Башҡорт апикосметикаһы менән башҡа илдәр ҙә ҡыҙыҡһына башлаған, мәҫәлән, Кувейт уны 5 тонна күләмендә һатып алырға риза. Быңдай тәҡдимдәр ғәрәп донъяһының башҡа илдәренән дә килә.

Әлегә быңдай күләмдә экспортҡа сығарыу өсөн республикала бал ҡорто продукцияһы нигеҙендә яһалған косметика күпләп етештерелмәй. Башҡорт балы менән дә шул хәл ҡабатлана. Әгәр ҙә биш йыл элек кенә уны нисек һатыу мәсьәләһе торһа, хәҙер балды күпләп һатып алырға теләүселәр Рәсәйҙең һәр төбәгендә бар.

-Шуға ла беҙ бөгөн балды һатып алыусы эҙләмәйбеҙ, ә уны етештереү күләмен арттырыу менән шөғөлләнәбеҙ. Бал ҡорто продукцияһы нигеҙендә яһалған косметик сараларға килгәндә, әлегә уның 25 төрө етештерелә. Артабан махсус етештереү цехы асып, беҙ косметика етештереү күләмен дә арттырасаҡбыҙ.

Әмир Ишемғолов һүҙҙәре буйынса, был цех Менделеев урамында урынлашасаҡ. Бында умартасылыҡ буйынса ҙур комплекс төҙөләсәк. Комплексҡа асыҡ һауала урынлашҡан умарталыҡ музейы ла буласаҡ.

### ПОЛИЦАЙҘАР КИЛӘ...

**РФ Президенты Дмитрий Медведев "Полиция тураһында" Законға ҡул ҡуйған. Ул 1 марттан көсөнә инәсәк һәм милиция полиция тип үҙгәртеләсәк.**

Ил башлығы буласаҡ полиция хеҙмәткәрҙәре алдына бурыстар ҙа ҡуйҙы. Иң беренсеһе - терроризмға ҡаршы тороу. Артабан инде милли һәм дини-ара дошманлыҡ тыуҙырырға тырышыуҙы иҫкәртеү, ойошҡан енәйәтселеккә, коррупцияға ҡаршы көрәш.

Аттестация үтеп, полицияға эшкә алынасаҡ милиционерҙарға Президент социаль гарантиялар ҙа вәғәҙәләй. Бында һүҙ юғары эш хаҡы ғына түгел, торлаҡ, медицина хеҙмәтләндереүе, белем алыу проблемаларын да хәл итеү хаҡында бара. Ә инде киләһе йылдан полиция лейтенантының эш хаҡы 45 мең һумдан да кәм булмаясаҡ.

### ХАҠТАР ТАҒЫ ЛА АРТҠАН

**Башҡортостанстат төбәктә ғинуар айына аҙыҡ-түлеккә уртаса ҡулланыу хаҡтарын асыҡланы. 2010 йылдың декабре менән сағыштырғанда, хаҡтар һаман артыуын дауам итә.**

Башҡортостан буйынса онға хаҡ уртаса 1 һумға артҡан һәм хәҙер уның килоһы 18,5 һум тора. Арыш икмәге лә 1 һум 50 тингә ҡыйбатланған. Иң ҡыйбатлы икмәк Сибайҙа һәм Өфөлә - 27,87-38 һум. Республиканың башҡа ҡалаларында икмәкте 23 һумға һатып алып була. Баш ҡалала аҡ икмәк осһоҙораҡ - 25,44 һум. Стәрлетамаҡта һәм Сибайҙа аҡ икмәкте 28 һумға һаталар. Дөйөм Башҡортостан буйынса аҡ икмәкҡә хаҡ 1 һум 43 тингә күтәрелгән. Вермишелгә лә хаҡ күтәрелеүе күҙәтелә. Төбәктә уның уртаса хаҡы 33,05 һум. Өфөлә был аҙыҡ төрөнөң килограмы - 38,56 һум.

Йәшелсә һәм емеш-еләккә лә хаҡтар артҡан. Белгестәр быны былтырғы йылдың ҡоро килеүе һәм уңыштың насар булыуы менән аңлата. Мәҫәлән, ғинуар айында картуфтың килоһы 41,19 һум тәшкил иткән. Кәбеҫтә - 32,47, кишер - 34,20 һум. Үткән йылдың декабре менән сағыштырғанда алма 7 һумға артҡан.

Ғинуарҙа һыйыр итенең килограмы 196,40 һум торған. Баш ҡала ит бер аҙ ҡыйбатыраҡ - 208,2 һум. Һарыҡ һәм суҫҡа ите лә ҡиммәтләнгән. Ә тауыҡ итенең хаҡы 30 тингә төшкән һәм хәҙер 92,87 һум тора. Һөттөң 1 литры 36 тингә ҡыйбатланған. Сибай сауҙа селтәрҙәрендә һөткә хаҡ 1 һум 20 тингә артҡан. Аҡ майға хаҡ 11 һумға күтәрелгән. Үҫемлек майына ла хаҡтар артыуын дауам итә. Бер ай эсендә ул яҡынса 5 һумға ҡиммәтләнгән.

Аҙыҡ-түлеккә хаҡтар дөйөм Рәсәй буйынса ла артҡан. Росстат мәғлүмәттәренә ярашлы, ҡарабойҙай ярмаһы - 2,5, бойҙай - 1,9 процентҡа, маргарин, үҫемлек майы, шәкәр, һыйыр ите - 0,5-0,7 процентҡа күтәрелгән. Кәбеҫтә һәм кишергә 2 процентҡа хаҡ артһа, һуғандың хаҡы хәҙер 1,9 процентҡа ҡиммәтерәк.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостандың яңы ойоштолған "Өфө" футбол командаһы Кавказда уйынсылар һайлау йыйынында ҡатнашҡан. Кисловодск ҡалаһында беҙҙең команда ете тапҡыр иптәштәрсә осрашыу уйыны үткәрә һәм алты тапҡыр еңеүсе була. Тик Ҡаҙағстандың "Каспий" командаһы менән осрашыу ғына 1:1 иҫәбенә тамамлана. Киләһе уйындар Төркиәнең Анталья ҡалаһында 13 февралдән 28 февралгә тиклем үтәсәк.

✓Былтыр Өфө ҡала хакимиәтенә граждандарҙан 26,7 мең мөрәжәғәт килгән, шулар араһынан ялыуҙар рәхмәт һүҙҙәренә ҡарағанда 60 тапҡырға күберәк. Мөрәжәғәттәрҙе анализлау шуны күрһәтә: ҡала халҡын тәү сиратта төҙөлөш, торлаҡ-коммуналь өлкә, йәмәғәт транспорты эше, юлдарҙы ремонтлау мәсьәләләре борсой. Икенсе урында мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, сауҙа, социаль тәьминәт мәсьәләләре тора. Был мөрәжәғәттәр буйынса тейешле саралар күрелгән.

✓Февраль аҙағына тиклем Өфөнөң Зорге урамы, 15/1 адресы буйынса Граждандарҙы реабилитация һәм санаторий-курорт дауаланыу саралары менән тәьмин итеүсе республика үҙәге эшләй башлаясаҡ, тип хәбәр итәләр БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан. Үҙәктә һуғыш ветерандарына һәм инвалидтарға санаторий-курорт учреждениеларына путевкалар алырға, автотранспорт, инвалид коляскалары, протез-ортопедия әйберҙәре менән тәьмин итеүҙә ярҙам итәсәктәр. Граждандар ғаризаларын үҙҙәре йәшәгән урындарҙағы халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәктәренә бирә алалар.

✓Рәсәй Һаҡлыҡ банкыһының Урал банкыһы клиенттарҙы халыҡ-ара банк карталарына бәйле мутлыҡтарҙың артыуы хаҡында иҫкәртә. Күп осраҡта мутлыҡтар кәрәҙле телефон аша тормошҡа ашырыла: миҫал өсөн, банк картаһы хужаһына уның картаһына бәйле "проблема" хаҡында смс-хәбәр килә һәм уны хәл итеү өсөн банкының хәүефһеҙлек хеҙмәтенә шылтыратырға тәҡдим ителә. Клиент смс-хәбәрҙәге телефон аша шылтыратһа, уға карта ярҙамында банкомат аша күрһәтелгән иҫәпкә (ысынында - енәйәтселәр кеҫәһенә) йәки кәрәҙле бәйләнеш өсөн аҡса түләргә саҡыралар. Урал банкының хәүефһеҙлек хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, банк үҙ клиенттарынан бер ваҡытта ла реквизиттар талап итмәй һәм ниндәйҙер операция үткәрергә саҡырмай.

СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

# РИШҮӘТ АЛЫУСЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ,



## ришүәт биреүсе лә енәйәтсе

**Үҙәк гәзиттәрҙең береһе Transparency International ойошмаһының Халыҡ-ара коррупционерҙарға ҡаршы көрәш көнө алдынан ришүәтселек буйынса үткәргән сираттағы тикшереү һөҙөмтәләрен баҫҡайны.**

Унда Рәсәйҙә кемгә иң йыш ришүәт биреүҙәре билдәләнгән. Иң күбе милиционерҙарға бирелә икән ул - 27,7 процент. Медицина һәм кадастр хеҙмәттәре хеҙмәткәрҙәре уларҙан саҡ ҡына ҡалыша. Уларҙың тәүгеһенә ришүәттең - 20,7, икенсеһенә 20,2 проценты тәтей. Шулай уҡ мәктәп уҡытыусыларына, балалар баҡсалары тәрбиәселәренә лә ҙур ғына өлөш сыға. Уларҙы тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың 18 проценты "бүләкләгән". Таможняла эшләүселәр ҙә мул ғына ҡуш эләктерә - яуап биреүселәрҙең 10 проценты уларға тауыш биргән.

Һорау алыуҙар буйынса, һәр дүртенсе Рәсәй кешеһе ришүәтсе тип табылһа ла, илдә коррупцияның дөйөм кимәле кәмеүе асыҡланған. Тимәк, беҙ ришүәтте былтыр элекке йылға ҡарағанда аҙыраҡ биргәнбеҙ (2010 йылда илдә һорау алыуҙа ҡатнашҡандарҙың 26 проценты ришүәт биргән, унан алда 31 процент булған). Уның ҡарауы тикшереүҙә ҡатнашҡан 86 илдә коррупцияның артыуы күҙәтелгән. Үҫешкән илдәрҙә лә яуап биреүселәрҙең 70 проценты ришүәт биреүселәр ҙә, алыусылар ҙа күбәйеүен билдәләй. Эксперттар фекеренсә, быға донъяуи финанс көрсөгө сәбәпсе.

Һуңғы осорҙа илдә коррупцияға ҡаршы төрлө саралар планлаштырыла, закондар ҡабул ителә, "Коррупция - ул енәйәт", "Коррупционер - енәйәтсе", "Ришүәтсенең урыны - төрмәлә" - тигән һүҙҙәр йыш яңғырай.

Коррупцияны беҙ йыш ҡына ришүәт алыу тип кенә аңлайбыҙ. Ришүәт алыусыны ғына коррупционер тибеҙ. Ә асылда уны биреүсе, иң беренсе, үҙе коррупционер бит. Ришүәтселәрҙе, коррупционерҙарҙы, шулай итеп, үҙебеҙ булдырабыҙ, үҙ ҡулыбыҙ менән әүәләйбеҙ.

Яңыраҡ бер танышым ҡыҙыҡ итеп һөйләгәйне. Күрше ҡалаларҙың береһенә балаһы менән медицина тикшереүе үтергә барған. Бер ҡулында - сабыйы, икенсеһендә уның йүргәк-кейемдәре һалынған пакет булған. Мөксәйын ишек төбөндәге ултырғысҡа ҡуйған да табип янына үткән. Баянан бирле пакеттан күҙен алмаған табип ҡаршыһындағы медсестра йүгереп килеп ҡатындың ҡулынан баланы ала, иркәләп, наҙлап ҡына һөйләшә, ти. Һүҙ араһында, ишек яғына ымлап, күстәнәсегеҙ булһа, анау бүлмәгә ҡуйығыҙ, ти икән. "Эй, оялдым. Исмаһам, бер литр бал булһа ла алып килмәгәнмен, тип үкендем", - ти танышым.

Эйе, ысынлап та, йомош менән ҡайҙа ғына барһаҡ та, беҙ барған кеше нимәләр өмөт итеп, ҡулыбыҙға ҡараһа, унайһыҙланып ҡалабыҙ.

Бүләк, күстәнәс биреп, үҙебеҙ шундай күренеште тыуҙырҙыҡ та инде. Ришүәтсе көрәшкәндән һуң да усына ҡарай тиҙәр бит. Берәй ҡайҙа сиратһыҙ-ниһеҙ генә үтеп, йомошобоҙҙо йомошлап сығыр өсөн дә "презент" тигән булып, үҙебеҙ ғүмерҙә лә тәмләп ҡарамаған ҡиммәтле шарап йәки бер ҡап булһа ла кәнфит тотоп барабыҙ. Шуның менән үҙебеҙҙе башҡаларҙан өҫтөнөрәк тоябыҙ, йәнәһе, бына мин - ниндәй шәп кеше!

Юҡ, мин бүләк биреүгә, һәҙиә-күстәнәс ебәреүгә һис тә ҡаршы түгелмен. Бүләкләшеү - изге эш, бүләк таратыу - хәйерле ғәмәл. Тик шуны оноторға ярамай: бүләк биреү бер кемгә лә ҡамасау тыуҙырырға тейеш түгел. Миҫалға юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеүҙе алайыҡ. Мәғлүм булыуынса, унда йыл һайын билдәле урындар ғына бүленә. Бүләк, аҡса биреп инеүселәр асылда был урынға ысын лайыҡ уҡыусының урынын ала. Бүләк бирешеү тураһында изге хәҙистә шулай тиелә: "Бүләк - ул бер-береңә ихлас күңелдән, ихтирам һәм һөйөү билдәһе итеп бирелә. Уны биреүсе бүләк бәрәбәренә ниҙер өмөт итергә тейеш түгел, йәғни уны тапшырғанда күңеле рыяһыҙ, саф булырға тейеш".

Бөтә диндәр ҙә ришүәтте харам тип иҫәпләй. Ул ниндәй формала һәм ниндәй исем аҫтында бирелгән булһа ла. Мәҫәлән, "бүләк" исеме менән биреү уны харамдан хәләлгә әйләндерә алмай. Беҙ, юғиһә, шуны йыш ҡына иҫтән сығарабыҙ. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Хаттар көтәбеҙ.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Тәҡүәлек һәм ихлас иман ғына бәндәне ришүәт алыуҙан һаҡлай ала. Әгәр дини ышаныуҙарҙы кеше тормошонан алып ташлаһаң, ришүәтселек менән көрәшеүҙең файҙаһы булмаясаҡ. Хәҙер һеҙгә күңеле иман нуры менән яҡтыртылған бер кешенең ришүәтселеккә ҡағылышлы һорауын тәҡдим итәйек. Ул шундай һорау бирә: "Мин дәүләт ойошмаһында эшләйем. Дәүләт телефонын шәхси мәнфәғәттәрҙә файҙаланырға ярамауын яҡшы беләм. Гонаһынан ҡурҡһам да мин был талаптарҙы үтәңкерәмәйем, өйөмә шылтыратҡылайым".**

**Быны ниндәй була иманлы кеше, күрҙегеҙме? Ул хәләл менән харамды айыра белә! Кемдер берәү дәүләттең малын үҙенеке тип һанай, башҡалар иһә эштән өйөнә шылтыратыу гонаһынан да ҡурҡа, сөнки дәүләт телефонын харам маҡсаттарҙа ҡулланырға ярамауын белә.**

**Был һорауға яуабыбыҙ шундай булыр: эшегеҙҙәге телефонды шәхси маҡсаттар өсөн ҡулланмағыҙ, ҡулланаһығыҙ икән, аҡсаһын түләгеҙ. Һәр төрлө насарлыҡты булдырмауҙың иң үтемле юлы - иманды нығытыуҙыр. Ришүәтселек тураһында һөйләшкәндә лә шуны әйтергә тейешбеҙ. Бәндә, ришүәтселек батҡағына кермәҫ өсөн, Ислам дине әмерҙәрен һис шикһеҙ үтәргә, Исламға лайыҡлы рухи юғарылыҡҡа күтәрелергә тейеш.**

ҺОРАУ-ЯУАП

# ХЕҘМӘТ ВЕТЕРАНЫ ИСЕМЕН...

## әлегә бирмәйҙәр

**Минең өҙләкһеҙ педагогик эш стажым, институтта уҡыған йылдарҙы иҫәпләмәгәндә - 33 йыл да 10 ай. Пединститутҡа инерҙән алда мин үҙемдең районымдағы тыуған мәктәбемдә уҡыттым. Былар бөтәһе лә минең хеҙмәт кенәгәһендә дөйөм эш стажы 1966 йылдан тип күрһәтелгән. Ә дөйөм стаж 38 йыл да 10 ай. Мин ошо стаж менән хеҙмәт ветераны була аламмы?**

"Башҡортостан Республикаһының "Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡоралды Көстәр ветерандары тураһында"ғы БР Законына үҙгәрештәр индереү тураһында 2008 йылдың 24 ноябрендәге БР Законы менән "Оҙайлы эш стажы булған (ирҙәр - 40 йылдан да кәм булмаған, ҡатын-ҡыҙҙар - 35-тән дә кәм булмаған) хеҙмәт ветераны" тигән өҫтәмә категория булдырылғайны. БР Хөкүмәте Ҡарары менән (09.02.2010 йыл) был исемде биреү тәртибе һәм шарттары раҫланғайны. Ләкин былтыр 29 мартта "Башҡортостан Республикаһының ҡайһы бер закон акттарының айырым положениеларының ғәмәлдә булыуын туктатып тороу тураһында" БР Законы ҡабул ителде. Атап әйткәндә, закондың граждандарға әлеге исемде биреү тураһындағы өлөшө, шулай уҡ ошо исемгә эйә булған граждандарға социаль ярҙам саралары күрһәтеү өлөшө ғәмәлдән туктатылып торҙо.

**БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Фидус Ямалетдинов был ҡарарға бына ниндәй нигеҙләмә бирҙе:**

- Һуңғы ике йылда Рәсәй Хөкүмәте сәйәсәтендә халыҡтың аҙ тәьмин ителгән ҡатламына социаль ярҙам, эҙмә-эҙлекле адреслы сәйәсәт булдырыу һәм уны тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән үҙгәрештәр барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, ошо йылдың 1 ғинуарынан пенсионерҙарға ярҙамдың яңы сараһы - пенсияларына федераль социаль өҫтәмә булдырылды. Уны хәҙер беҙҙә 75 меңдән ашыу пенсионер ала. Уның уртаса күләме 600 һумға яҡын. Өҫтәүенә, пенсионерҙарҙың килеме пенсияларҙы сираттағы индексациялау, валоризация процедураһы иҫәбенә лә артты. 2010 йылда ҡартлыҡ буйынса пенсия күләме 8 мең һум самаһы тәшкил итһә, 2012 йылға ул йәшәү минимумы дәүмәленән ике ярым тапҡырға уҙып китергә тейеш.

Пенсионерҙарға адреслы ярҙам буйынса күрелгән саралар һөҙөмтәһендә 2011 йылда республикала килемле йәшәү минимумынан, йәғни 4571 һумдан да аҙыраҡ тәшкил иткән пенсионер булмаясаҡ. Ә был, үҙегеҙ күреүегеҙсә, 2010 йылдың өсөнсө кварталында билдәләнгән йәшәү минимумының уртаса айлыҡ дәүмәле - 4125 һумдан артығыраҡ.

Шуны ла билдәләү кәрәк: Башҡортостанда өлкән йәштәге граждандарҙы социаль яҡлау тулы күләмдә, финанслау күләмен даими арттыра барып ғәмәлгә ашырыла. 2007 йылда уҡ әле хеҙмәт һәм тыл эшсәндәренә берҙәм аҡса түләүҙәре күләме 1,5 тапҡырға арттырылғайны. 2011 йылдың 1 ғинуарынан иһә берҙәм түләүҙәр 5,9 процентҡа арттырылды. 2009, 2010 йылдарҙа берҙәм аҡса компенсацияһы күләме индексацияланғайны, быйыл иһә ул 15 процент кимәлендә индексацияланасаҡ. Берҙәм аҡса түләүҙәре менән 376 меңдән ашыу хеҙмәт һәм тыл ветераны тәьмин ителәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Газ йыйылһа...



Эскә газ йыйылыу ҡабаланып ашаған ашау, тәмәке тартҡанда һөйләшеү, ашағанда һауа йотоу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Газ йыйылыуҙы иҫкәртеү өсөн: ❖ һөт ризыҡтарын ашауҙан туҡтап тороғоҙ; ❖ углеводлы фасоль, соя, борсаҡ, редис, шалҡан, кәбеҫтә, абрикос һәм банан ашауҙы сикләгеҙ; ❖ ауыҙ аша һауа инмәһен өсөн ашығып ашамағыҙ, һөйләшмәгеҙ; ❖ газлы эсемлектәр, кеүәҫте һалҡын көйө һәм ҡабаланып, аяғөҫтә эсмәҫкә.

Әгәр ҙә эскә газ тулһа: ❖ әүҙемләштерелгән күмер ашағыҙ; ❖ әнис (укроп), тмин төнәтмәһе эсегеҙ; ❖ 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыуға 2 ҡалаҡ ваҡланған бөпембә һалып, 8 сәғәт төнәтергә. Көнөнә ашар алдынан 4 тапҡыр сирек стаканлап эсергә; ❖ 1 стакан ҡайнаған һыуға 1 балғалаҡ кипкән әрем үләне һалып, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Ашар алдынан 15 минут алда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

## Үксәләргә шпор сыҡһа...

Был ауырыу һәр кемдең теңкәһенә тейә, атлап йөрөүҙе ауырлаштыра. Уны бөтөрөү өсөн: ❖ аяҡтарҙы көн дә кисен аш содаһы һалынған йылы һыуға тығып ултырырға. Шунан шпор ыҙалатҡан урынға сәй бәшмәге, уның төнәтмәһендә сылатылған сепрәкте ябырға. 3-4 сәғәттән сепрәк кибә, уны тағы сылатып ябаһың. 5-10 көндән шпор бөтәсәк.

## Бөйөрҙәге таш

Бөйөрҙә таш булһа, йәбешеүсәнлеге бөтөү менән иртә яҙҙа ҡайын япрағын йыйып киптерегеҙ. Япраҡтарҙы сепрәк тоҡсайҙа һаҡлағыҙ. Дауаланыу өсөн бер балғалаҡ кипкән япраҡты бер стакан ҡайнап торған һыуға һалып, 20-30 минут төнәтегеҙ, һөҙөгөҙ. Бер балғалаҡ балды ҡаба-ҡаба төнәтмәне сәй кеүек эсегеҙ. Балға бер әстрхан сәтләүегә тешен дә ҡушырға була, тик бер айҙан һуң балды кире сәтләүекһеҙ ашағыҙ. Төнәтмәне көнөнә 3-4 мәртәбә ас ҡарынға эсергә. Дауаланыу осоронда, ғөмүмән, бөйөргә таш ултырған ваҡытта итле аш, итле ризыҡ, һөт ризыҡтары ҡулланмаҫҡа.

## Глаукоманан дауа

Һуған һутын һығып, 1:1 күләмендә бал менән болғатырға ла, көнөнә 2-3 тапҡыр күҙҙәргә 1-2 тамсы тамыҙырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ИҢ ХӘТӘР АФӘТ

**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмғәт хәрәкәте сағырыуы буйынса февраль башында Башҡортостанда РФ Федераль Йыйылышы Дәүләт Думаһының алкоголь буйынса эксперт советы ағзаһы, Халыҡ айыҡлығы өсөн көрәш союзы рәйесе, "Айыҡ Рәсәй" йәмғәт хәрәкәте рәйестәше, собриолог-профессор Владимир Георгиевич Жданов лекциялар уҡыны. Ул ағза булып торған Психоаналитиктарҙың халыҡ-ара ассоциацияһы сиктәрендә бөгөн бөтөн ил генә түгел, бөтөн донъя буйынса халыҡ сәләмәтлеге университеттары селтәре ойошторолған. Уларҙа медицина ысулын ҡулланмай ғына халыҡтың рухи, йән сәләмәтлеген нығытыу, бик күп насар ғәҙәттәрҙән арындырыу мөмкин. Бөгөн гәзит уҡыусыларҙы Владимир ЖДАНОВтың эскелек, айыҡлыҡ тураһындағы фекерҙәре менән таныштырабыҙ.**



# ХЕҘМӘТ МАЙМЫЛДАН КЕШЕ ЯҺАҒАН,

## ә эскелек кешенән маймыл яһай

### Урыҫ (башҡорт, татар) тәреһе

Бөгөн йәмғиәт аңына, алкоголь, тәмәке, наркотик - ул беҙҙең өҫкә тып-тып тамып торған ямғыр, тигән фекер һеңдерелә. Ямғыр яуа, уны бер нисек тә туҡтатып булмай, әммә халыҡ ерҙәге күләүеккә батмаһын, күләүектән эсмәһен өсөн нимәлер эшләргә мөмкин. Беҙҙең арала халыҡтан эскесе яһарға тырышыусы ҡеүәтле көстәр бар. Тәү сиратта - улар ошо ҡурҡыныс ағыуҙы етештереүселәр һәм һатыусылар, ошо бизнесты яҡлап, үҙҙәренең кеҫәһен ҡалынайтыусы власть вәкилдәре, халҡыбыҙҙы - башҡорттарҙы, татарҙарҙы, рустарҙы һәм башҡа милләт вәкилдәрен эсереп, һуңынан иркенләп илебеҙҙен байлығын таларға хыялланған донъя империализмы. Улар барыһы бергә итальян теленән ингән бер һүҙ менән атала - мафия. Был мафия халыҡты эсереү, уны юҡҡа сығарыу, ер йөҙөнән юҡ итеү менән шөғөлләнә. Кемдер быны таныр-ға теләмәй икән, тимәк, ул был проблеманы бөтөнләй аңламай.

Донъя социологтарын бөгөн "урыҫ тәреһе" тип аталған атама борсой. Ул шартлы рәүештә генә шулай атала, ысынбарлыкта ул урыҫ, башҡорт, татар, һ.б. милләт һәм халыҡ тәреһе булыуы мөмкин. Проблеманың асылы бик ябай: уҙған быуаттың 1965 йылында Рәсәйҙә 1 мең кешегә үлем һәм тыуым күрһәткесе 6 һәм 20 кеше тура килде. 35 йыл үткәс, 2000 йылда барыһы ла киреһенсә үҙгәрә: мең кешегә тыуым - 6, ә үлем 20 кеше булып китә. Ошо һыҙыҡтарҙы тоташтырып, быуаттар алмашынғанда халыҡҡа ни булғанын, ни өсөн сәскә атыусы ил үлеп барыусы йәмғиәткә әүерелгәнен аңларға тырышалар. Ғәмәлдә был тәре бөтөнләй икенсе төрлө. 1965 йылда үлем мең кешегә 6 кеше тәшкил итеп, был донъяла иң түбән күрһәткес була һәм ул медицинаның юғары ҡаҙанышы тип күрһәтелә. Әммә 1965 йылдан 1980 йылға тиклем үлем осраҡтары кинәт кенә артып, 1980 йылда мең кешегә 12 кеше кимәленә етә. Был фажиғәгә тиңләнә, 15 йыл эсендә үлем ике тапҡырға арта. Быға ниндәйҙер аңлатма табырға кәрәк була һәм уны һуғыш шаңдауына һылтайҙар, йәнәһе, һуғыш ваҡытында халыҡ нығ интегә һәм хәҙер шул йылдарҙа әсеһен-сөсөһөн күреүселәр яҡты донъя менән хушлаша. Әммә 1980-1985 йылдарҙа үлем осраҡтары тотороҡлана, 1987 йылда ҡабат үҙенең иң түбән кимәленә етә: мең кешегә - 6 кеше. 1987 йылдан үлем осраҡтары тағы ла арта башлай һәм 1994 йылда 1мең кешегә 20 кеше кимәленә етә. Хәҙер был күрһәткес 15-20 тирәһе.

Ә ошо осорҙа тыуым нисек була һуң? Ул үлемдең тап киреһен ҡабатлай. Фән тарихында бындай күренеш бөтөнләй булғаны булмай. 1965 йылда 1 мең кешегә 20 бала тыуа, Рәсәй тыуым буйынса Албаниянан ҡала донъяла икенсе урында килә. Әммә артабан тыуым ҡапыл кәмей башлай һәм 1980 йылда мең кешегә 14 кеше тура килә. Быны инде ғалимдар халыҡтың ҡалаларға күпләп күсенеүе, ә ҡалаларҙа бала тапмауҙары менән аңлатырға тырыша. 1980-1985 йылдарҙа бала табыу кимәле тотороҡлана, ә 1985-1987 йылдарҙа илдә быҒаса күрелмәгән демографик шартлау күҙәтелә - тыуым 1 мең кешегә 20 бала тәшкил итә. Ләкин 1988 йылдан тыуым ҡапыл аҫҡа тәгәрәй башлай һәм 1994 йылда 1 мең кешегә 6 кеше тура килә. Ошо алты йылда - 1988-1994 йылдарҙа булған күренештәр тап "урыҫ тәре"һен килтереп сығара ла инде.

Хөкүмәт хәҙер тыуымды күтәреү өсөн төрлө алымдар ҡулланып ҡарай. Әле әсәлек капиталы хәл-торошто әҙерәк яҡшыртты. Әммә ни өсөн бөгөн демографик көрсөк алдында тороуыбыҙҙы бер ғалим да бер нисек тә аңлата алмай. Ә аңлатмалар өҫтә генә ята.




### Эскелек кимәле иң юғарыһы

Рәсәйҙә йән башына алкоголь ҡулланыу - эскелек кимәленең асыҡ күрһәткесе. Йылына дөйөм эселгән шарап, һыра, араҡы алына һәм унан саф спирт өлөшө халыҡ һанына бүленә. Әгәр алкоголь ҡулланыуҙың графигын төҙөһәк, ул үлем күрһәткесе менән тап киләсәк. Йәғни, 1965 йылда йылына йән башына 6 литр спирт эселгән. 1980-1985 йылдарҙа алкоголь баҙары тотороҡлана һәм үлем күрһәткесе лә түбәнәйә. 1985-1988 йылдарҙағы алкоголгә ҡаршы компания һөҙөмтәһендә араҡы заводтары, магазиндар ябыла, йән башына спирт ҡулланыу 5 литрҒаса кәмей. Үлем тәбиғи кимәленә - 6 процентка төшә. Әммә власҡа халыҡтың айығыуына ҡаршы көстәр килә һәм улар илдә хосусилаштырыу сәйәсәте үткәрә. Ә хосусилаштырыуҙың француз теленән бер тәржемәһе "талау" тигәнде аңлата. Тимәк, дөйөм халыҡ милкен таларға һәм уларҙы бер нисә олигархҡа өләшеп бирергә кәрәк була. Ә эскесе һәм ауырыу кешене талауы айыҡ һәм сәләмәт кешене талауға ҡарағанда күпкә еңелерәк. Шуға ла халыҡ тарихында быҒаса булмаған эсереү программаһы тормошҡа ашырыла башлай. 1994 йылда йән башына саф спиртты ҡулланыу кимәле 24 литрға етә. Тап 1992-1994 йылдарҙа илебеҙгә бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ һәм ҡаршылыҡһыҙ тотош составтар менән Роял спирты индерелде. Уның хаҡы тинләп һаналды, шуға ла биҙрәләп һатылды. Ә ошо спиртты эсеп тотош районлар ҡырылды. Мәҫәлән, Иркутск өлкәһененң бер районында Роял спиртын эсеп бер көндә 630 кеше үлә.

2008 йылда Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев ысынбарлыкты асып һалды - илдә йән башына йылына 18 литр саф спирт эселә. Шулай итеп, милләттен, халыҡтың юҡҡа сығыуы, демографик һәләкәт сәбәбе - алкоголь. Әммә алкоголь артында тороусы алкомафия һәм власть сәйәсәте 2009 йылға тиклем Рәсәйҙең иң ҡурҡыныс проблемаһын - алкоголь проблемаһын күрергә лә, аңларға ла теләмәне.

### Йәмғиәт зәғифләнә бара

Халыҡтың популяцион деградацияһы коэффициенты мәктәп эскәмйәһе артында ултырған физик үҫеше норманан тайпылған балалар проценты менән билдәләнә. Уйлап ҡараһаң, ниндәйҙер зәғифлек менән тыуыусы балаларҙың һаны балаларҙың тыуыу һыҙығы менән тап килергә тейеш һымаҡ - балалар тыуа, уларҙың нисәлер проценты физик яҡтан зәғиф була. Юҡ шул, зәғиф балаларҙың тыуыуы алкоголь һыҙығы менән 97 процентҡа ғына тап килә. 1965 йылда йән башына 6 литр саф спирт тура килһә, физик үҫешендә тайпылыш булған балалар 8 процент тәшкил итә, алкоголь баҙары ике тапҡырға арта - зәғиф балалар һаны ла ике тапҡырға арта. Алкоголь баҙары тотороҡлана - зәғиф балалар тыуыуы ла тотороҡлана. 1985-1988 йылдарҙа илдә ысын мөғжизә була - зәғиф балалар тыуыуы ярты проценттан да кәмерәк була, йәғни 32 тапҡырға кәмей. Тәүҙә ышанмаҫлыҡ, алкоголде ике тапҡырға кәметкәс, зәғиф балалар тыуыу күрһәткесе лә ике тапҡырға кәмергә тейеш ине бит. Анализ һөҙөмтәләре шуны асыҡланы: 1985-1988 йылдарҙағы айыҡлыҡ компанияһы тәү сиратта йөштәргә ҡағылған һәм улар айыҡ тормошҡа күскән, сәләмәт балалар тапҡан. Тап 1985-1988 йылдарҙа тыуған балалар - бөтөн милләттәрҙең дә генетик өмөтө. Әммә тап шул балаларҙы, уларҙың генофондын юҡҡа сығарырға өмөтләнеп, Клинский артынан йүгерттеләр. 1998 йылда Рәсәй буйынса 37 процент физик кәмселекле бала тыуһа, иҫерек төбәктәрҙә ул 50 проценттан да артып китә.

Шулай итеп, халыҡты дебилләштереү бара. Алкомафия һәм властың сәйәсәте төп проблемаға - йөштәрҙе алкоголгә ылыҡтырыуға кәртә ҡуймайынса тыуымды дәртләндерергә тотондо. Әгәр урамда һәр икенсе ҡыҙ ҡулына һыра тотоп, ауыҙына тәмәке ҡабып үтә икән, нисек дебил балаларҙың тыуыуын дәртләндерергә мөмкин? Алкоголде бөтөрөгөҙ - тыуым үҙенән-үҙе артасаҡ.

Әйткәндәй, был проблема тотош Рәсәйгә ҡағылмай. Кавказда, мәҫәлән, бындай проблема бөтөнләй юҡ. 2004 йылда Рәсәйҙең иң иҫерек Ярославль өлкәһендә үлем кимәле 1 мең кешегә 20,7 була, ә иң түбәне, һуғышта үлгәндәрҙе лә индереп - Чечен Республикаһында: мең кешегә - 3,8. Бөгөн ҡайҙа һуғыш бара? Чечняламы, Ярославлдәме? Ярославлдә кешеләрҙе алты тапҡырға күберәк үлтерәләр. Мосолман традициялары менән йәшәгән Чечняла, Дағстанда, Ингушетияла алкоголь юҡ, ғаиләләр ҙур һәм сәләмәт. Чечен һуғышынан һуң унда бер генә балалар йорто ла төҙөлмәне, бөтөн етемдәрҙе ғаиләләргә алдылар, ә беҙҙә балалар йорттары социаль етемдәр - ата-әсәләре эскелек арҡаһында ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителгәндәрҙең балалары менән тулған.

### Ни өсөн кеше эсә?

Кешенең эсеүенең, тәмәке тартыуының, наркотиктар ҡаҙауының ни бары өс кенә сәбәбе бар. Беренсеһе - ошо наркотиктарҙы ҡасан теләйһең, шунда һатып алыу мөмкинлеге. Икенсеһе - кешеләрҙең ышаныуы. Өсөнсөһө - наркобәйлелек. Башҡа сәбәптәр юҡ! Ә алкоголь проблемаһын хәл итеүҙең бөгөн ике юлы бар: алкоголгә ҡаршы көрәш һәм айыҡлыҡ өсөн көрәш. Ике юлы булғас, уларҙың ике фәнни нигеҙе булырға тейеш. Тәү ҡарашҡа улар икеһе лә бер үк маҡсатҡа ҡоролған кеүек. Әммә улар икеһе ике йүнәлештә эшләй.

Алкоголгә ҡаршы көрәш теорияһы нигеҙендә алкоголде әҙләп, мәҙәни эсеү теорияһы ята. Айыҡлыҡ өсөн көрәш нигеҙендә - айыҡлыҡ теорияһы. Уның латинса атамаһы - собриология. Айыҡлыҡ теорияһын илдең аҡыллы кешеләре - Ф. Достоевский, Л. Толстой, академиктар Бехтерев, Павлов, Углов булдырған. Уларҙың эшен дауам итеп, Халыҡ-ара айыҡлыҡ академияһы ойошторолған. Ул Стокгольмда теркәлгән. Ә мәҙәни эсеү теорияһы авторҙарын эҙләп таба алмаҫһығыҙ, сөнки бындай теория булмаған кеүек, уның авторҙары ла юҡ. Бары тик алкомафияның, мәҙәни эсегеҙ, эскесегә әйләнмәҫһегеҙ, тигән матур әкиәте генә бар. Һәм шуны йөштәрҙең мейеһенә һеңдерәләр. Быны өсөн йөҙҙәрсә миллиард аҡса сарыф ителә.

Айыҡлыҡ теорияһы, алкоголь ерҙәге иң ҡурҡыныс наркотик, ти. Әйткәндәй, 1978 йылда Халыҡ-ара Һаулыҡ һаҡлау

✓ ***Кемдер алкоголизмды сир тип иҫәпләй икән, ул төптән яңылыша. Алкоголизм - алама ғәҙәт. Алкоголизм менән наркоманлыҡтың сир түгеллеген раҫлаусы бер нисә ысул бар.***

ойошмаһы үҙенең 27-се сессияһында рәсми рәүештә алкоголде донъялағы беренсе һанлы наркотик тип таный. Героин - икенсе, тәмәке алтынсы урында тора. Һәм бөтөн илдәрҙе алкоголь менән наркотикҡа ҡаршы көрәшкән кеүек көрәшергә саҡыралар. 30 йыл эсендә донъяның 41 иле алкоголде наркотик тип таный, 85 илдә ҡоро закон индерелә, был наркотик ағыуға максималь тыйыу һалына. Ә СССР алкоголде наркотик тип таныуға ҡаршы булып, Халыҡ-ара Һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының был тәҡдимен ҡарауҙан бөтөнләй баш тарта.

Мәҙәни эсеү теорияһы нимә ти һуң? Ул алкоголде үҙенсәлекле аҙыҡ, ти. Парадокс! Әгәр алкоголь аҙыҡ төрө икән, ни өсөн уны ҡулланған өсөн ЮХХДИ штраф һала, танытманы алып ҡала, һ.б. Һығымтаны үҙегеҙ яһағыҙ.

## Алкоголизм һәм наркоманлыҡ - сирме?

Кемдер алкоголизмды сир тип иҫәпләй икән, ул төптән яңылыша. Алкоголизм - алама ғәҙәт. Алкоголизм менән наркоманлыҡтың сир түгеллеген раҫлаусы бер нисә ысул бар. Мәҫәлән, ҡаты сирле ғаилә башлығы ғаилә ағзаларын йыйып алып: "Етте! Бөгөндән башлап мин ауырымайым, мин һауығам", - тип өҫтәл һуғып сиренән ҡотола аламы? Ә эскесе эсеүен ташларға ҡарар итә икән, уға өҫтәлгә йоҙроғо менән бер һуғып, етди ҡарар ҡабул итеү етә. Йәки икенсе миҫал. Кеше йәшәмәгән утрауға яман шеш, туберкулез менән сирләүсене һәм эскесене, тәмәкесене һәм наркоманды алып барып ташлап, уларға бер йылға етерлек аҙыҡ-түлек ҡалдырып, бер йылдан килеп ҡараһаҡ, яман шеш менән сирленең донъя менән хушлашҡан икәнен күрербеҙ. Туберкулез сирле лә унын эргәһендә аяҡ һуҙасаҡ, сөнки уларға махсус дарыуҙар биреп тормаһаң, уларҙың сире аҙа. Ә инде эскесе, тәмәкесе, наркоманға бер нәмә лә булмаясаҡ, сөнки улар сирле түгел, ә бары тик насар ғәҙәт ҡорбандары.

Ә ни өсөн алкомафия эскелекте сир тип инандырырға тырыша һуң? Сөнки был уларға йәштәрҙе эсерергә, ә аҙаҡ, ауырыһаң, сиреңде дауалап була, тип ышандырырға кәрәк.

Әгәр айыҡлыҡ теорияһы һәр кемгә йүнәлтелһә, мәҙәни эсеү теорияһы кемгә йүнәлтелә? Алкоголиктарҙы мәҙәни эсеүгә саҡырыуҙың мәғәнәһе юҡ. Улар мәҙәни эсә белмәй. Эсергә яратыусыларҙы мәҙәни эсергә саҡырыу - енәйәт. Был уларҙы мәҙәни эсергә, эскесегә әйләнергә һәм алкоголик булырға саҡырыу ул. Эсергә яратыусыларҙан да мәҙәни эсеүселәр юҡ. Улар ҡатын-ҡыҙ өсөн дә эсә, мөхәббәт өсөн дә эсә, атаәсә өсөн дә эсә... Тик бына алтынсы рюмканан һуң мәҙәниәт ҡайҙалыр юғала...

Был ҡурҡыныс пропаганданың ҡеүәте беҙҙең айыҡ балаларыбыҙға йүнәлтелгән. Бына кемде улар мәҙәни эсергә саҡыра. Шуға ла бөгөн мәҙәни эсергә саҡырыуҙың һәр ынтылышы дәүләт кимәлендәге енәйәт тип таныларға тейеш. Йәш кешегә кем булырға теләйһең, эсергә яратыусымы, алкоголикмы, әллә мәҙәни эсеүсеме, тип һорайҙар. Артабанғы юл - эсергә яратыусы, алкоголик. Ә бит бер генә эскесе лә, алкоголик та тыуғанда эскесе булып тыумай. Шуға ла балаларыбыҙҙың эскеселәрҙең сафына эләгеүенә юл ҡуймайыҡ. Әммә алкомафия, донъя империализмы, табиб-наркологтар һәр кемдең ошо сафҡа эләгеүен теләй. Хатта медицина тарихында беренсе тапҡыр табиптарҙы кеше ауырыуында өҫтәмә аҡса эшләү менән ҡыҙыҡһындырҙылар. Кеше күберәк ауырыған һайын, табиптар күберәк аҡса ала. Ә бөтөн ауырыуҙарҙың нигеҙендә алкоголь тора.

## Һыра ҡурҡынысмы?

Бөгөн йәштәр мөхитендә иң ҡурҡынысы - һыра һәм алкоголле коктейлдәр. Ә эскелеккә ҡаршы көрәшеүселәр араҡы һатыуҙы кәметәйек, тип лаф ора, һыра менән коктейлдәр тураһында - ләм-мим. Шул айҡанлы бер ваҡиға иҫкә төшә. 2004 йылда дуҫтарым менән Грецияла Олимпиада ҡараныҡ. Ярыштар араһындағы тәнәфестә Европа һәм Рәсәй өсөн һәр ваҡыт һыра рекламаһын күрһәтәләр ине. Аҙағынан импотенциянан таблеткалар рекламаһы китә. Бында ниндәйҙер аҫтыртын сәйәсәт һиҙеп, ҡыҙыҡһына башланыҡ. Баҡтиһәң, һыра ҡайнатҡанда, хатта алкоголһеҙ һыра булһа ла, уға ҡомалаҡ ҡушалар. Ә ҡомалаҡ - наркотик матдә, киндерҙең яҡын ғына туғаны. Һыра ҡайнатҡанда фитоэстроген тип аталған матдә ҡайнатыла. Әгәр ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙан организмында теостерон, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәрҙән эстродинол гормоны булыуы менән айырылһа, һыра эскән ирҙәрҙең ашҡаҙанында фитоэстроген эстродинолға әйләнә. 17-20 йыл туҡтауһыҙ һыра эскән ир-атҡа 100 процент импотентлыҡ гарантиялана. Донъяуи компаниялар был хаҡта яҡшы белә һәм шуға күрә һәр көрөшкә һыранан һуң импотенциянан таблетка ашарға тәҡдим итә.

Ҡатын-ҡыҙ һыра ҡулланғанда картина тағы ла ҡурҡынысыраҡ төҫ ала. Уның ашҡаҙанында шундай уҡ ябай ғына химик реакция барлыҡҡа килеп, эстродинол гормоны күбәйә. Ҡатын-ҡыҙ гормонының саманан тыш күбәйеүе уны агрессив, асыулы йән эйәһенә әүерелдерә. Быға ҡомаҡтар менән үткәрелгән тәжрибә асыҡ миҫал булып тора. Ҡомаҡтар алдына һыу һәм һыра менән тулы ике һауыт ҡуялар. Ҡомаҡтар һыра тәмен бер белеп алғас, тик шул һауытҡа киләләр һәм күпмелер ваҡыттан һуң һыра алкоголигына әйләнәләр. Һыралы һауытты алып ҡуйғас, шул урынға йыйылып, олой башлайҙар. Һауытты кире ултыртҡас, тынысланалар. Ә инде никах ваҡыты еткәс, ата ҡомаҡтар инә ҡомаҡтарға иғтибар ҙа итмәй, ә агрессиялы, асыулы инә ҡомаҡтар ата ҡомаҡтарға ташланып, уларҙы өҙгөсләп бөтөрәләр. Һуңынан инә ҡомаҡтарҙың эсен ярып ҡарағас, аналыҡтары дүрт тапҡырға ҙурайыуы, уларҙың лайла менән тулыуы асыҡлана. Шулай ҡатын-ҡыҙҙа "ҡоторған аналыҡ" диагнозы барлыҡҡа килә, күрәһең. Хәҙер аңланығыҙмы Клинский артынан кем йүгергәнен? Буласаҡ импотент йүгерә. Бындай шарттарҙа нимә эшләргә була? Әлбиттә, бары тик ҡоро закон индерергә. Водителдәр өсөн 90 йыл инде ҡоро закон ғәмәлдә. Уны боҙоусыларға штраф һалына, һ.б. Шул була инде ҡоро закон. Әгәр уның файҙаһы юҡ икән, әйҙәгеҙ, руль артындағы ҡоро законды ғәмәлдән сығарайыҡ. Һөҙөмтә нисек булыр икән? Водителдәр рәхәтләнеп эскән килеш руль артына ултырасаҡ. Ә бөгөн водителдәрҙең 1 проценты ысынлап та руль артына эскән килеш ултыра. Ошо бер процентҡа барлыҡ ауыр юл-транспорт ваҡиғаларының 24 проценты, юлдағы үлем осраҡтарының 55 проценты тура килә.

## Нисек ҡоро закон булдырырға?

Өлкәндәр балаларының эсмәүен, тартмауын теләй. Балалар ҙа ата-әсәһенең эсмәүен, тартмауын теләй. Шулай булғас, халыҡты күпләп ҡырыусы геноцид ҡоралына мораторий иғлан итергә ваҡыт түгелме? Мәҫәлән, Өфөлә мәктәптәрҙән, дауалау, мәҙәниәт учреждениеларынан 500 метр арауыҡта айыҡлыҡ территориялары иғлан итергә була. Уларҙа халыҡты алкоголь һәм тәмәке менән ағыулаған бер генә ларек та, магазин да, ресторан да булмаҫҡа тейеш. Ҡала ситендә, 30-40 километр алыҫлыҡта, ҡала сүплектәре бар. Мин шул тирәләге ҙур территорияны асфальтлап, уны эскелек һәм боҙоҡлоҡ территорияһы тип иғлан итер инем. Әйҙә, магазиндар, рестораندар шунда күсенһен. Ә бит үҙен ихтирам иткән бер генә кеше лә, бер генә бала ла шул сүплек ояһына бармаясаҡ. Ҡала күҙгә күренеп айығасаҡ. Әбейҙәр һәм таксистар ташыр тиһегеҙме? Улар бит йөк фуралары түгел, уларға ла им табып була.

## Эсереү сәйәсәте нимәгә килтерҙе?

1952 йылда совет уҡыусылары донъяла интеллект буйынса беренсе урын яулай. Күптән түгел уҙғарылған тест һөҙөмтәләре Рәсәй уҡыусыларының 147-се урында булыуын асыҡлай. Балаларҙың интеллектын эсеп бөткәнбеҙ, күрәһең. Ә бит күптәр алкоголь тәьҫирендә ижад һәләте асыла, ти. Алкоголь тәьҫирендә кеше ижад итмәй, ә ҡылана ғына. Ижад - етди физиологик процесс. Ул түбәндәгенән ғибәрәт: әгәр кешенән икегә ике нисә була тип һораһаң, әҙер булған, мейеһендә һаҡланған яуапты бирә. Ижад - башта яуабы булмаған нәмәгә яуап эҙләү, нимәнелер хәл итеү юлын табыу. Был бигерәк тә имтихан ваҡытында асыҡ күренә. Студентҡа лекцияла, семинарҙа булған һорауҙы бирһәң, ул яуабын тиҙ таба, ә инде логик фекерләүгә ҡоролған һорау бирһәң, ул яуап эҙләй башлай, сөнки мейеһендә әҙер яуап юҡ. Беҙҙең мейелә эмоциональ торошобоҙға яуап биргән бәләкәй генә гипоталамус тигән ағза бар. Ул эш ҡушһа, организм норадреналин тигән матдә бүлеп сығара. Был матдә кире эмоциялар өсөн яуап бирә. Ниндәйҙер эш алғас, кеше яуабын таба алмай уйлана, ҡанда норадреналин күбәйә. Ниндәйҙер ваҡытта мейенең барлыҡ күҙәнәктәре эшләй башлай. Был уй килгән мәл була. Тап шул ваҡытта яуап табыла ла инде. Был саҡта организм норадреналин бүлеп сығарыуынан туҡтай, организмға ыңғай эмоциялар өсөн яуаплы булған серотин бүленеп сыға. Кешенең эмоциональ торошо күтәрелә: "Эврика, таптым!" Әгәр кеше бер көрөшкә һыра йәки бер стакан шарап эсә икән, уның ике аҙнаға тиклем гипоталамусы эшһеҙ тора. Ике аҙна кеше маймылдан да түбәнерәк эмоциональ кимәлдә була.

Быны ҡомаҡтар менән үткәрелгән тәжрибә лә яҡшы сағылдыра. Ҡомаҡтарҙы ас тоталар һәм һуңынан ситлектәрен асып, лабиринтҡа индереп ебәрәләр. Лабиринт уң яҡлы була, уның урыны-урыны менән "кеҫәләре" бар. Ә лабиринттың иң уртаһына сыр ҡуйылған. Ҡомаҡ ситлектән сыға ла, "кеҫәләр"гә инә-инә сырға 14 секундта барып етә. Уны икенсе тапҡыр ебәрәләр. 13 секунд. Өсөнсө тапҡыр ебәргәндә инде уның башына уй төшә - ә нишләп "кеҫә"ләргә инеп торорға, уң яҡтан шыма стена буйлап ҡына барғанда тиҙерәк барып етергә була бит! Ярты секунда ҡомаҡ сыр эргәһендә була. Икенсе тапҡыр был тәжрибәне һул яҡлы йүнәлеш буйынса үткәрәләр. Тәүҙә ҡомаҡ уны 20 секундта үтә. Икенсеһендә 15 секунд. Өсөнсө тапҡыр инде уға тағы уй килә - ярты секунд! Шул уҡ тәжрибәне алкоголь эсерелгән ҡомаҡтар менән дә үткәрәләр. Был ҡомаҡтар тәжрибәлә теләмәй генә ҡатнаша. Сырға тиклем 90 секундта барып етә, икенсеһендә - тағы ла насарыраҡ. Тәжрибәне 20 тапҡыр үткәрәләр - бер ниндәй ҙә аҡыллы уй төшмәй баштарына. Һул йүнәлеш буйынса күрһәткестәр тағы ла насарыраҡ була. Кешеләр ҙә шулай: тәүҙә ике аҙнаға бер тапҡыр эсә, шунан аҙнаһына бер тапҡыр...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хеҙмәт маймылдан кеше яһаған, тип раҫлай Дарвин теорияһы. Бөгөн иһә алкоголь, тәмәке, нарокотик тигән ағыуҙар кешене маймылдан да түбән интеллектлы йән эйәһенә әүерелдерә. Аңы томаланған халыҡ үҙе лә һиҙмәҫтән яйлап ҡына эскелек конвейерында алкомафияның күптән ҡаҙып әҙерләп ҡуйған ҡәберенә берәм-берәм төшөүен дә һиҙмәй...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**



**Нефтселәр мәҙәниәт һарайы ошолай лыҡа тулы булды.**

*✓ Яуаплылыҡ тойғоһо шул тиклем көслө һәм ул миңә бер минутҡа ла ялҡауланырға ирек бирмәй. Үҙемде башҡорт милләтенең иң яҡшы улы итеп күрһәтергә, төркөмдә иң яҡшы уҡыған, тәртипле студент булырға ынтылам.*



# БАШЫҢ МЕНӘН

## аңың менән үҫеп

**Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларынан ҡышҡы каникулдарға ҡайтҡан бер төркөм студенттар редакциябыҙҙа булып китте. Улар - Мәскәү финанс академияһының II курс студенты Урал Шафиҡов, Мәскәү дәүләт матбуғат университетының III курс студенты Илдар Йосопов, Санкт-Петербург дәүләт техник университетының I курс студенты Айгизә Закирова, Санкт-Петербург дәүләт университетының I курс студенттары Рәмил Муллагилдин һәм Регина Баймырҙина. Йәштәр студент тормошо, уй-маҡсаттары, тәүге ҡаршылыҡтар, сит ҡалала йәшәгәндә алған тормош һабаҡтары тураһында һөйләне.**

**▸ Рәсәйҙең ҙур ҡалаларында уҡыуы республикабыҙ вуздарында уҡыуға ҡарағанда күпкә ауырыраҡтыр, моғайын. Беренсенән, сит ҡала, икенсенән, был вуздарҙа талаптар ҙа көслөрәктер. Ә һеҙ нисек яраҡлашып, өйрәнеп киттегеҙ, тәүге ҡаршылыҡтарҙы нисек еңдегеҙ?**

**Регина:** Санкт-Петербург дәүләт университетына уҡырға килгәс тә барлыҡҡа килгән тәүге ҡыйынлыҡ ятаҡ мәсьәләһе булды. Университет ятаҡтары ҡаланың төрлө ерендә урынлашҡан. Беҙгә урынды ҡаланың ситендәге ятаҡтан бирҙеләр. Килешмәйенсә, әхирәтем менән үҙәктән бүлмә һорап, Путиндың "Берҙәм Рәсәй" ҡабул итеү бүлегенә тиклем барып еттек. Шулай итеп, үҙ маҡсатыбыҙға өлгәштек. Бынан сығып нимә тип әйтергә теләр инем: ҙур ҡалала булһаң да үҙ хоҡуғың, үҙ мөмкинлектәрең өсөн көрәшергә, тырыш, сос, етеҙ булырға кәрәк - был минең тәүге һабағым булды.

**Илдар:** Кемдең арбаһына ултырһаң - шуның йырын йырлайһың, тигән аҡылды ғаиләбеҙҙә күңелгә ныҡ һеңдергәндәрҙер инде. Шуға ла сит ҡалаға уҡырға юлланғас та тәүге маҡсат - үҙеңә ышаныслы дуҫтар табыу булды. Беҙ бында уҡырға, белем тупларға, үҙ өлгөбөҙҙә халҡыбыҙҙы күрһәтергә тейешбеҙ, тимәк, беҙгә һис тә насар кешеләр менән аралашырға кәрәкмәй. Тиҙ генә яҡшы дуҫтар таптым. Сит-ят ерҙәрҙә аҙым һайын һынауҙар һағалап ҡына тора инде ул. Беҙ, башҡорттар, бигерәк бер ҡатлы шул. Үҙемә лә ошо сифатым арҡаһында бер нисә тапҡыр ҡыйын хәлгә ҡалырға тура килде. Тормошта бер ҡатлы булырға, бөтә кешегә лә ышанып барырға ярамай - быныһы минең тәүге һабағым булғандыр, моғайын. Ә уҡыу яғына килгәндә, барыһы ла үҙ ҡулыңда. Беҙҙең вуз Рәсәйҙә берҙәнбер генә. Бәлки, шуғалыр ҙа беҙҙә тәртип яғынан да, уҡыу йәһәтенән дә талаптар көслө. Уҡыу башында һыҙма геометриянан ныҡлап уҡып алырға тура килде, күрәһең, был фән буйынса мәктәптә насарырыҡ шөғөлләнгәнмендер.

**Урал:** Мәскәү ҡалаһына уҡырға ингәс, илебеҙҙең баш ҡалаһында белем алыу, яңы дуҫтар табыу мөмкинлеге мине дәртләндерҙе. Ошо ашҡыныу бөтә ҡаушау-ҡурҡыуҙарымды баҫҡандыр, күрәһең. Бер яҡтан ҡараһаң, Мәскәү Өфөнән әллә ни айырылып та тормай: тик халҡы күберәк һәм милли составы киңерәк. Мәскәү вуздары ҡаты дисциплина менән айырылып тора. Беҙҙең вузда хатта кейеп йөрөгән кейемеңә, прическаларға ла иғтибар итәләр. Тәмәке тартҡандарҙы шунда уҡ бойороҡ яҙып, уҡыуҙан ҡыуалар. Уҡыуға ла талаптар көслө: бер көн дәрес ҡалдырһаң, декан алдында яуап тоторға тура килә. Республика вуздарында ла шундай ҡаты тәртиптәр индереү яҡшы булыр ине, юғиһә, мәктәпте яңы тамамлаған уҡыусылар йомшаҡ тәртипте күреп, ялҡаулыҡҡа бирелә, ваҡытын нисек уҙғарырға белмәй, күңел асыу саралары уйлай башлай. Шулай итеп күбеһе яңылыш юлға баҫа ла инде.

Ниңә Өфөлә ҡалманым икән, тигән үкенес тойғоһо бер ҡасан да уянманы. Яңы кешеләр менән танышыу, яңы тормошто күреү, өйрәнеү миңә бик оҡшай. Ғөмүмән, мөмкинлеге булһа, һәр кемгә сит ҡалала йәшәп икән, тимәк, һин бик һәләтле, талантлы булған осраҡта ла, тормошта юғалып ҡаласаҡһың. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: тормош ҡыйыуҙарҙы ярата.

**Айгизә:** Санкт-Петербург ҡалаһына уҡырға инеүем осраҡлы ғына килеп сыҡты. Өфө ҡалаһындағы вуздарҙың береһенә уҡырға инермен тип йөрөгәндә Санкт-Петербург ҡалаһына маҡсатлы йүнәлтмә тәҡдим иттеләр. Шундай мөмкинлек килеп сыҡҡас, бәхетемде һынап ҡарарға булдым. Башта, бәлки, ҡурҡҡанмындыр ҙа, шулай ҙа

Химия уҡытыусыһы тәүге лекцияла шундай фәһемле һүҙҙәр әйткәйне: "Мәктәптә һеҙҙе өйрәтәләр, ә вузда һеҙ өйрәнәһегеҙ". Ысынлап та, мәктәптә уҡытыусыларыбыҙ башыбыҙҙан һыйпап ҡына йөрөтә, ниндәйҙер проблема килеп сыҡһа, үҙҙәре үк был хәлдән сығырға ярҙам итә. Ә университетта студенттар өйрәнә. Беҙ быны ысынлап та шулай икәнен беренсе семестрҙа уҡ һиҙҙек. Ҡайһы берәүҙәр студент булып киткәс тә иркен тормошто һиҙеп ҡала һәм шаша башлай, күптәре насар юлға баҫа. Бөтәһе лә һинең ниндәй кешеләр менән аралашыуыңа бәйле.

**▸ Башҡортостан, ата-әсәйегеҙ, туғандарығыҙ-дуҫтарығыҙ һеҙгә өмөттәр бағлап, көтөп тора. Һеҙ шул яуаплылыҡты һәр аҙымығыҙҙа тойорға һәм үҙегеҙҙе башҡорт булараҡ яҡшы яҡтан күрһәтергә тейешһегеҙ бит инде…**

тураһында һөйләшһәк, күбеһенең үҙ милләтен насар белеүе асыҡлана. Ошондай әңгәмәләр ваҡытында мәғлүмәтһеҙ булып күренмәҫ өсөн халҡыбыҙ тураһында тарихи китаптар уҡыйым. Әлегә тиклем юғалып ҡалғаным юҡ, биргән һәр бер һорауҙарына яуап бирәм, фотолар аша гүзәл тәбиғәтебеҙ менән таныштырам. Үҙем Өфө ҡалаһында үҫтем, урыҫ мәктәбендә уҡыным, атай-әсәйем, дуҫтарым менән тик русса ғына аралаштым. Санкт-Петербург ҡалаһына килеп, башҡорт йәштәре менән аралаша башлағас, тәүге тапҡыр үҙ телемде белмәгән өсөн ныҡ ояллдым. Тарихыбыҙ менән бергә телемде лә өйрәнә башланым. Хәҙер башҡорт телендә һөйләшә лә, фекерләй ҙә алам. Атай-әсәйем менән дә телефон аша башҡортса һөйләшә башланыҡ. Шулай уҡ кире күренештәр ҙә була: ҡайһы берәүҙәр, киреһенсә, урыҫлаша ла ҡуя. Минеңсә, ниндәйҙер кәмселектәре булғандар ғына башҡалар араһында үҙен кәм күрһәтмәҫ өсөн шулай үҙгәреп китә, моданан ҡалмаҫ өсөн эсә, тарта, наркотиктар ҡуллана, төнгө клубтарға йөрөй башлай. Үҙебеҙҙең йәштәр араһында ундай кешеләр булмауына шул тиклем шатланам.

**Илдар:** Башҡортостандан ситкә сығып йөрөй башлағас, халҡыбыҙҙың яҡшы атлы, яҡшы данлы булғанына инандым. Башҡортмон, тиһәм, шунда уҡ Салауат Юлаев, башҡорт балы, ҡурай тураһында иҫкә төшөрәләр. Ысынлап та, беҙгә Мәскәү, ҡарарға кәрәктер, тип уйлайым. Сит ҡала, ят мөхит кешене нығыта, тормош һынауҙарына ҡаршы торорға өйрәтә.

**Рәмил:** Мәктәптә уҡығанымда уҡ ошо уҡыу йортона уҡырға инеү маҡсатым бар ине. Математика фәнен яраттым һәм был фән буйынса көслө, төплө белем алғым килде. Уҡытыусым да һәләттәремде күреп, башта уҡ Санкт-Петербург ҡалаһына барырға тәҡдим иткәйне. Шулай итеп мин үҙ маҡсатыма өлгәштем. Ошо уҡ ҡалаға уҡырға ингән класташтарым да булғас, әллә ни ауырлыҡтар һиҙелмәне. Тәүге көндәрҙә үк ҡалала эшләп килгән "Аманат" башҡорт йәштәре ассоциацияһы ағзалары менән таныштым. Улар минең кәңәшсем дә, терәк-таянысым да булды.

Ҡурҡыу, тигәндән... Минеңсә, тормошта ғөмүмән бер нәмәнән дә ҡурҡырға ярамай. Әгәр һин ниндәйҙер аҙым яһарға, асыштар эшләргә ҡурҡаһың ата-әсәйең һиңә ышанып, ҡыҙым ҙур ҡалала белем алһын, тип тырышып торғанда үҙеңдән-үҙең ҡурҡыу тойғоһон еңергә тырышаһың. Уларҙың да өмөтөн, ышанысын аҡлағы килде.

Үҙебеҙҙең ауылда мин тәүгеләрҙән булып ҙур ҡалала белем алып йөрөйөм. Ауыл мәктәптәре уҡыусыларына сит ҡалаларҙа, хатта илдәрҙә уҡыу мөмкинлектәре тураһында һөйләргә, киңерәк мәғлүмәт бирергә кәрәк, юғиһә, улар БДУ, БДПУ кеүек вуздар тураһында ғына белә.

**Рәмил:** Ысынлап та, был яуаплылыҡ тойғоһо шул тиклем көслө һәм ул миңә бер минутҡа ла ялҡауланырға ирек бирмәй. Үҙемде башҡорт милләтенең иң яҡшы улы итеп күрһәтергә, төркөмдә иң яҡшы уҡыған, тәртипле студент булырға ынтылам. Университетыбыҙҙа төрлө милләт йәштәре белем ала. Улар араһында башҡорт йәштәренең дә булыуы һәм уларҙың иң алдынғы студенттарҙан һаналыуы ғорурлыҡ, әлбиттә. Милләттәр Санкт-Петербург вуздарында уҡып йөрөүе еңел түгел, иңебеҙҙә шул тиклем ҙур яуаплылыҡ ятҡанын тоябыҙ. Беҙгә ҡарап, милләтебеҙ тураһында фекер йөрөтәсәктәр: насар уҡыһаҡ, башҡорттар насар уҡый, яҡшы уҡыһаҡ, башҡорттар яҡшы уҡый, тип әйтәсәктәр. Бигерәк тә Хөкүмәтебеҙ маҡсатлы йүнәлтмә юллап, шундай мөмкинлек биргән икән, ышанысты тулыһынса аҡлағы килә.

Карауатымдың башында эленеп торған Башҡортостан флагына ғорурлыҡ менән ҡарайым. Ял иткәндә башҡорт йырҙарын



*Ҡайҙа ғына барһаң да төрлө һорауҙарға яуап бирергә әҙер булырға кәрәк. Әгәр сит ерҙә халҡың тураһында ҡыҙыҡһынғандарҙың һорауына яуап бирә алмаһаң, үҙең өсөн генә түгел, халҡың өсөн дә бик оят булыр. Бының өсөн тарихыңды, мәҙәниәтеңде, ғөрөф-ғәҙәттәреңде яҡшы белеү мөһим. Беҙҙеке кеүек бай тарихлы халыҡтар донъяла һирәк бит ул! Икенсе яҡтан, белемең генә түгел, тәртибең дә, эшең дә, үҙ-үҙеңде тотошоң да милләтеңә тап төшөрөрлөк булмаһын. Ошо тойғоно, ошо яуаплылыҡты һәр башҡорт үҙ йөрәгендә йөрөтһә, бөгөн беҙ иң алға киткән халыҡтарҙың береһе булыр инек.*

*✓ Дүрт-биш сит телде яҡшы белеп тә, үҙ телеңдә әсәй тигән һүҙҙе лә әйтә алмаһаң, бик хурлыҡлы хәл. Шуға күрә һәр башҡорт үҙ телен яҡшы белергә һәм шул телдә фекер йөрөтә алырға тейеш, тип уйлайым.*

# ДУҪ БУЛЫП,

## ҡайт, йәш кеше!

тыңлайым. "Бүреләр" төркөмөнөң йырҙарын дуҫтарым да ярата. Уларға республикабыҙ, халҡыбыҙ тураһында һөйләһәм, яратып тыңлайҙар. Был яҡтан "Мәскәү башҡорттары" ойошмаһы менән аралашыуҙың күп файҙаһы тейҙе, тип әйтә алам. Башҡортостан яңылыҡтарынан да артта ҡалмайым, интернеттан көн һайын төрлө башҡорт сайттарына инеп, мәғлүмәттәр менән танышып сығам.

**Урал:** Миңә төрлө кешеләр осраны: ҡайһылары хатта тарихыбыҙҙы ла белә, икенселәре башҡорттар тураһында бөтөнләй белмәй. Бүлмәләштәрем менән үҙ-ара тыуған еребеҙ, тыуған халҡыбыҙ, телебеҙ тураһында йыш һөйләшәбеҙ. Тарихыбыҙҙы улар хәҙер ятлап бөткәндер инде. Тәүге мәлдә бүлмәлә лә, төркөмдә лә: "Башҡортостан ниндәй ил? Башҡорттар ниндәй халыҡ?" - тигән һорауҙар йыш булды. Бер нисә тапҡыр башҡортса һөйләтеп тә ҡаранылар. Төркөмдә яҡшы уҡыусыларҙан һаналам. "Төбәк иҡтисады" тигән предметтан Башҡортостан тураһында презентациялар күрһәтергә ҡушылғайны. Мин республикабыҙ тураһында бөтә төркөм алдында ғорурланып һөйләнем.

**Регина:** Төркөмдәштәрем күбеһенсә милли кейемдәребеҙ, динебеҙ, ашамлыҡтарыбыҙ, уйын ҡоралдарыбыҙ менән ҡыҙыҡһына. Әгәр Өфөлә уҡыһам, бәлки, уҡыуыма ул тиклем етди ҡарамаҫ та инем. Ә бында һәр яҡтан да өлгөлө студент булырға ынтылам. Республикабыҙ, милләтебеҙ, ата-әсәләребеҙ алдындағы яуаплылыҡ тойғоһо илке-һалҡы йөрөргә ирек бирмәй.

**Айгизә:** Башҡортостандан Света исемле ҡыҙ менән бергә уҡыйбыҙ. Сит мөхиттә яҡын кешең менән бер ултырып рәхәтләнеп башҡортса һөйләшеп алһаң, күңел тулып, рәхәт булып ҡала ул. Бүлмәләш рус ҡыҙын да башҡортсаға өйрәтеп барабыҙ хәҙер: ул да Рөстәм Ғиззәтуллиндың йырына ҡушылып: "Яҙ, яҙ, яҙ килә", - тип йырлап ебәрә. Дуҫтарым миңә ҡарап, башҡорттар шундай шәп, тип уйлай икән, мин бик шат, әлбиттә.

Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, рухыбыҙҙы юғалтмаҫҡа, дөйөм ағымға ҡушылмаҫҡа, башҡорт булып ҡалырға тейешбеҙҙер, тип уйлайым. "Аманат" ойошмаһы ағзалары менән осрашҡанда бер-беребеҙҙе күреүгә ихлас ҡыуанабыҙ, һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәй. Һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булған, хәлеңде белеп, эс сереңде уртаҡлашҡан яҡташтар булыуы рухыбыҙҙы тағы ла нығыта, минеңсә. Беҙ уҙғарған төрлө сараларҙа бөтәһе лә ихлас ҡатнаша: шиғыр ҙа һөйләйҙәр, йырлап та, бейеп тә ебәрәләр. Тыуған илде, атай йортон һағыныу беҙҙе берләштерә, күрәһең.

**Урал:** Ҡайҙа ғына барһаң да төрлө һорауҙарға яуап бирергә әҙер булырға кәрәк. Әгәр сит ерҙә халҡың тураһында ҡыҙыҡһынғандарҙың һорауына яуап бирә алмаһаң, үҙең өсөн генә түгел, халҡың өсөн дә бик оят булыр. Бының өсөн тарихыңды, мәҙәниәтеңде, ғөрөф-ғәҙәттәреңде яҡшы белеү мөһим. Беҙҙеке кеүек бай тарихлы халыҡтар донъяла һирәк бит ул! Икенсе яҡтан, белемең генә түгел, тәртибең дә, эшең дә, үҙ-үҙеңде тотошоң да милләтеңә тап төшөрөрлөк булмаһын. Ошо тойғоно, ошо яуаплылыҡты һәр башҡорт үҙ йөрәгендә йөрөтһә, бөгөн беҙ иң алға киткән халыҡтарҙың береһе булыр инек.

**▸ Был тиклем яуаплылыҡ йөкмәгәс, һеҙ көн-төн уҡып ҡына ултыраһығыҙҙҙыр, тигәнерәк тойғо ҡала бит әле. Санкт-Петербург һәм Мәскәү студенттарының буш ваҡыты ла барҙыр бит, уны нисегерәк уҙғараһығыҙ?**

**Илдар:** Ысынлап та, беренсе курстың тәүге семестрында баш ҡалҡытмай уҡыным, Мәскәүҙе уҡыу йылының икенсе яртыһында ғына күрҙем, тиһәм дә була. Уҡыуымды яйға һалып, университет ҡағиҙәләрен өйрәнгәс, буш ваҡытымды ҡаланы өйрәнеүгә бағышланым. Ниндәй ҙә булһа экскурсияға эләгеп китәм дә, гидтарҙың һөйләгәндәрен тыңлап, ҡала буйлап йөрөп киләм. Мәскәүҙе бер үҙем урап сығыуға ҡарағанда былай күпкә ҡыҙыҡлы һәм фәһемле: ҡаланың тарихын, билдәле урындарын беләһең, Мәскәүгә икенсе ҡараш тыуа. Әйткәндәй, Өфөлә тыуып-үҫһәм дә тыуған ҡаламдың да күп урындарын белеп бөтөрмәйем икән. Шуға күрә йәйге каникулда турист кеүек Өфө буйлап сәйәхәткә сығырға хыялланып йөрөйөм әле.

**Урал:** Студент кеше көнө-төнө уҡып та ултырырға тейеш түгел. Шуға күрә, Илдар әйтмешләй, төрлө сараларға йөрөргә, үҙеңде һәр яҡлап үҫтерергә кәрәк. Үҙеңә берәй хобби тапһаң йәки әҙәби китап уҡыһаң да бик файҙалы. Мин дә Илдар кеүек Мәскәүҙе өйрәнеп бөттөм инде.

**Регина:** Мин бейеү түңәрәгенә йөрөйөм, хип-хоп менән шөғөлләнәм. Шулай уҡ үҙемде төрлө яҡтан үҫтерер өсөн буш ваҡытымды әҙәби китаптар уҡып уҙғарам. Бөгөнгө йәштәр үҙ көсөнә ышанған, егәрле, тырыш, белемле булырға тейеш.

**Айгизә:** Студент йылдарыбыҙ Питерҙа, Мәскәүҙә үтеүе менән беҙ ни тиклем бәхетле! Беҙ был йылдарҙы ғүмер буйы: "Йәш саҡта Питерҙа уҡыныҡ", - тип йылы хәтирәләр, яҡты тойғолар менән ғорурланып иҫкә аласаҡбыҙ. Университетҡа иртүк сығып китәбеҙ ҙә, кис кенә ҡайтып инәбеҙ. Шуға күрә ҡайһы саҡта ваҡыт етмәй ҙә ҡала. Шулай ҙа "Аманат" ассоциацияһына йөрөйөм, төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашам, шулай уҡ башҡорт дуҫтарыбыҙ менән тыуған көндәрҙе билдәләйбеҙ, байрамдарҙы бергә ҡаршылайбыҙ.

Беҙҙең вузда студенттарға төрлө курстарға йөрөү мөмкинлеге күп. Йәш саҡта сит телдәрҙе өйрәнергә, ваҡытыңды дөрөҫ бүлә белергә кәрәк. Буш ваҡытты дөрөҫ ҡуллана белеү - үҙе үк һәйбәт сифат. Алдағы семестрҙа ингиз телен өйрәнеүгә өҫтөнлөк бирергә уйлайым.

**Рәмил:** Бөгөнгө көндә спорт ныҡ алға китте һәм хоккей уйнамаған, туп типмәгән кешеләр менән аралашыуы ҡыҙыҡ та түгел. Шуға күрә бөгөнгө йәштәр сәләмәт тормош алып барырға тейеш. Үҙем даими рәүештә спорт менән шөғөлләнәм, ялдарымды төрлө кроссворд, ребустар сисеп уҙғарам.

**▸ Айгизә дөрөҫ әйтә, бөгөн сит телдәрҙе белеү кәрәк. Әммә һәр кем иң тәүҙә туған телен белергә тейеш икәнлеген һеҙ яҡшы үҙләштергән йәштәр бит инде, шулай бит?**

**Илдар:** Бәләкәй саҡтан ике телдә - рус һәм башҡорт телендә иркен аралаштым һәм ошо яҡтан дуҫтарым араһында үҙемдең өҫтөнлөгөмдө тоя торғайным. Мәктәптә инглиз телен өйрәнһәм дә, практика булмағас, уны насарыраҡ белә инем. Университетҡа уҡырға ингәс, инглиз телен иркен аралашырлыҡ кимәлдә белергә кәрәк, тигән фекер уянды. Өҫтәмә курстарға йөрөп белем ала башланым. Ә башҡорт телен белеүем инглиз телен өйрәнгәндә шул тиклем ярҙам итә. Икенсе йыл Европаға йәки башҡа берәй сит илгә барып ҡайтырға, тигән маҡсат ҡуйҙым. Миңә яңы илдәр күреү, башҡа милләттәр менән аралашыу, уларҙың менталитетын өйрәнеү бик ҡыҙыҡ. Беҙ немецтарҙы шул тиклем бөхтә, инглиздарҙы пунктуаль тип беләбеҙ, ә бына минең ошоларҙы үҙем күреп белгем килә. Башҡорт тотоп ҡарамайынса ышанмай, тигәндәре шулдыр инде. Үҙем эшләйәсәк полиграфия өлкәһендә немец телен дә белеү кәрәк, сөнки полиграфия ҡоралдарын етештереүсе төп предприятиелар Германияла урынлашҡан. Шуға күрә киләсәктә немец телен өйрәнәсәкмен. Тел өйрәнеү ваҡытты әрәм итеү, тип уйламайым. Сит тел белеү эш хаҡына ла тәьҫир итә, бөгөнгө заманда уныһын да күҙ уңында тотмай булмай.

**Урал:** Башҡорт, рус, инглиз телдәрендә иркен аралашам. Башҡорт телен белеүем шулай уҡ инглиз телендә яҡшы һөйләшеү мөмкинлеге бирҙе. Университетыбыҙҙа сит ил студенттары бар. Улар менән инглиз телендә аралашам.

**Рәмил:** Рус телендә аралашып үҫтем, мәктәптә инглиз телен өйрәндем, университетҡа килгәс башҡорт телен камиллаштырҙым. Бөгөнгө көндә ошо өс телдә иркен аралашам. Ә барыбер кеше иң тәүҙә үҙ туған телен яҡшы белергә тейеш. Дүрт-биш сит телде яҡшы белеп тә, үҙ телеңдә әсәй тигән һүҙҙе лә әйтә алмаһаң, бик хурлыҡлы хәл. Шуға күрә һәр башҡорт үҙ телен яҡшы белергә һәм шул телдә фекер йөрөтә алырға тейеш, тип уйлайым. Былар менән бер рәттән инглиз, немец, француз, ҡытай телдәрен дә өйрәнеү ҡамасауламаҫ. Сит телдәрҙе өйрәнеүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡ, тик беҙ күп осраҡта йыбанабыҙ, төрлө сәбәптәр эҙләйбеҙ. Бер нисә телде параллель рәүештә бергә өйрәнеү тағы ла еңелерәк бирелә.

**Регина:** Мин дә башҡорт, рус, инглиз телдәрен яҡшы беләм. Әсәйем күптән түгел ҡытай телен өйрәнергә тәҡдим итте. Ысынлап та, бөгөн Ҡытай иң үҫешкән илдәрҙән һанала һәм күп йәштәр был телде өйрәнергә ынтыла. Бөгөнгө заманда ниндәй генә эшкә урынлашһаң да сит телдәрҙе ниндәй кимәлдә белеүең хаҡында һорашалар. Тимәк, сит телдәрҙе белеү эшкә лә, эш хаҡына ла тәьҫир итә.

**Айгизә:** Университетыбыҙға йыш ҡына сит ил профессорҙары килеп лекциялар уҡый. Алдағы семестрҙа Англиянан килгән профессор лекцияны тик инглиз телендә алып барҙы. Шул ваҡытта инглиз телен өйрәнеү ни тиклем мөһим икәнен аңланым. Уҡытыусыларыбыҙ ҙа: "Интернетта инглиз телендә йөҙ тапҡырға күберәк мәғлүмәт табырға була һәм һеҙгә шул ресурстарҙы яҡшы ҡулланыр өсөн инглиз телен өйрәнергә кәрәк", - ти. Инглиз телен яҡшы белһәң, сит илдәргә стажировкаға барыу өсөн дә мөмкинлектәр асыласаҡ.

**▸ Киләсәккә хыялығыҙ нисек - үҙегеҙ уҡыған университеттарҙы тамамлап, шул ҡалаларҙа эшкә ҡалырғамы, әллә үҙебеҙгә ҡайтып, республикабыҙға, халыҡҡа хеҙмәт итергәме?**

**Илдар:** Мине башта Мәскәү бик ҡыҙыҡһындырғайны, уҡып бөтөп, ошонда уҡ эшкә ҡалһам, яҡшы булыр ине, тип уйлай инем. Ләкин икенсе курсҡа күскәс, ниәтем үҙгәрҙе. Бәлки, тыуған илде һағыныуҙандыр, бәлки, тыуған ил алдындағы яуаплылыҡ тойғоһо артҡандыр - хәҙер мин мотлаҡ Башҡортостанға ҡайтам, тип уйлайым. Һөнәрем буйынса баш ҡалабыҙҙа эш тә белешеп ҡуйғанмын. Әйткәндәй, бөтә Рәсәй буйынса бер генә вуз булғас, беҙ үҙебеҙ теләгән ергә эшкә урынлаша алабыҙ. Өфөлә минең һөнәр буйынса белемле белгестәр етешмәй, шуға күрә мин бында бик кәрәкле белгес буласаҡмын. Иң мөһиме, уҡыуымды уңышлы тамамлау.

**Урал:** Кешеләр ҡайҙалыр ситкә ынтыла, сит илдә солтан булырға теләй - мин уларҙы ялтыр кәнфиткә ынтылыусы бала кеүек күрәм. Миндә Мәскәүҙә эшкә ҡалырға йәки сит илгә сығып китергә тигән уй бөтөнләй булманы. Юҡҡа ғына беҙ ошо уҡыу йорттарында белем алмайбыҙ бит инде. Беҙ уҡып бөткәс, мотлаҡ республикаға ҡайтырға, илебеҙҙе күтәрергә тейеш. Етмәһә, бөтә республика тиерлек беҙҙең ошо уҡыу йорттарында белем алыуыбыҙҙы белә һәм ҡайтыуыбыҙҙы көтә. Шулай булғас, сит ҡалала кәрәкле һөнәр алып, белемебеҙҙе камиллаштырып, етерлек тәжрибә туплап, мотлаҡ республикаға ҡайтырға, илебеҙҙең сәскә атыуы өсөн тырышып эшләргә тейешбеҙ.

**Регина:** Уралдың һүҙҙәренә ҡушылам. Республикала беҙ кәрәкле белгестәр булырбыҙ, тип ышанам.

**Рәмил:** Алдағы яуаптарымдан аңлағанһығыҙҙыр, Санкт-Петербург минең рухымды нығытты, милли асылымды, үҙаңымды уятты. Мин мөмкин тиклем һөнәремде төптән өйрәнергә тырышам. Киләсәктә алған белемдәремде республикам файҙаһына ҡулланырға яҙһын.

**Айгизә:** Республикама шатланып ҡайтасаҡмын. Бигерәк тә бөгөн республикам юғары белемле, сит телдәрҙә иркен аралашҡан, яҡшы һөнәрле башҡорт белгестәренә ҡытлыҡ кисергәндә, беҙ мотлаҡ республикабыҙ файҙаһына тырышып эшләргә бурыслы, тип уйлайым. Күптәр кейәүгә лә сығып китерһең әле шунда, тип аптырата. Мин бит барыбер тормош юлдашы итеп үҙ халҡымдың улын һайлаясаҡмын.

**▸ Шулай итеп, тигән һығымта яһай торған ғәҙәте бар беҙҙең гәзит журналистарының. Һығымта урынына ниндәй һүҙ әйтерһегеҙ?**

**Илдар:** Студент кешегә бер аҙ хәйләкәр ҙә булырға кәрәк, минеңсә. Ятағыбыҙҙа төрлө афоризмдар эленеп тора. Шулар араһында: "Намыҫ - беҙҙең байлығыбыҙ, ә студент ярлы халыҡ", - тигәне бик оҡшаны. Ысынлап та, студент бер ҡасан да юғалып ҡалмаҫҡа, кәрәк булһа, әҙерәк хәйләләшеп тә ебәрергә тейеш. Күп уҡытыусылар имтиханда нәҡ шундай йылғыр булған өсөн юғары билдә ҡуя.

**Урал:** Бөгөн һәр йәш кеше баш менән дуҫ булырға тейеш. Тормошта төрлө хәлдәр була, юлыңда ла ниндәй генә кешеләр осрамай. Ана шундай осраҡтарҙа дөрөҫлөктә ҡалыр өсөн һәр ваҡыт уйлап эш итергә, башыңды юғалтмаҫҡа кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тәнем менән мин Уралда тыуһам, аңым менән тыуҙым Мәскәүҙә..." тип яҙған Рәми ағай Ғарипов бер шиғырында. Ысынлап та, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта элек-электән милләттең аҫыл улдары һәм ҡыҙҙары белем алған. Был йола әле лә үҙгәрмәгәндер, тип уйлайыҡ. Был егет-ҡыҙҙарҙың да аңы менән үҫеп, белемле белгес булып ҡайтыуҙарын теләйек.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

✓ *Ғүмер буйы ваҡыттың - оло хазина, телдең мал табыуҙа ҙур ярҙамсы икәнен онотмағыҙ. Донъя малына табыныуҙан, түбән теләктәрҙән һаҡлан: һыуға сарсап үлгән эт хәленә төшөүең бар.*



КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

22
Ике тоғро дуҫҡа ғәйрәт өҫтәп,
Мин булырмын тоғро дуҫ - өсөнсө.
Тик сығырмын улар араһынан.
Ҡылһа береһе хыянат, хөсөтлөк.

23
Арҭҡан һайын халҡым - өммәтем,
Өммәтемдең дәрте - һиммәте,
Арта барыр минең ғорурлығым,
Мөьминдәрҙең ҡәҙер-ҡимммәте.

24
Саманан ашҡан ҙур ҡорһаҡ,
Ялҡаулыҡ вә зәғиф иман,
Ғәмһеҙ булып, артыҡ йоҡлау -
Өммәтем өсөн шул яман.

25
"Сафланырға ни сара бар,
Эй, Тәңрем?" - тип һораны ҡол,
Әйтте Рәсүл: "Яҡшылыҡ ҡыл,
Әсәйеңә яҡшылыҡ ҡыл!"

"Тағы кемгә миһырбанлы
Булайым?" - тип һораны ҡол.
Әйтте Рәсүл: "Яҡшылыҡ ҡыл,
Әсәйеңә яҡшылыҡ ҡыл!"

"Тағы ниндәй шәфҡәтлектәр
Эшләйем?" - тип һораны ҡол.
Әйтте Рәсүл: "Әсәйеңә,
Әсәйеңә яҡшылыҡ ҡыл!

Йәннәттең дә йәннәтеләр,
Иң ҡәҙерле, иң изгелер -
Әсәң баҫҡан был тупраҡтыр,
Әсәң атлап йөрөгән ерҙер".

26
Һис тарһынма, ярҙам һорап килһә
Кем хәсрәттәр күргән, кем йәбер.
Аллаһ кемгә изгелектәр теләй,
Кешеләрҙе шуға ебәрер.

27
Саҙаҡаның иң яҡшыһы -
Сарсағанға саф һалҡын һыу.

28
Кемдә күркәм, тыныс холоҡ -
Шул мөьминдең иң яҡшыһы.

29
Иң күркәм иман, нур-шатлыҡ -
Сабырлыҡ менән йомартлыҡ.

30
Иман өсөн иң изге эш - иман илтеү,
Мөьминдәргә гүзәл хөкөм таба алыу,
Яҙа биреп яңылышыуға ҡарағанда
Хәйерлерәк гәйебен кисереп хаталаныу.

31
Яратһаң һин туғаныңды,
Туғаныңа белгерт шуны.

32
Әйтһә берәү:
"Халыҡ һәләк булған, бөткән" -
Шуны әйткән үҙе, тимәк, һәләк иткән.

33
Беләһегеҙме нимә ул
Ҡара йылан саҡҡан һымаҡ?
Ул - һүҙ ташып, ыҙғыш илтеү
Кешеләрҙең араһына.

34
Ишетһәгеҙ тотош бер тау юҡ булған,
имеш, ер йотҡан - Ышаныгыҙ.
Ишетһәгеҙ берәүһенең холҡо, имеш,
юҡҡа сыҡҡан - Ышанмағыҙ.

35
Ҡиәмәт көндә иң гонаһлы шул бәндәләр -
Мәғәнәһеҙ һүҙҙе иң күп һөйләгәндәр.

**(Дауамы бар).**

ҺАБАҠТАР

# Ерҙәге Ожмах

Ағалы-ҡустылы дүрт туған аталарының ҡәберенә зыярат ҡылырға килгән. Уларҙы бер һорау борсоған: баҡыйлыҡҡа күскәс, ғәзиз кешеләренең рухы ҡайҙа эләгер: йәннәткәме, әллә тамуҡҡамы? Туғандарҙың теләге шул хәтлем көслө булғандыр, күрәһең, аталарының рухы, ни хикмәт менәндер, уларҙың алдына баҫҡан. Был мөғжизәгә иҫтәре киткән туғандар аптырау ҡатыш тәүге һорауын биргән: "Атай, йәнең йәннәттәме?".

- Эйе, уландарым, минең йәнем мөғжизәле ожмахта, - тип яуап биргән атай.

- Баҡыйлыҡҡа күскәс, беҙҙең йәндәребеҙ ҡайҙа эләгер икән, - ожмахҡамы, әллә тамуҡҡамы? - тип һорарға ашыҡҡан улдары.

- Былай булғас, йәндәрегеҙ йәннәттә буласаҡ, - тигән дә аталарының рухы, юҡтан бар булғандай, барҙан юҡҡа сыҡҡан.

Йылдар үткән. Туғандар үҙ ғүмелдәре менән үлеп, баҡыйлыҡҡа күскән. Тик ни ғәләмәт: ожмах баҡсаһында иң кесе ҡустыларының рухы пәйҙә булмаған. Өс туған аталарына өндәшкән. "Атай, әйтсе беҙгә, кесе ҡустыбыҙҙың рухын ниңә ожмах баҡсаһында күрмәйбеҙ? - тигән улар. - Ер үлсәме менән иҫәпләгәндә, беҙҙең баҡыйлыҡҡа күсеүебеҙгә йөҙ йылдан ашыу ваҡыт үтте бит".

-Бушҡа борсолмағыҙ, ҡустығыҙ ҙа ожмах баҡсаһында көн итә. Әле һеҙҙең арағыҙҙа булмауының сәбәбе ябай ғына: ул һаман да Аллаһы Тәғәлә менән мөғәмәләһенән туҡталмаған.

- Юҡ, илаһи тәртип үҙ камиллығында. Кинйә ҡустығыҙҙың тәне лә, ҡартайып, бер нисә тапҡыр юҡҡа сыҡты. Әммә һәр йәндең ожмахы күңелендә йөрөй. Күңелендәген ул үҙ ҡулдары менән тормошҡа ашыра - үҙ ожмахын үҙе яһай. Бер-берен яратҡан атай менән әсәй ҙә үҙ балаһын шулай хасил итә. Ҡустығыҙҙың йәне лә илаһи тәртип буйынса күптән ожмах баҡсаһына күсергә тейеш ине, әммә күңелендәге ожмах баҡсаһы булған ергә ул яңынан әйләнеп ҡайта.

- Атай, һин беҙгә, кинйә ҡустығыҙ Алла менән һөйләшә, тигәйнең, әммә беҙ ҡустыбыҙ эргәһендә Уны күрмәйбеҙ,- тип, ағалары һорау алыуҙы дауам иткән.

- Игтибарлыраҡ ҡарағыҙ, кинйә ҡустығыҙ Хоҙай тарафынан яратылған

- Фани донъяла ни ғәмәлдәр ҡылдығыҙ? - тип, һорауға һорау менән яуап биргән рух.

Ир-азаматтар бер-бер артлы уның һорауына үҙ яуабын әйткән.

- Атай, мин ҙур ғәскәр башлығы дәрәжәһенә күтәрелдем, Тыуған илемдә дошмандарҙан һаҡланым, - тип башлап киткән иң өлкән улы. - Ярлыларҙы һәм хәлһеҙҙәрҙе бер ваҡытта ла рәнйетмәнем, үҙ һуғышсыларымды ҡурсаларға тырыштым. Аллаһы Тәғәләнең барлығына инанып йәшәнем. Шуға күрә ожмахҡа эләгермен, тип уйлайым.

-Мин Аллаһы Тәғәләнең тәғлимәттәрен халыҡҡа тараттым, уларҙы изгелеккә өндәнем һәм ошо өлкәлә билдәле рухани булдым, шуға күрә, мин дә ожмахҡа эләгермен тип уйлайым, - тип яуап биргән икенсе улы.

Өсөнсө улы былай яуаплаған:

-Мин билдәле ғалиммын. Кешеләрҙең йәшәйешен еңеләйтеү өсөн бик күп асыштар яһаным. Ғилем өлкәһендәге һәр асышым өсөн Аллаһҡа рәхмәттәр уҡыйым. Шуға күрә мин дә һис шикһеҙ ожмахҡа эләгергә тейешмен.

-Ә мин, атай, баҡса үҫтерәм, мул уңыш алыр өсөн тир түгәм, - тип башлаған һүҙен кесе улы. - Хеҙмәтем емешенән ағайҙарыма ла өләшәм. Яман уйҙарҙан йыраҡ йөрөргә тырышам, изге ғәмәлдәрҙе ихлас үтәйем һәм шуға күрә ожмахҡа эләгермен тип өмөтләнәм.

Ерҙәге ваҡыт үлсәме менән тағы ла бер быуат ваҡыт арауығы үткән. Өс туған ожмах баҡсаһында яңынан осрашҡан, әммә кинйә ҡустыларының рухы һаман да күренмәгән. Аптырауға ҡалған ағай-эне йәнә аталарына мөрәжәғәт иткән.

- Йөҙ йыл ваҡыт үтте, е кинйә ҡустыбыҙ һаман да ожмахҡа күсмәй, ҡайҙа ул? - тип төбәшкән улар.

- Ул һаман да Аллаһы Тәғәлә менән һөйләшеүенән туҡтамаған, шуға күрә арағыҙҙа юҡ, - тип яуап биргән атай кеше.

- Ә ниңә беҙ уны күрмәйбеҙ? Ул ҡайҙа, Хоҙай менән нисек аралаша? - тип һораған туғандар.

- Ергә ҡарағыҙ, - тип яуап биргән аталары.

Өс туған ожмахтан ергә баҡҡан. Гөл-сәскәләргә күмелгән гүзәл баҡса күргән улар. Бәләкәй ҡустылары, элекке кеүек, һаман да ер эшкәртеүен, баҡса үҫтереүен дауам итә икән дә! Кинйәкәүҙәренең йөҙөнән йәшлек сатҡыһы һис тә һүрелмәгән. Янындағы кес кенә балаға ул ниҙер аңлата, баҡса үҫтереү нескәлектәрен өйрәтә. Сибәр ҡатыны атай менән баланың мөнәсәбәтенә һөҡланып ҡарап тора.

- Нинә ул беҙҙең кеүек ожмах баҡсаһында түгел, ә һаман да ерҙәге баҡсаһында соҡсона? Хаҡ Тәғәлә алдында уның ни гонаһы бар? Әллә Хоҙай Йыһандағы йәшәү тәртибен үҙгәрткәнме? - Өс туған бер-бер артлы һорау яуҙыра башлаған.

ғанды хәстәрләй, илаһи көс ҡөҙрәте менән барлыҡҡа килгән үләндәргә, емеш-еләккә, ағастарға йән өрә. Аллаһы Тәғәләнең матдиләшкән уй-хыялын һаҡлай. Хозур тәбиғәт, күркәм баҡса теле аша ул Хоҙай менән мөғәмәләгә инә.

- Атай, ә беҙҙең йәндәребеҙ үҙ тәненә яңынан ҡайта аламы?- тип һорарға ашыҡҡан өлкән туғандар.

- Һеҙҙең йәндәрегеҙ әле ожмах баҡсаһында. Кинйә ҡустығыҙ кеүек берәй әҙәм балаһы ожмах баҡсаһына хас баҡсаны ерҙә үҫтерһә генә һеҙҙең йәндәрегеҙ ҙә үҙ тәненә әйләнеп ҡайтасаҡ.

- Ерҙәге гүзәл баҡсалар башҡаларҙың йәне өсөн үҫтереләме ни? Беҙ үҙ тәнебеҙгә яңынан ҡайтып, баҡса үҫтерә алмайбыҙмы ни?- тип, күҙ йәштәре аша һораған өс туған.

- Бындай мөмкинлек һеҙгә бер тапҡыр бирелгәйне, әммә һеҙ уны файҙаланманығыҙ, баҡса үҫтермәнегеҙ, - тип яуап биргән атайҙары.

- Атай, ә һин үҙең ерҙәге ожмах баҡсаһына ҡайта алаһыңмы? - тип һуңғы һорау биргән өс туған.

- Ерҙәге анау шау сәскәгә күмелгән алмағас төбөндәге сәңгелдәкте күрәһегеҙме? Минең йәнем сәңгелдәктә яткан бала тәнендә, сөнки кинйә ҡустығыҙ үҫтергән гүзәл баҡсалағы һәммә ҡимммәтте мин башлап үҫтергәйнем...

**Исмәгзәм ИСМӘҒИЛЕВ**
**әҙерләне.**

**(Дауамы бар.)**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ИХЛАС БҮЛӘК...

## юғарыраҡ баһалана

- Ҡунаҡ йылмайыуы - бер баҡыр, туғандыҡы - ун алтын.
- Ерҙә алтын серемәҫ, батыр даны илдә үлмәҫ.
- Тәҙрәһенә ҡарап ҡатынын, ҡапҡаһын күреп ирен баһала.
- Хоҡуҡ-хөкөм яулап, осҡалаҡтай осма: ҡанат осоң яныр, йөҙөнә оят ҡуныр.
- Ҡырпаҡ ҡар - эҙ, алдаҡсы күҙ йәшерә.
- Ике йәшен бәрелешһә - ер тетрәй, ике яуыз сәкәләшһә - ил инрәй.
- Наҙан күп белөм, аңлы күпте белергә тырышам тиер.
- Иң яҡының һатлыҡ йәнгә, ысын дуҫ тигәнең хас дошманға әйләнһә - йөрәк ептәре өҙөлә.
- Һыуҙа ҡоро таш, һаран табында ҡуйы аш булмай.
- Ғүмер буйы ҡыйын хәлдәр булып тора, ҡыйыштары ғына тыумаһын.
- Алйот күп һорай - нимә һорағанын үҙе белмәй.
- Алйотто алйотлоғо өсөн ғәфү итәләр, ә аҡыллыны күп осраҡта хөкөм итәләр.
- Төймә тапҡан тилермәҫ, тимер тапҡан тилмермәҫ, Иҙел кискән киҫелмәҫ һәм бөгөлмәҫ.
- Шишмә һыуы көршәккә һыймаҫ, нәфсе ҡаҙаны һис тулмаҫ.
- Еңәм, тип гел теш күрһәтмә - тештерендә усыңа һалып китерҙәр.
- Һаран ҡулы таш бәллүр, йомарттыҡы - йәйге дөүер.
- Бүләк күләме менән түгел, ихласлыҡ менән баһалана.
- Донъяла һәр эш, һәр хәл генә бөхетле тамамланмай - ҡара ҡайғыһы ла килеп сыға.
- Йүнһеҙ кеше "сүп" һүҙ менән баш вата, эшсәндәр - аҡса таба, мал һата.
- Ғүмер буйы ваҡыттың - оло хазина, телдең мал табыуҙа ҙур ярҙамсы икәнен онотмағыҙ.
- Донъя малына табыныуҙан, түбән теләктәрҙән һаҡлан: һыуға сарсап үлгән эт хәленә төшөүең бар.
- Насар холоҡло кеше үҙен генә түгел, тирә-йүндәгеләрҙе лә ғазапҡа дусар итә, бәләгә юлыҡтыра: ундайҙарҙан һаҡ бул.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Арба башында бесән ҡутарып торған Фәтхерәхмән олатай: "Самат улым, һин бесәнде ҡәҙимге күп сапҡанһың икән, маладис", - тип, күңелде тағы ла ҡанатландырып ебәрә.*



ХӘТЕРКИТАП

# АЛТЫ ЙӘШЛЕК МАЛАЙҘЫҢ...

## алтмыш йәшлек ҡарт менән бесән сапҡаны

**Бала саҡ һуҡмаҡтарым Ирәндек һырттарындағы Күсем ташынан 6 саҡрым арыраҡ урынлашҡан Күсей ауылына илтә. Ауылымдың үтә ихлас халҡы, гүзәл тәбиғәте һаман күҙ алдында, йөрәк түрендә һаҡлана. Бала сағымда күргәндәрҙе бөгөн тағы бер ҡат күҙҙән үткәрәм дә, уйға ҡалам...**

Бөйөк Ватан һуғышы күптән тамамланһа ла, йүнләп ризыҡ күрмәгән ауыл халҡы ауыр көн итә ине. Шулай ҙа матур тормош ҡороу хыялы менән янған ауылдар яйлап йәнләнә башланы. Һуғыштан ҡайтҡан ирҙәр дәртләнеп, ҡанатланып, көндөҙ - колхоз өсөн, ә төндәрен үҙ ғаиләһе өсөн тырышып эшләне. Атайым Зәйнулла Сәфәрғәле улы Бикбирҙиндың ғаиләһе лә ил күргән михнәт-шатлыҡтарҙы үҙ иңендә татыны.

1950 йылдың август айы ине. Мин етенсе йәш менән барам. Ауыл халҡына, ниһәйәт, бесән әҙерләргә рөхсәт ителде. Атайым магазиндан миңә лә иң бәләкәй салғы һатып алды, уға муйылдан тотҡос ҡуйҙы. Минең түҙемлекте юрый һынағандай, уны оҙаҡ итеп, бик ентекләп сүкеп, яныған, картуф баҡсаһынан 100 метр самаһы арыраҡ үҫкән урынға бесән сабырға өйрәтергә алып килде.

- Минең нисегерәк сапҡанды ҡарап тор. Салғыны ошолай тот, һелтәгәндә ул ергә тигеҙ тейеп барһын, башы ла, төбө лә ҡалҡмаһын! - тип, миңә тигән салғыны һелтәп, үләнде саба башланы. Һуғыштан һул ҡулы тупыс булып ҡайтҡанға күрә, салғыны ул терһәк быуыны менән ҡыҫып тота ине. - Көсөңдө йәлләмәй, ныҡ һелтәргә тырыш. Яй һелтәһәң, үлән сабылмай, - тип аңлатыуын дауам итә үҙе. Ике рәт үткәндән һуң, атайым салғымды миңә тотторҙо. Мин саба башланым. Әммә салғым үлән башынан шыйлап үтә лә китә, үтә лә китә. Йә тигеҙһеҙ урынға сәнселеп ыҙалата.

- Салғыны көс менән ергә ошолай тигеҙ итеп баҫ, - тип өйрәтә тағы атайым. Ул өйрәткәнсә сапҡас, эшем бер аҙ яйланып китте. Унлап рәт сыҡҡас, бөгөнгә етте, тине атай. Ҡайтып барышлай, үҙләштерә башлаған һөнәрем тураһында уйлап бер һөйөнһәм, атайым ыңғайына йөрөй алыуыма тағы ҡыуандым.

Кис еткәс, Оло Аҡма буйында йәшәгән Фәтхерәхмән Ишбирҙин олатайҙарға киттек. Бабай ауылда сәс алыусы булараҡ билдәле. Беҙҙең килеүебеҙ сәбәбен дә сәс алдырыу йомошонандыр тип уйлап, миңә: "Самат улым, һин бынау ултырғысҡа ултыр, мин хәҙер бәкемде үткерләп алайым да, эште башларбыҙ", - тип, бәке үткерләргә тотондо. Атайым килеүебеҙҙең сәбәбен аңлата һалды: "Фәтхерәхмән ағай, беҙ һиңә сәс алдырыу уйы менән килмәгәйнек. Малайҙы бесән сабырға өйрәтергә ине. Һин Саматты үҙең менән бесәнгә алып йөрө әле. Беҙ бөгөн аҙыраҡ өйрәнә башланыҡ ул, эш килеп сыҡҡандай... "

Фәтхерәхмән ҡарт мине "үлтереп" маҡтарға тотондо: "Самат маладис бит ул, булдырыр. Быйыл бер һарыҡҡа еткерһә, киләһе йыл бер башмаҡҡа еткереп сабыр. - Үҙе минең арҡанан һөйә. - Иртәгә сәғәт унынсы яртыға килеп ет. Килгәсегеҙ, бер юлы сәсегеҙҙе лә алайым", - тип ҡырт киҫеп, тәүҙә атайҙың, аҙаҡ минең сәсте алып ҡайтарҙы.

Иртәгәһенә әсәйем миңә бешкән картуф, айран тотторop, тәүге тапҡыр бесән сабырға оҙатты. Мин бик шат инем. Беҙҙең саба торған сабынлыҡ ере сауҡа ҡайындар араһында икән. Килеп еткәс, олатай ашамлыҡтарҙы бер ботаҡҡа элде лә, салғыларҙы тикшереп, тағы бер тапҡыр яныны. "Улым, ҡайынға ныҡ яҡын сапма, арыраҡ ал, юғиһә, ағас сатырын әләктереп, салғыңды үтмәҫләрһең, - тип, үҙе ҡыҫҡа ғына ике рәт сабып күрһәткәс, тағы: - Һин ошонда сап, ә мин арыраҡ барам, күпме саба алаһың, атайың шул саҡлы бесәнде алып ҡайтыр", - тип китеп барҙы.

Мин бар тырышлығымды һалып һелтәнергә тотондом. Бындағы үлән кисәгеһенән бейегерәк тә, сабыуға ла йомшағыраҡ ине. Бер аҙ сапҡандан һуң, айран эсергә булдым. Әскелтем генә айран менән һыуһынды ҡандырғандан һуң, бабай янына киттем. Нишләптер, олатайҙың бесәнлеге яҡшыраҡ һымаҡ тойолдо. "Мин дә ошонда сабайым әле", - тип ысҡындырҙым. Олатай: "Улым, һин сабып йөрөгән ерҙә лә бесән етерлек, шунда ғына сап. Хәҙер билдә һалам, минең яҡҡа сыҡма", - тине. Сиктәрҙе бүлеп сыҡҡас, айран эсеп алды ла, ҡабат үҙ аҡланына йүнәлде. Миңә уның һүҙен тыңларға тура килде - ары тик олатай күрһәткән ерҙәрҙе генә саптым.

Төш еткәс, тәмләп ашап алдыҡ. Олатай күләгә урынға үлән түшәне лә, мине саҡырҙы һәм бер аҙ серем итеп алырға ҡушты. Мин уянған ваҡытта ул үҙ сабынлығына киткәйне инде. Мин салғым ятып ҡалған ергә килдем дә, бер аҙ үҙем сапҡан бесән бакуйҙарына ҡарап торҙом, эстә шатлыҡ ҡайнай бит, малай. Артабан тағы ла дәртләнеберәк саба башланым. Мин саба торам, үләндәр кәлепкә һалына тора. Төшкө аштан һуң күп сапманыҡ. Ике салғыны ла ботаҡҡа элдек тә, сумкаларыбыҙҙы алып, ҡайтыр яҡҡа атланыҡ. Олатай: "Бөгөнгә етер, тәүге көндәрҙә арығансы сабырға ярамай. Устар ҡабарһа, улар йүнәлгәнсе, бер аҙна самаһы ваҡыт кәрәк буласаҡ", - тине.

Шулай көн һайын килеп, Фәтхерәхмән олатай менән икәүләп кенә бесән саптыҡ. Башҡа көндәрҙә лә мине иртәрәк ҡайтарып ебәрер булды ул: "Әле бәләкәйһең, оҙаҡ эшләргә ярамай. Әлегә иртәрәк", - тип арҡамдан һөйә лә, иртәгеһенә нисәлә килергә икәнлеген әйтә. Мин башта бик ныҡ арый инем шул, шуға ла бабай әйтеү менән ҡайтып китә һала инем. Бесәнде сабып бөткәс, уны атайым ат арбаһына тейәп алып ҡайтты. Арба башында бесән ҡутарып торған әлеге лә шул Фәтхерәхмән олатай: "Самат улым, һин бесәнде ҡәҙимге күп сапҡанһың икән, маладис", - тип, күңелде тағы ла ҡанатландырып ебәрә. Мин уларҙың "ах та ух" килеп бесәнемде бушатыуын ҡәнәғәтләнеп ҡарап торам. "Фәтхерәхмән ҡарттың бесәнен бушатҡан саҡта улай уҡ ыҙаламай инеләр" - тип, үҙемсә уйлайым. Атайым менән олатайҙың ни өсөн улай ҡыланыуын ҙурайғас ҡына аңланым. Улар мине дәртләндереп, маҡтап, эшкә өйрәткән. Ошо саҡтарҙағы уларҙың миңә ҡарата ысын дипломаттарса мөнәсәбәте, кәңәштәре һағындыра.

* * *

Һирәк осрай торған ҡоролого менән хәтерҙә ҡалған 1951 йылдың йәйе. Ҡоролоҡ яңы күтәрелеп килгән ауыл хужалыҡтарын, бигерәк тә, ашамлыҡҡа туйынып та етмәгән ауыл халҡын ҙур һынауға дусар итте. Май айы аҙағында уҡ яландарҙа, яланғас тау түбәләрендә яңы үҫеп килгән үләндәр эҫелектән кибеп бөттө. Беҙҙең, яланаяҡ йөрөп өйрәнгән балаларҙың ҡалынайып бөткән табандарын да үлән төбөрҙәре ныҡ ауырттыра ине. Ауылға яҡын ялан-ҡырҙарҙа, һаҙлыҡтарҙа сабырлыҡ үлән ҡалманы. Булған ғына йәшеллек үҙ иркенә йөрөгән малдан тапалып, ҡырып ашалып бөттө.

Июнь башланыу менән беҙ өсәүләп: әсәйем, туғыҙ йәшлек Дамир ағайым һәм мин, тоҡ һәм салғы алып, көн һайын бесән ташырға керештек. Ауылдан 2-3 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан сауҡалыҡта аҙ ғына бесән тапһаҡ та, әсәйебеҙ саба, беҙ ағайым менән тоҡтарға тултырабыҙ. Шулай итеп, көн дә өс тоҡ бесән ташый торғас, июнь айы ла үтеп китте. Бесәнгә төшөргә рөхсәт итһендәр өсөн тағы бер ай бар. Колхоз малына етерлек фураж әҙерләп бөтмәйенсә, үҙ малың өсөн бесәнгә тотонорға хаҡың юҡ. Беҙ бер-ике көн ял иткәс, төшкө сәйҙә бесән әҙерләү мәсьәләһе тағы күтәрелде:

- Нисек булһа ла биш баш һыйыр малына, 15-ләп һарыҡҡа етерлек бесән әҙерләргә кәрәк. Иртәгәһен апайыңдар (улар йәйге каникулда колхозда һауынсы булып эшләне) иртәнге һауындан ҡайтҡас, күмәкләп Тоҡан тигән ергә юл алығыҙ, - тине атайым әле бәлиғ тә булмаған Дамир ағайға. - Унда ярты ҡышҡа етерлек ҡамыш, күрән бар. Мин эштән ҡайтҡас, Самат менән салғы, һәнәк-тырмаларҙы алып барып етербеҙ. Юлда кеше күҙенә артыҡ күренергә тырышмағыҙ. Бесән сабыуығыҙ тураһында ла бер кемгә лә һөйләнмәгеҙ. Колхоз өсөн бер ниндәй ҡимммәткә эйә булмаған Һаҙлыҡ күрәнен сапһағыҙ ҙа, әле хужаларҙан рөхсәт юҡ, - тип һүҙен йомғаҡлап ҡуйҙы.

Ошо урында ауыл хужалығы һалымы тураһында бер кәлимә һүҙ әйтеп китеү зарур булыр. Беҙҙең быуын бик яҡшы хәтерләйҙер: һалымға ярашлы, крәҫтиән үҙе етештергән мал продукцияһының яртыһын хөкүмәткә бушлай тапшырырға тейеш ине. Ҡара таңдан ҡара кискә тиклем колхозда ал-ял белмәй, бер тин аҡса ала алмай эшләгән ауыл кешеһе өсөн был саралар бер ниндәй ҙә файҙа килтермәй ине. Ауыл балаларын ас ҡалдырып тартып алынған мал-мөлкәт ил халҡын ашатыуға китмәне - ә Европа һәм Азия илдәренә ярҙам рәүешендә оҙатылып торҙо. Әлбиттә, донъя аренаһында илдең дәрәжәһен арттырыу маҡсатында эшләнде былар. Беҙҙең ғаилә ишле булғанға күрә генә күберәк мал аҫрау хоҡуғы бирелгәйне. Был һалым 1954 йылда бөтөрөлгәс, халыҡ иркен тын алып ҡалды.

Шулай итеп беҙ, балалар, Тоҡан һаҙлығының көнбайыш һәм көнсығыш төбәктәрен саба башланыҡ. Атайым көн һайын эштән һуң килә. Ул килһә, эш байтаҡҡа ырап китә. Элек бында тал һәм йәш сауҡа үҫкән. Һуғыш ваҡытында ағастар утынға ҡырҡылып бөткәс, күрәне генә ҡалған. Бәхетебеҙгә күрә, һаҙлыҡта бесән бер ҡышҡа етерлек булып сыҡты. Йыл ҡоро булһа ла көҙ яуған яуын ул ерҙәрҙе ат йөрөй алмаҫлыҡ һаҙмаҡҡа әйләндергәйне. Шуға ла күбә көйөнсә ултыртып ҡалдырған бесәнде атайым апайҙарым менән декабь аҙағы - ғинуар баштарында, ер яҡшылап туңғас, ат менән ташып алды.

Байтаҡ ғаиләләр февраль айында уҡ бесәнһеҙ ҡалды. Уларҙы әлеге лә баяғы күрән бесәнебеҙ ҡотҡарҙары. Боронғоларҙың: "Тырышҡан - ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан" - тигән әйтеме ауыр саҡтарҙа һәр саҡ иҫемә төшә. Ата-әсәйебеҙҙең әрһеҙлеге, тырышлығы һәм түҙемлеге 13 баланы үҙҙәре кеүек тырыш, эшлекле итеп тәрбиәләргә ярҙам иткәндер. Үткән йылдағы ҡоролоҡ та ауыл халҡының бәкәленә һуҡты. Ялан яғындағы ауылдарҙа йәшәгән халыҡ өсөн бесән әҙерләү ҙур мәсьәләгә әүерелһә, Һаҡмар йылғаһы буйындағы һәм урман яғындағы ауылдарҙа бесәнде етерлек эшләү мөмкинлеге булды. Нисек кенә булмаһын, тәбиғәт көйһөҙләгән дә үҙ тырышлығың менән еңергә була, тип әйтмәксемен. Бесән юҡ, тип, малды һатып бөтөү анһат эш ул. Әле лә бына шәхси хужалыҡтарҙа мал һаны байтаҡҡа ҡыҫҡарҙы. Темәс ауылы хакимиәте биләмәһендә генә 2009 йылда Татарстанға 1700 баш йәш мал һатылһа, 2010 йылда был һан 2000-гә етте. Мал беҙҙең ҡотҡарыусыбыҙ икәнен онотмаһаҡ ине, уларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн тырышһаҡ ине, тим.

**Самат БИКБИРҘИН,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Баймаҡ районы Темәс ауылы.**



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙӨРӘК СӘЛӘМӘТЛЕГЕ ӨСӨН...

## дөрөҫ итеп көлөгөҙ

■ Доктор Джонни Боуден кеше сәләмәтлегенә кире йоғонто яһаусы аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлекте йышыраҡ тиҙ туҡланыу рестарандар селтәрҙәрендә тәҡдим ителгән французса ҡыҙҙырылған картуф (френч-файз) башлап ебәрә. Картуф, май, шәкәр һәм яһалма тәм биреүсе өҫтәмәләр ҡушылмаһынан торған был аҙыҡ организмға насар тәьҫир итә. Был исемлеккә татлы донаттар, чипсы, составында химикаттар күп булған газлы эсемлектәр, "Сникерс" кеүек батондар, майлылығы түбән печеньелар (майҙы химикаттар алыштыра), крекерҙар (шулай уҡ он, тоҙ, шәкәр һәм химикаттарҙан тора), претцель тип аталған тоҙло керәндилдәр ингән.

■ Көлөү кәйефте күтәреп кенә ҡалмай, сәләмәтлекте лә яҡшырта, тип белдерә Һиндостандың Indraprastha Apollo дауаханаһы белгестәре. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, көлөү йөрәк һәм үпкәләр өсөн яҡшы күнекмә булып тора, был ваҡытта йөрәк тибеше йышая, мейе ял итә. Ғалимдар әйтеүенсә, көлөү стрестан һаҡлаусы яҡшы сара ла. Тик бының өсөн ауыҙҙы асып, рәхәтләнеп көлөргә кәрәк. Ә ирендәрҙе ҡымтып ҡына хихылдау организмға кире йоғонто яһай. Ғалимдар шулай уҡ хәҙерге ваҡытта кешеләрҙең һирәк көлөүе тураһында ла белдерә. Иҫәпләүҙәргә ярашлы, элегерәк барыһы ла көнөнә 18 минут самаһы көлһә, хәҙер был ваҡыт 6 минутҡа ла тулмай.

■ Инглиз ғалимы, Лондон университетының фитохимия профессоры Симон Гиббонс раҫлауынса, көнөнө өс сынаяҡ ҡына яңы бешерелгән сәй эсеү сәләмәтлекте һаҡларға мөмкинлек бирә. Сәй эсергә ғәҙәтләнеү баш мейеһе шеше, инсульт, төрлө инфекциялар кеүек ауырыуҙарҙы булдырмай. Нидерланд ғалимдары 1996 йылда уҡ сәй эсергә яратыусыларҙа инсульт һирәк осрауын билдәләгән. Ҡара сәйҙәге флавоноидтар артерияларҙы һәм ҡан тамырҙарын зарарлы холестериндан һаҡлай. Белгестәр әйтеүенсә, бында сәйҙең йәшел йәки ҡара, шәкәрле йәки шәкәрһеҙ булыуы мөһим түгел. Сәйҙе тик һөтһөҙ эсергә кәрәк, сөнки һөт организмға эсемлектең файҙалы матдәләрен үҙләштерергә ҡамасаулай.

■ Банан - энергия, витаминдар һәм ферменттар (сахароза, глюкоза һәм лактоза) сығанағы ғына түгел, тип белдерә ғалимдар. Был емеш йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан, артриттан файҙалы, нервылар системаһын нормалләштерергә лә ярҙам итә. Уның составындағы матдәләр шатлыҡ гормоны - серотонин бүленеп сығыуға бушлыҡ итә. Аргентинала үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, банан аш һеңдереү системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡатын-ҡыҙ организмын стрестарҙан һаҡлай.

■ Диетологтар лимонды организмды таҙартыусы иң яҡшы сара тип һанай. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик күнекмәләр яһағанда был цитруслы үҫемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммун системаһын нығытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки уның составындағы пектин асығыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

**Йыш ҡына әсәләр ҡулдарын һелтәп, күңелдәре төшөп: "Был балаға нимә кәрәк икәнен бер ҡасан да белеп булмай - уйынсыҡ һатып алаһың, тырышаһың, ә ул уны икенсе көнөнә үк ватып сығара йәки бер ике сәғәттән онота, уларға атайҙың төрлө ҡорамалдары һәм әсәйҙең һауыт-һабалары менән уйнау ҡыҙығыраҡ", - тип зарлана.**

# УЙЫНСЫҠТАРЫ БУЛМАҺА...

## һауыт-һаба менән уйнаһын балаң

Балалар, ысынлап та, йортта ата-әсәләре ҡулланған әйберҙәргә тартыла. Мәҫәлән, өс йәшлек ҡыҙҙар уйнағанда уйынсыҡ һауыт-һаба менән пластмасса йәшелсә, емеш-еләк ҡулланыуға ҡарағанда, әсәләре тотона торған ысын кәстрүлдәрҙе, һауыт-һабаны уйнатыуҙы хуп күрә, уларҙың эсенә урамға саф һауаға сыҡҡанда йыйған үләндәр, япраҡтар, таштар тултыра. Сабыйҙарҙың был мауығыуына ҡарап, "Ә ҡиммәтле уйынсыҡтарға аҡса түгеү кәрәк булды микән?" тигән үкенес тойғоһо ла уяныrға мөмкин. Бәлки, ысынлап та, уйынсыҡтар һатып алып тормаһаң да булалыр? Әйҙәгеҙ, бер аҙ балалар уйынсыҡтары һатылған магазинға бармай тороғоҙ: бөгөнгә сабыйығыҙ ҡулына нимә эләгә, шуның менән уйнап торһон.

● Балағыҙға төймәһенә баҫып фонарҙың нисек янғанын һәм һүнгәнен күрһәтегеҙ. Был мауыҡтырғыс эшмәкәрлек баланы күңелләндереп кенә ҡалмаясаҡ, ә уның фекерләү һәләтен, шулай уҡ ҡул хәрәкәте координацияһын да үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк.

● Үтә күренмәле пластмасса шешәләрҙе дөгө, ҡарабойҙай, фасоль, борсаҡ менән тултырығыҙ һәм ҡапҡасын ныҡ итеп ябығыҙ ҙа, балағыҙға уйнарға бирегеҙ. Бәләкәскә шешә эсендәге ярмаларға ҡарауы, уларҙы шалтыратыуы бик ҡыҙыҡ буласаҡ. Шешәне өйөрөлтөп, бала уның эсенә тултырылған предметтарҙы күҙәтәсәк, ә был уның күреү һәләтенең тотороҡланыуына булышлыҡ итәсәк. Балаларҙы тәрбиәләү һәм уларҙың ҡул хәрәкәте йүнәлештәрен нығытыу өсөн бындай уйын файҙалы буласаҡ.

● Балаға үҙенең буяуҙары менән генә түгел, ә аҙыҡ-түлек, мәҫәлән, бешкән сөгөлдөр, сейә, ҡарағат (балаларға бигерәк тә уларҙы ҡағыҙға һытыу оҡшай), йәшел үҫемлектәр, кишер, ҡайнатмалар менән дә һүрәт төшөрөргә рөхсәт итегеҙ. Аҙаҡ бысранған баланы һәм әйберҙәрҙе йыуырға кәрәк тип ҡурҡырға ярамай.

● Кәстрүлде төрлө борсаҡтар, дөгө һәм башҡа ярмалар менән тултырып, балаға "бармаҡлы бассейн" эшләгеҙ. Әйҙә ул унда ҡулдары менән бутап уйнаһын. Был уйын тактик һиҙемләүҙе үҫтереү өсөн бик файҙалы. Ҙурыраҡ йәштәге балаға Һыуһылыу тураһында әкиәт һөйләп, уға ҙур булмаған эштә - ярмаларҙы сорттары буйынса айырып һалырға ярҙамлашырға тәҡдим итегеҙ. Был кесе моторикаһы үҫтереү өсөн иң яҡшы күнекмә. Шулай уҡ өлкәнерәк йәштәге балалар менән ярмалар ярҙамында һүрәт төшөрөргә була - манный ярмаһын ҡулланғанда был уңышлыраҡ килеп сығасаҡ.

● Кер ҡыҫтырғыстар менән баланың үҫешенә булышлыҡ итеүсе бик күп төрлө уйындар уйлап сығарырға була. Мәҫәлән, ҡағыҙҙан ҡырҡып алынған йәнлек һындарын ҡыҫтырырға, баланан кер ҡыҫтырғыстарын биҙрә элмәгенә, келәм ситтәренә ҡыҫтыртырға мөмкин. Кер ҡыҫтырғыстарын баланың кейеменә тағырға һәм унан уларҙы сисеүен һорарға була.

● Балаға бер һауыттан икенсе һауытҡа һыу бушатырға рөхсәт итегеҙ.

● Көнкүрештә ҡулланылған ҙур булмаған әйберҙәрҙән "мөғжизәле моҡсай" эшләгеҙ. Үтә күренмәгән пакетҡа йәки сумкаға балағыҙ һәм үҙегеҙ ҡулланған төрлө әйберҙәр һалығыҙ, мәҫәлән, тараҡ, сәс өсөн резинкалар, фонарь, фотоаппарат, һ.б. Балаға ҡулын моҡсай эсенә тығып, әйберҙәрҙе тотоп ҡарап, унда нимә ятҡанын белергә тәҡдим итегеҙ. Балалар был уйынды бик ярата. Был уйын бәләкәстең күңелен үҫтереп кенә ҡалмай, ә уның тактик һиҙемләү тойғоларын, хәтерен, логикаһын һәм кесе моторикаһын да үҫтереүгә ярҙам итәсәк.

● Лупа аша өй үҫемлектәренең япраҡтарын ҡарарға була. Бындай тәжрибә балала илгәҙәклек, алсаҡлыҡ һәм күҙәтеүсәнлек сифаттарын үҫтереү өсөн мөһим.

● Өҫтәл кәрәк-яраҡтары ярҙамында баланы һанарға өйрәтегеҙ. Салфетканан төрлө фигуралар эшләргә мөмкин. Әйләндереп ҡуйылған стакандар менән уйынсыҡтарҙы йәшерергә һәм балаға стакан аҫтында нимә йәшеренгәнен иҫләргә ҡушырға була.

● Баланы өй эштәренә ылыҡтырырға кәрәк икәнен дә онотмағыҙ. Юғиһә, бәләкәстәр ата-әсәләренә кер йыуышырға, һауыт-һаба йыуырға, саң һөртөргә, иҙән һеперергә, сөй ҡағырға (уйынсыҡ сөйҙәр менән булһа ла) ярҙам итергә бик ярата. Баланың ололарға ярҙам итергә тигән теләгенә ыңғай яуап биргән ата-әсәләр уларҙы ололарҙың эштәренә ылыҡтыра, был шулай уҡ баланың дөйөм үҫешенә лә булышлыҡ итә.

Ә инде фантазияғыҙ һүнһә, алдан ниндәй уйын икәнен әйтмәйенсә генә, балаға өй әйберҙәрен былай ғына бирергә лә мөмкин. Шул ваҡытта бала фантазияһының ни тиклем хикмәтле һәм төрлө була икәнен раҫлап, үҙе төрлө уйындар уйлап сығара башлаясаҡ.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әл-Мәәниғү** - Үҙе теләмәгән нәмәләрҙе тыйыусы. Ир менән ҡатын араһында татыулыҡ булмаһа, "Йәә Мәәнииғү" тип күп тапҡыр уҡыһалар, араларында мөхәббәт барлыҡҡа килер.

**Әд-Даррииү** - бәндәләрҙе һынау өсөн ҡайғы-хәсрәт, бәлә-ҡазалар биреүсе зат. Түбән дәрәжәгә төшкән бәндә һәр йома кис был исемде йөҙ мәртәбә уҡыһа, бөйөк мәртәбәгә ирешер.

**Ән-Нәәфиғү** - мәнфәғәт һәм файҙа биреүсе зат. Дүрт көн хәле еткәнсе "Йәә Нәәфииғү" тип уҡыған бәндә зыяндан имен ҡалыр.

**Ән-Нууру** - нур биреүсе, ер һәм күктәргә, бөтә тереклеккә яҡтылыҡ биреүсе зат. Ҡөрьәндән "Нур" сүрәһен уҡып, күп тапҡыр "Йәә Нууру" тигән бәндәнең күңеле мәғрифәтле, нурлы булыр.

**Әл-Бәдииғү** - ғәжәйеп, миҫалы, оҡшашы булмаған нәмәләрҙе бар итеүсе. Бер хәүефле хәл сығырға торһа, бәндә: "Йәә Бәдииғүссәмәүәти үәл ард", - тип етмеш мәртәбә әйтһә, хәүефлектән ҡотолор.

**Әл-Бәәҡийү** - мәңге һүнмәй, юҡҡа сыҡмай. Ошо исемде даими ҡабатлаусыға Раббыбыҙ оҙон ғүмер бирер.

**Әл-Үәәриисү** - бөтөн мираҫтың хужаһы һәм уны бәндәләренә йомартлыҡ менән биреүсе. Үҙе барлыҡҡа килтергән һәр нәмәнең мираҫы үҙ ҡулында булған зат. Был исемде даими әйткән кеше Раббыһының хәйерле мираҫына лайыҡ булыр.

**Әр-Рашииду** - бәндәләрҙе тура юлға йүнәлтеүсе һәм ул юлда бәхет биреүсе. Был исемде даими ҡабатлап торған бәндәһенә Аллаһы Тәғәлә изге ғүмер юлы бирер.

**Әс-Сабууру** - сабырлыҡҡа тиңе булмаған зат. Ул гонаһлыларҙан үс алырға ашыҡмай. Һәр эште үҙ ваҡытында ғына башҡара. Ниндәй ҙә булһа эшкә сабырлығы етмәгән кеше Раббыһын уйлап, "Йәә Сабууру" тиһә, уға сабырлыҡ килер.

**Әл-Баррийү** - тоғролоҡло, һәр эште дөрөҫ ҡылыусы, үҙ вәғәҙәһен үтәүсе. Ошо исемде даими әйтеүсенең телендә ялғанлыҡ булһа, дөрөҫ һүҙгә күсер.

**Әл-Хаафииду** - бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаусы. Өс көн ураҙа тотоп, дүртенсе көн "Йәә Хаафииду" тип етмеш мәртәбә уҡыһа, дошмандарынан имен булыр.

**Әр-Раафииғү** - юғарыға күтәреүсе, үҙенә тәҡүәлеләрҙең дәрәжәһен күтәреүсе. Был исемде кистәрен йөҙ мәртәбә әйткән кеше йәмғиәттә дәрәжәле булыр.

**Әл-Басиирү** - һәр нәмәне яҡшы күреүсе. Ҡараңғылыҡ аша ла, йәшерен булһа ла, барыһын да күреүсе. Уның күрмәгән бер нәмәһе лә юҡ. Йома намаҙынан һуң йөҙ мәртәбә был исемде әйткән кешене Аллаһы Тәғәлә күренеп торған һәм йәшеренеп килгән хәүеф-хәтәрҙән һаҡлар.

**Әл-Хәккәәмү** - хөкөм итеүсе. Бәндәләрҙе ҡылған гонаһтары өсөн ғәҙел хөкөмгә тарттырыусы. Йоҡларға ятыр алдынан "Йәә Хәкәәмү" тип ҡабатлап йоҡлап китеүсегә Аллаһы Тәғәлә үҙенең мәрхәмәтен күрһәтер.

**Әл-Ғәдүүлү** - ғәҙел, изгеләргә үҙенең рәхмәтен, гонаһлыларға үҙенең язаһын ғәҙел итеп биреүсе. Ул - ғәҙеллектең шишмәһе, сығанағы. Йома кистәрендә "Йәә Ғәдүүлү" тип егерме мәртәбә әйткән кеше хаҡһыҙға йәберләнмәҫ.

**Әл-Латиифү** - бәндәләренә йомшаҡлыҡ һәм шәфҡәт ҡылыусы, уларҙың тормошон еңеләйтеүсе. Ауырыу йәки фәҡир кеше ике рәҡәғәт намаҙ уҡып, йөҙ мәртәбә "Йәә Латиифү" тиһә, хәле яҡшырыр.

**Әл-Һәәдийү** - тоғро юл менән алып барыусы. Ул тоғро һүҙҙәр менән тоғро юлға күндереүсе, тоғро юл күрһәтеүсе. Ул йөрәктәрҙе Үҙен белеүгә килтереүсе.

**Әл-Хафиизү** - һаҡлаусы, яҡлаусы, ҡарауылсы. Уның яҡлауының сиге юҡ. Бөтә нәмәне тотоп, һаҡлап тороусы. Был исемде даими ҡабатлаған бәндәһен Аллаһы Тәғәлә һаҡлар.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# МИЛЛИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ -

## Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ

**Ер йөҙөндә көн итеүсе һәр халыҡ үҙенең тарихи байлығы менән үҙенсәлекле. Кемдеңдер күберәк, кемдеңдер әҙерәк, ә шулай ҙа һәр халыҡтың тотош донъя үҫешендә ниндәйҙер үҙ өлөшө бар. Шуға күрә һәр милләт үҙенә генә генә хас булған милли ҡомартҡылар менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала.**

Шуныһы һөйөнөслө - башҡалар араһында башҡорт халҡы ла лайыҡлы урын алып тора. Беҙ иң тәү сиратта үҙебеҙҙең бөрйән бал ҡорто һәм ҡортсолоҡ шөғөлө менән дан тотабыҙ, тип яҙһам, бер ҙә яңылышмаҫмын кеүек. "Был кәсептә (ҡортсолоҡ күҙ уңында тотола - **автор**) башҡорттарға тиңләшеүсе халыҡ юҡтыр", - тигән тарихи яҙмалар беҙҙең баһаны бермә-бер күтәреп ебәрә. Ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең: "Был халыҡ борон-борондан ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгән. Шуға күрә "башҡорт" һүҙе "баш" (йәғни төп хужа, оҫта) һәм "ҡорт" (йәғни бал ҡорто) һүҙҙәренән килеп сыҡҡан", - тигән иҫбатлауын бер ҙә инҡар итеп булмай. Ысынлап та, нисәмә быуаттар буйы тормош иләге нисек кенә иләһә лә ата-бабаларыбыҙ ҡортсолоҡ кәсебен юғалтмаған. Улай ғына түгел, бөтмәҫ-төкәнмәҫ донъя һынауҙары аша үтеп, солоҡсолоҡ кәсебен һаҡлай, хатта уны беҙҙең быуынға еткерә алғандар.

Бөгөн Башҡортостан ерендә бал ҡорттарын тотоу ысулдарының бөтә баҫҡыстарын да күрергә мөмкин. Иң тәүге ысул - ҡырағай күстәргә һунар итеү, унан килә - ағас олонона ҡыуышлыҡтар юнып, күстәрҙе шул ояларҙа (солоҡтарҙа) тотоу, унан алға киткән ысул - бал ҡорттарын түмәр-умарталарҙа йәшәтеү, хәҙерге заман ысулы -умарталарҙа тотоу-быларҙың барыһы ла башҡорт ерендә бар. Минеңсә, юғары кимәлдәге ҡортсолоҡ кәсебендәге оҫталыҡ һәм бал ҡортона тоғролоҡ башҡорт халҡының көслө рухи байлығы тураһында һөйләй.

"Рәсәйҙә ҡортсолоҡтоң (тимәк, солоҡсолоҡтоң - **автор**) иң үҫешкән осоро Иван Грозный батшалыҡ иткән осорға тура килә", - тип иҫбатлай тарихсылар. Белеүебеҙсә, Иван Грозный 1533-1584 йылдарҙа батшалыҡ итә. Ил буйынса етештерелгән бал һәм балауыҙ һандарына таянып: "Ул осорҙа Рәсәйҙә солоҡтар һаны 15-20 миллионға етеүе бик ихтимал", - тип тоҫмаллай тикшеренеүселәр. Күреүегеҙсә, заманында илдә бал ҡорто күстәре бик күп булған. Сағыштырыу өсөн: хәҙер Рәсәйҙә яҡынса 3 миллион самаһы күс иҫәпләнә. Тарих күҙлегенән сығып ҡарағанда әллә ни оҙаҡ ваҡыт та үтмәгән. Сәбәптәре төрлө булғандыр инде, ә шулай ҙа солоҡсолоҡ Рәсәйҙә йәшәгән башҡа халыҡтарҙың тормошонда яйлап һүнә барған. Тора-бара бөтөнләй юғалып ҡалған. Шунан нисек һоҡланмайһың да нисек ҡыуанмайһың - был боронғо кәсепте бары тик башҡорт халҡы ғына һаҡлап ҡала, XXI быуатҡа еткерә алған!



Был тәңгәлдә беҙ оло быуын солоҡсолары менән ысынлап ғорурлана алабыҙ. Эйе, һүҙ ҙә юҡ, заманында солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгәндәр яҡшы табыш һәм арыу килем алғандыр. Шәкәр уйлап сығарылмаған осорҙа ҡорт балы тәмле аҙыҡтар араһында иң тәүге рәттә торған. Шуға күрә үтемле булған. Ләкин XX быуат башҡорт ҡортсоларын оло һынауға дусар итә. Революция, граждандар һуғышы, колхоздар ойоштороу мәле, унан килеп Бөйөк Ватан һуғышы, һуғыштан һуңғы ауыр йылдар, хатта быуат аҙағында беҙҙең быуынға ла күрергә насип булған үҙгәртеп ҡороуҙар заманы. Шуныһы ҡыуаныслы - заман шауҡымы ҡортсоларҙы һындыра алманы, улар барыбер боронғо кәсепте һәм солоҡ ҡорттарын һаҡлай алды. Быңдай буталсыҡ һәм ауыр осорҙа солоҡсо, биллаһи, аҡса тураһында уйлап, урманға юлланмағандыр. Ә инде сәүит осоронда ҡайҙа инде ябай ауыл эшсеһенә солоҡ балы һатып, артыҡ аҡса эшләү тураһында уйлау. Быңдай ваҡытта бөрйән башҡорттары иң тәүҙә бал ҡортон һәм тәбиғәтте уйлап эш иткән. Хөрмәткә лайыҡ солоҡсолар тураһында айырым мәҡәлә яҙыу урынлы булыр, ахыры.

Ошо урында Башҡортостан етәкселеге тураһында ла йылы һүҙҙәр яҙып китергә кәрәктер. Дөйөмләштереп әйткәндә, илдең киң мәғлүмәт сараларында был турала ошолайыраҡ яҙалар - "Башҡортостан хөкүмәте үҙ байлығына (иғтибар итегеҙ әле - Хөкүмәт тарафынан бал ҡорттары халыҡ байлығы тип ҡабул ителә) битараф ҡараманы. Ваҡытында ул солоҡ ҡорттарын үҙ яҡлауына ала алды. 1928-1929 йылдарҙа республиканың Бөрйән районында Мәскәү дәүләт университеты экспедицияһы эшләне. Уларҙың мәғлүмәттәренә таянып, солоҡ ҡорттары һаҡланып ҡалған ерҙәр билдәләнде. 1958 йылда был урмандарҙа Шүлгән-Таш ҡурсаулығы ойошторолдо. Бөгөн был ҡурсаулыҡта йәшәгән солоҡ ҡорттары иң таҙа тоҡом ҡорттары булып иҫәпләнә". Әйткәндәй, Шүлгән-Таш ҡурсаулығы Рәсәй буйынса ғына түгел, тотош Европала бал ҡортона арнап асылған берҙән-бер ҡурсаулыҡ булараҡ та билдәле.

Аллаға шөкөр, бөгөн солоҡсолоҡ яңы һулыш ала башланы. Ата-бабаларыбыҙҙың боронғо шөғөлө менән Шүлгән-Таш ҡурсаулығында ғына түгел, ә уның эргәһендә урынлашҡан урмандарҙа ла шөғөлләнә башланылар. Бөрйән ҡортон һаҡлау буйынса "Алтын Солоҡ" заказнигы эшләп килә. Шуныһы һәйбәт - солоҡсолоҡ менән йәш быуын да ихлас шөғөлләнә башланы.

Мәҡәләне ошондай ҡыуаныслы йүнәлештә тамамлағы килә лә бит. Әммә тормош уйламаған яҡтан килтереп һуға шул. Бөгөнгө быуын солоҡсолары яңы һынауҙар алдында тора. Был турала киләһе мәҡәләлә һөйләшербеҙ.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре кандидаты.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Башҡаларҙың асылыуына ярҙам итеп, үҙегеҙгә асылыш килер

Үҙегеҙ әле генә яһаған йыһан сәйәхәтенә башҡаларҙы ла ылыҡтырып ҡараманығыҙмы? Был бушҡа ваҡыт үткәреү генә булыр, сөнки башҡалар һеҙ үткән әҙерлекте үтмәгән. Башҡаларға ярҙам итеүҙең икенсе ысулдары ла бар. Ни тиклем күберәк ярҙам күрһәтһәгеҙ, үҙегеҙгә шул тиклем күберәк ярҙам алырһығыҙ.

Уҡытыусы бишенсе синыф уҡыусыһы Шондың һуғыш суҡмары булыуына, өйгә эшен насар эшләүенә даими зарлана. Малайҙың ата-әсәһен әңгәмәгә саҡырғас, әсәһе: "Күрәһең, ул уҡыу өсөн тыумағандыр инде", - ти, аптырап. "Ул үҙе, әлбиттә, быны менән килешер ине, - ти уҡытыусы. - Әммә был уға киләсәктә проблемалар тыуҙырыуы мөмкин. Уның үҙбаһаһы түбән. Башҡалар менән аралашҡанда, сәбәп булмаһа ла, ул үҙен яҡлау позицияһына баҫа".

Ата-әсә ҡапыл бер-береһенә ҡарап ала һәм риза булыуҙарын белдереп, баш ҡаға. "Һеҙ тап өҫтөнә баҫтығыҙ. Беҙ нимә эшләргә беләбеҙ", - тип ышандыра атай кеше.

Бер нисә көн дауамында улар беҙ өйрәткән медитация - көйләп булған өндәге төш күреү менән шөғөлләнә. Ата менән әсә көсөргәнештән арынып, Шонды дүрт метр буйлы, үҙенең синыфташтарынан аша ҡарап тороусы, үҙ-үҙенә ышаныусан һәм ихтирамлы итеп күҙ алдына килтерә. Артабан улар Шонға ла күҙҙәрен йомоп, үҙ алдына хыялланырға ҡуша. Улар уға уйҙарында ғына нисек итеп регбиҙа гол индергәнен, мәктәп парады менән идара иткәнен, матур яҙыу конкурсында еңеү яулауын һүрәтләй.

Бер ай үткәс, уҡытыусы был атай-әсәйгә шундай һүҙҙәр яҙып ебәрә: "Шонды танырлыҡ та түгел. Быға нисек өлгәштегеҙ?" Улар уҡытыусыға бер нәмә лә әйтмәй. Ә мин серҙе асам.

Шондың ата-әсәһе тәүҙә үҙҙәре өсөн эшләй, һуңынан инде улдары өсөн. Тәүҙә үҙеңә ярҙам итергә кәрәк, аҙаҡ өндәге төш ярҙамында башҡаларға ла, хатта улар һеҙҙән бик алыҫта булһалар ҙа, ярҙам итә алаһығыҙ. Алда яҙылған кәңәштәр аша һеҙ башҡаларға изгелек эшләү һәләтен һәм теләген астығыҙ. Хәҙер һеҙҙең өсөн иң мөһиме - үҙегеҙҙе шәхесегеҙҙе үҙгәртеү өсөн программалау. Тәү сиратта тормошоғоҙҙа яҡшыртыуҙы талап иткән өс өлкәне билдәләгеҙ. Ниндәй өлкәләр икәнен һәр кем үҙе асыҡлай, улар кире йоғонтоға тиҙ бирешкән, фекерләүҙе сикләгән, үҙбаһаны төшөргән өлкәләр булырға тейеш. Өс өлкәне һайлап, түбәндә бирелгән күнекмәне өс тапҡыр эшләгеҙ. Үҙбаһаны яҡшыртыуға ярҙам иткән күнекмә:

- Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Үҙегеҙҙең әлеге хәл-торошоғоҙҙо күрегеҙ - мәҫәләнән, әгәр сәләмәтлегегеҙҙе нығытыу өҫтөндә эшләһәгеҙ, үҙегеҙҙе күңел төшөнкөлөгөндә, арыған итеп күрегеҙ.
- Ошо картинаның өҫтөнә ҙур ҡыҙыл хәрефтәр менән "Алып ташларға" тип яҙығыҙ һәм уны алыштырығыҙ.
- Хәҙер үҙегеҙҙе энергияғыҙ ташып торған итеп күрегеҙ. Нимә теләйһегеҙ, шуны еңел генә эшләйһегеҙ, хатта артығын да эшләй алаһығыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ, үҙ аңығыҙҙа икәнлегегеҙҙе һәм яңы энергия заряды алыуығыҙҙы тойоғоҙ.

Бер сәғәттән йәки һуңыраҡ был күнекмәне икенсе өлкәләр өсөн ҡулланығыҙ. Ҡабат уйығыҙҙа ғына үҙгәртелергә тейеш картинаны һүрәтләгеҙ, һуңынан уны алмаштырығыҙ. Аңланығыҙмы? Хыялдағы образдар өсөн сик юҡ һәм улар һеҙҙе шул тулҡынға көйләй.

**Роберт СТОУН.**



## 14 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Золотой капкан", 1-я серия. Приключения
22.20 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Следствие по телу", 2-я серия
00.40 "Боксер". Драма
02.50, 03.05 "Правильный Дадли"
03.00 Новости
04.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Неспетая песня Анны Герман"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад". Сериал
12.50 "Маршрут милосердия". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 251-я серия
17.55 "Все к лучшему", 21-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 92-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вкус граната", 14-я, 15-я и 16-я, закл. серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Дорога". Драма
01.45 "Летучая мышь", 2 серии. Музыкальный фильм
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". "Золотая стрела". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Погоня за тенью". "Осторожно, дети!", "Ничего личного. Криминальный сериал
21.30 "Зверобой-2". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "До суда"
02.45 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Секунда до..."**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Земля. Мощь планеты: вулканы"**
**14.00 "Секунда до..."**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Сказочный принц"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Доктор Заки Валиди Тоган"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Сказочный принц"**
**00.45 "Прогноз погоды"**

## 15 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Золотой капкан", 2-я серия
22.30 "Кладоискатели"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Премия "Гремми"
01.40, 03.05 "Река". Драма
03.00 Новости
04.00 "Грязные мокрые деньги"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 252-я серия
17.55 "Все к лучшему", 22-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 93-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вчера закончилась война", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Разборка в маленьком Токио". Боевик
01.40 "Горячая десятка"
03.45 "Джордж Уоллас"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Погоня за тенью". "Брат мой", "Сквозь тернии"
21.30 "Зверобой-2". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Следопыт". "По следам золотого коня". Детектив
01.35 "Кулинарный поединок"
02.35 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Секунда до..."**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Земля. Мощь планеты: атмосфера"**
**14.00 "Секунда до..."**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Шэп арба"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Пришельцы"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на русс. яз.)**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Рубин" (Тюмень)**
**21.30 Новости (на русс. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.15 "Пришельцы"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 16 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.10 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
20.30 "Время"
21.00 "Золотой капкан", 3-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50" Обмани меня", 11-я серия
01.30, 03.05 "Восход Меркурия". Боевик
03.00 "Новости"
03.50 "Ален Делон. Мужчина на все времена"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "2012. Сбудутся ли пророчества майя?"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 253-я серия
17.55 "Все к лучшему", 23-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 94-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вчера закончилась война", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Специалист". Боевик
02.15 "Честный детектив"
02.55 "Закон и порядок"
03.50 "Джордж Уоллас"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Погоня за тенью". "Последняя надежда", "Жестокие уроки"
21.30 "Зверобой-2". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Следопыт". "По следам следователя", 1-я и 2-я серии
01.30 "Квартирный вопрос"
02.30 Футбол. Лига чемпионов УЕФА

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Секунда до..."**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Земля. Мощь планеты: лед"**
**14.00 "Секунда до..."**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Ходячий замок"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**18.55 Чемпионат россии по волейболу среди мужских команд. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Кузбасс" (Кемерово)**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.25 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Динамо" (Рига) - "Салават Юлаев" (Уфа)**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 17 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Золотой капкан", 4-я серия
22.20 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами" с Максимом Шевченко"
00.50, 03.05 "Лицо со шрамом". Криминальная драма
03.00 Новости
04.00 "Грязные мокрые деньги"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 254-я серия
17.55 "Все к лучшему", 24-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 95-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вчера закончилась война", 7-я и 18-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Матрица". Фантастический боевик
03.00 "Джордж Уоллас"
03.55 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайные происшествия"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.40 "Погоня за тенью". "Дети леса", "Футболист"
21.45 "Зверобой-2". Сериал
22.45 "Следопыт". "По следам следователя"
00.40 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
00.50 Футбол. Лига Европы УЕФА. "янг Бойз" (Швейцария) - "Зенит" (Россия). Прямая трансляция
03.00 "Лига Европы УЕФА"
03.30 "Суд присяжных"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Секунда до..."**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Земля. Мощь планеты: океаны"**
**14.00 "Секунда до..."**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Экиэт китабы"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Рыцари неба"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Рыцари неба"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 18 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Женский журнал"
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо"
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых"
23.40 "Закрытый показ". "Бубен, барабан". Мелодрама
02.40 "Час с Муссолини". Трагикомедия
04.55 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Русский шоколад"
12.50 "Маршрут милосердия". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести - ПФО"
16.50 "Ефросинья", 255-я серия
17.55 "Все к лучшему", 25-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 96-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Юрмала". Фестиваль юмористических программ
22.50 "Девчата"
23.25 "Мерцающий". Боевик
01.10 "Как малые дети". Драма
03.55 "Джордж Уоллас"
04.45 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "НТВшники"
21.45 "Зверобой-2", 17-я и 18-я серии
23.50 "Брест. Крепостные герои"
01.20 "Бугимен-2". Фильм ужасов
03.05 "Тарзан в опасности". Приключения
04.40 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Секунда до..."**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**11.30 "Йома"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Земля. Мощь планеты: уникальная планета"**
**14.00 "Секунда до..."**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Цирк"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Лэсси"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на русск. яз.**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Деньги к деньгам"**
**21.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Динамо" (Минск) - "Салават Юлаев" (Уфа)**
**00.30 "Музыка на канале"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 19 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.25, 06.10 "Москва - Генуя"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь, любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Вкус жизни"
12.15 "Среда обитания"
13.10 "Олег Митяев. Фантазии завтрашнего дня"
14.20 "Ведьмина гора". Приключения
16.10 "Россия от края до края"
17.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
18.10 "Джон Ф. Кеннеди. Убийство в прямом эфире"
20.00 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы. Продолжение"
21.50 "Прожекторперисхилтон"
22.30 "Детектор лжи"
23.40 "Верушка: жизнь перед камерой".
01.05 "Напролом". Криминальная комедия
03.15 "Прекрасные создания"
04.50 "Грязные мокрые деньги"

### РОССИЯ 1

05.10 "Неподсуден"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.45 "Честный детектив"
12.20 "Судьбы загадочное завтра"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Судьбы загадочное завтра"
16.10 "Субботний вечер"
18.10 "Шоу "Десять миллионов"
19.15 "Темные воды". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Темные воды". Продолжение
23.45 "Альпинист". Драма
01.35 "Столкновение". Драма
03.55 "Последний Касба"

### НТВ

05.30 "Место под солнцем"
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Их нравы"
09.25 "Живут же люди!"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.20 "Внимание: розыск!"
14.00 "Таинственная Россия"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Последнее слово"
17.30 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Музыкальный ринг НТВ". Супербитва
00.15 "Каменная башка". Спортивная драма
02.10 "Наказание. Русская тюрьма вчера и сегодня"
03.10 "Суд присяжных"
04.15 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ

**07.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**07.15 "Салям"**
**08.00 "Дарю песню"**
**10.00 "Легенда о Сиде"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Надо знать!"**
**14.00 "Подкидыш"**
**15.15 "Орнамент"**
**16.15 "Приди моей музой". Г. Ишкуватова**
**17.30 "Третий звонок"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Третий звонок". Н. Гаитбай. "Любви все возрасты покорны". Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "Забытые войны"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30 "Нескучное кино"**
**00.15 "Свидание с джазом"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 20 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Личные счеты"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.15 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.20 "КВН. 50 виртуальных игр"
13.10 "Апостол", 9-12-я, закл. серии. Военная драма
17.00 "Ни минуты покоя..." Юбилейный концерт Вячеслава Добрынина
19.10 "Не надо печалиться". Комедия
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Шоу ни бе ни ме нехило"
23.30 "Познер"
00.30 "Тихий Дом"
01.05 "Сыграй мне "Туманно"
03.05 "Грязные мокрые деньги"

### РОССИЯ 1

05.50 "Не забудь... станция Луговая"
07.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Сам себе режиссер"
08.55 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Местное время. Вести-Башкортостан". События недели"
10.45 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Судьбы загадочное завтра"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Судьбы загадочное завтра"
15.15 "Смеяться разрешается"
17.10 "Танцы со Звездами". Сезон-2011"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Дорогая моя доченька". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Два веселых гуся"
00.30 "Пункт назначения-2". Фильм ужасов
02.20 "Алекс и Эмма". Романтическая комедия
04.15 "Городок"

### НТВ

05.10 "Место под солнцем"
07.00 "Тайна Третьей планеты"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Дело темное"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Бомжиха-2". Мелодрама
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Седьмая жертва". Криминальная драма
23.50 "Нереальная политика"
00.20 "Авиаторы"
00.55 "Отпетые мошенники". Комедия
02.55 "Наказание. Русская тюрьма вчера и сегодня"
04.00 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ

**07.00 Новости (на русск. яз.)**
**07.15 "Салям"**
**08.00 "Дарю песню"**
**10.00 "Тамыр представляет..."**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Истории"**
**14.00 "Лисенок и девочка"**
**15.30 "Вестник газпромтрансгаз Уфа"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. ЦСКА (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа)**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Урал Лото"**
**22.30 "Вечер.com"**
**23.15 "Лисенок и девочка"**
**01.00 Прогноз погоды**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП…

# ЭСКЕЛЕККӘ ҠАРШЫ ТҮГЕЛ,

## айыҡлыҡ өсөн көрәшеү фарыз

**Владимир Ждановтың ошо лекцияһын Өфөлә, Нефтекама һәм Белорет ҡалаларында тыңланылар. Өфөнөң Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үткән бер генә тамаша ла был ҡәҙәре халыҡ йыйғаны юҡ ине әле. Өс сәғәт буйы тын да алмай тыңланды профессор Владимир Ждановтың сығышы. "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте лидерҙары дөрөҫ юлда - эскеселәр менән көрәшеүҙән файҙа юҡ, эсмәүселәргә аңлатырға кәрәк алкоголдең зыянын. Айыҡлыҡ өсөн көрәшергә кәрәк. Түбәндә В. Ждановтың лекцияһын тыңларға килеүселәрҙән бер нисә фекер тәҡдим итәбеҙ.**

**Ира Каранаева, Өфө ҡалаһы Октябрь районының 147-се мәктәбенең социаль педагогы:** Владимир Жданов менән ситтән тороп танышмын. Уның "Алкоголгә ҡаршы террор" тигән дискыһы ла бар миндә. Бөгөн килеп, лекцияларын тыңлап ҡыуандым. Артабанғы эшемдә бөгөн ишеткәндәремде ҡулланырға, уҡыусыларға, ата-әсәләргә, коллегаларыма һөйләргә уйлайым. "Их, ата-әсәләр алдында сығыш яһатырға ине!" тип хыялланып ултырҙым.

**Индира Борисова, сауҙа вәкиле:** Минә әле утыҙ йәш тә юҡ, үҙем сәләмәт тормош алып барам, һис ҡасан эсеп тә, тәмәке тартып та ҡарағаным булманы, 100 процентҡа айыҡлыҡ яҡлымын. Шуға ла лекция бик оҡшаны. Владимир Ждановтың лекцияларын һәр ваҡыт энтузиазм менән тыңлайым, телевизорҙан видеоларын да ҡараным. Башҡортостанда, Өфөлә был айыҡлыҡ өсөн хәрәкәт эшмәкәрлеген йәнләндереп ебәрһәк, бик шәп булыр ине. Урамда эскән кешеләргә, үсмерҙәргә, һыра шешәһе ҡосаҡлап йөрөгән, тәмәке борҡоткан йәштәргә ҡарауы аяныс. Киләсәк өсөн ҡурҡыныс булып китә. Уларға нисектер ярҙам итке килә. Шуға йәмәғәтселек, Хөкүмәт был проблеманы ысынлап хәл итеүгә тотонһон ине. Дуҫтарым, коллегаларым араһында төрлө кеше бар. Улар миңәләр минең айыҡ тормошҡа саҡырыуымды ишетмәй. Хәҙер Владимир Георгиевичтың лекцияларын, китаптарын, видеоларын тәҡдим итермен, тием. Бәлки, уны ишетеп, алама ғәҙәттәренән арынырҙар.

**Гөлшат Мөхәмәдина, Сибай институтының 5-се курс талибәһе:** Студенттар лекцияларҙан ялҡып бөткән бит инде, нисек булһа ла ҡасыу яғын ҡарай. Өс сәғәтлек лекция тигәс, нисек ваҡыт үткәрербеҙ икән, тип хафаланғайным. Лекцияның беренсе минутынан уҡ ысын мәғәнәһендә ауыҙҙарыбыҙҙы асып тыңланыҡ. Ваҡыттың үткәне лә һиҙелмәне, хатта етмәй ҡалды тиһәң дә була. Был лекция аша йәмғиәтебеҙгә яңы күҙлектән ҡараныҡ, күп яңы нәмәләр белдек. Лекторҙың лекциялары бик файҙалы, фәһемле. Ошо залдан сыҡҡанда уҡ күптәр үҙҙәренең киләсәге, тыуасаҡ балалары тураһында уйланғандыр, моғайын. Бындай сығыштар күберәк булһын һәм улар баш ҡалала ғына түгел, республикаability башҡа ҡалаларында ла, һәр районда үткәрелһен ине. Хәҙер минең теләгем - Ждановтың лекцияларын күберәк кешегә еткереү.

**Әлфирә Ҡоҙабаева, талибә:** Бөгөнгө лекция сарсап килеп һыу эскән кеүек булды. Сөнки беҙ дөрөҫлөктө белмәйбеҙ һәм һаман да эскелеккә ҡаршы көрәшәбеҙ. Ә Жданов проблемаға икенсе күҙлектән ҡарарға мәжбүр итте. Эскелек тураһында күп һөйләйҙәр, әммә халыҡтың бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сығып китә тигәндәй. Ә Жданов үҙенә ылыҡтырып, тартып тороусы шәхес. Уның бер һүҙе лә бушҡа әйтелмәй, һәр һүҙендә хаҡлыҡ ята. Һәр һүҙен факттар менән дәлилләй, шуға ла уның сығышы ышандыра, шикләнергә урын ҡалдырмай. Ниндәй генә киң мәғлүмәт сараһын алып ҡарамайыҡ, улар был турала һөйләмәй, яҙмай. Икенсенән, Жданов - үҙ эшенең фанаты. Күптәр алкоголдең зыяны тураһында лекция һөйләй ала, әммә лектор лекциянан сыға ла эсә, тәмәке тарта. Ә Жданов үҙенең яҡшы ғәҙәттәре менән дә эшенә тоғролоғон раҫлай.

**Тимур Лоҡманов, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты белгесе:** Үҙенең лекцияһында Жданов алкомафия тураһында, илде эскелек һаҙлығына батырыуҙың сығанаҡтары хаҡында әйтеп китте. Тап шул алкомафия эсмәгән кешеләрҙе сектанттар тип тә атай. Мине бөгөн шул борсой: алкомафия үҙ эшен төрлө яҡҡа йүнәлткән, хатта улар телевидениены ла контролләй. Шул хәл-торошта беҙҙең ил етәксеһе үҙен нисек торорға тейеш? Рәсәй гражданы булараҡ, шундай күренеш миңә оҡшамай: бик йыш зәңгәр экрандарҙан ил Президенты күрһәтелә, ҡулында - һыра. Йәғни, Президент - һыра - Макаревич, Президент - Премьер-министр - һыра. Шундай күренештәрҙең телеэфирҙан үтеүе мине хәүефләндерә. Беҙҙең ил башлыҡтары ла алкомафия ҡорбандарымы икән ни?

Лекциянан күренеүенсә, һыра героиндан да хәүефле. Героинды барыһы ла белә, ә һыраның наркотик икәнен берәү ҙә белмәй. Ҡомаҡтар миҫалында һыра ҡулланыуҙың ирегеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар өсөн зыяны ниндәй кимәлдә булыуын барыбыҙ ҙа ишеттек. Уйланырға урын бар. Тағы ла шуныһы: залдың былай тулы булғанын күргән юҡ ине әле. Зал, балкон халыҡ менән шығырым тулы булды, баҫып торҙолар. Тимәк, халыҡ айыҡлыҡҡа, ысынбарлыҡҡа һыуһаған. Был лекцияларҙы ойоштороусы "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте лидерҙарына ҙур рәхмәт әйтке килә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### Ғашиҡтар, һеҙҙең өсөн!

Ғашиҡтар көнөн күңелле, онотолмаҫлыҡ итеп үткәргегеҙ киләме? Улайһа, 13 февраль Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк Ғашиҡтар көнөнә арналған **"Мөхәббәткә 365 көн"** исемле юмористик программа тап һеҙҙең өсөн! Бының өсөн бары викторина һорауҙарына дөрөҫ яуап бирергә генә кәрәк һәм ике кешелек саҡырыу ҡағыҙы һеҙҙең ҡулда. **Шулай итеп, кем алыҡ?**

1. Филармония етәксеһенең исем-шәрифе?
2. Филармонияла эшләгән режиссерҙарҙы һанап сығығыҙ.
3. Концертта ҡатнашасаҡ артистарҙың тормош юлдаштарын дөрөҫ билдәләгеҙ: Урал Мортазин - Венера Рәхмәтуллина, Рушан Биктимеров - Лилиә Ишемйәрова, Рөстәм Шәрипов - Әлфиә Ғәлләмова.

**Телефон: 8-927-96-888-14**

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 февраль "Балаҡайҙарым"** (Ә. Атнабаев), драма

**16 февраль "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** (Н. Асанбаев), тарихи драма

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 февраль "Ун икенсе төн"** (У. Шекспир), комедия. Башлана 18.00

### КОТЛАЙБЫҘ!

Әбйәлил районының Асҡар ауылында йәшәүсе әсәйебеҙ

**Рәхилә Әхәт ҡыҙы Мортазинаны**

50 йәшлек юбилейы менән ҡотлайбыҙ. Хоҙай Тәғәлә һиңә, әсәйебеҙ, барыһын да - һөйкөмлөлөктө лә, уңғанлыҡты ла, сабырлыҡты ла мул биргән. Киләсәктә лә үҙең күрһәткән һәм үҙеңә күрһәтелгән изгелектәргә төрөнөп, беҙгә таяныс булып һәм беҙгә таянып, һаулыҡта, бәхеттә, шатлыҡта йәшәргә яҙһын.

**Иң изге теләктәр менән ҡыҙҙарың Ғәлиә, Лилиә.**

ИҒЛАН

**"ТВОЙ АЛЬБИОН"** **үҙәгендә инглиз телендә иркен аралашыуға өйрәтәбеҙ.** Уҡытыуҙың 80 проценты практика аша ғәмәлгә ашырыла. Телефон: **266-13-43. www.youralbion.ru.**

ИҒТИБАР!

# "АЙЫҠ АУЫЛ" КОНКУРСЫ СТАРТ АЛА

**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте айыҡ тормошто пропагандалау һәм сәләмәт тормош булдырыу, ауыл биләмәләренең һәм халыҡтың айыҡлыҡ өсөн көрәшен әүҙемләштереү маҡсатында "Айыҡ ауыл" республика конкурсы иғлан итә.**

**Конкурстың төп бурыстары:**

- шәхси һәм ғаилә тормошонда айыҡлыҡ традицияларын тергеҙеү;
- ошо проекты алкоголдән, тәмәкенән һәм наркотиктан азат гуманлы йәмғиәт төҙөүгә йүнәлтелгән халыҡ ихтыярына әйләндереү;
- эсмәгән, айыҡ ҡатламды арттырыу;
- йәштәр араһында алкоголь ҡулланыуҙы, тәмәке тартыуҙы һәм наркотиктар ҡулланыуҙы иҫкәртеү, уларҙы айыҡлыҡ рухында тәрбиәләү;
- закон сығарыусыларҙы Рәсәйҙә айыҡлыҡты тергеҙеүҙе тәьмин иткән закон сығарыуға этәреү, наркотиктарға ҡаршы ҡабул ителгән закон өлгөһендә алкоголь һәм тәмәке ҡулланыуҙы сикләү һәм бөтөрөү буйынса закондны саралаҙы көсәйтеү.

**Конкурс өс этапта үтәсәк.**

**1-се этап** - 1 мартҡа тиклем ғаризалар ҡабул итеү;

**2-се этап** - 1 марттан 30 ноябргә тиклем муниципаль райондарҙың ауыл биләмәләре араһында номинациялар сиктәрендә бәләкәй конкурстар үткәреү;

**3-сө этап** - 2012 йылдың 1 ғинуарына тиклем йомғаҡ яһау.

Конкурста ете номинация буласаҡ. Ошо ете номинацияла еңеүселәр өҫтәмә мәрәй йыясаҡ. Биләмәләр бер-нисә номинацияла бер юлы ҡатнаша ала. Һәр номинация буйынса еңеүсе билдәләнә. Бәләкәй конкурстар түбәндәге темалар буйынса ойоштороласаҡ:

- биләмәнең иң яҡшы йәмғиәттәре (Өләсәйҙәр ҡоро, Олатайҙар ҡоро һ.б.);
- Иң яҡшы оҫталар, һөнәрмәндәр ауылы;
- Иң спорт һөйөүсе ғаилә;
- Иң таҙа биләмә.

Шулай уҡ ойоштороу комитетының урындарға сығып осрашыуҙар ойоштороуы ла, лекциялар, семинарҙар уҙғарыуы ла ҡаралған.

Әлеге көндә Ғафури районының Сәйетбаба, Хәйбулла районының Йәнтеш, Белорет районының Мөхәммәт ауылдары конкурста ҡатнашырға теләк белдереп, ғаризалар биргән дә инде.

**Әйткәндәй, Яҡутстандың 36003 кеше йәшәгән 60 ауылы үҙҙәрен айыҡлыҡ территорияһы тип иғлан иткән. Беҙ уларҙан кәмме ни?**

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Билдәле театр тәнҡитселәре Людмила Остропольская менән Александр Иняхин М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында ижади командировкала булды. Труппа эксперт хөкөмөнә алты спектакль тәҡдим итте. Спектаклдәрҙең күбеһе - бөгөн сәхнәлә барған былтырғы һәм быйылғы театр миҙгеле премьералары ине.**

# БАШҠОРТ СПЕКТАКЛДӘРЕН...

## Мәскәү тәнҡитселәре юғары баһаланы



"Шәүрәкәй" спектакленән күренеш.

Театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов әйтеүенсә, Советтар Союзы осоронда урындағы театрҙар ҡуйған спектаклдәрҙең драматургияһы һәм сифатын баһалатыу өсөн Мәскәү, Санкт-Петербург һәм башҡа ҡалаларҙан тәнҡитселәр йыш саҡырылған. Башҡорт дәүләт академия драма театры ошо йоланы тергеҙеү маҡсатынан Мәскәү тәнҡитселәренә мөрәжәғәт иткән дә инде.

Людмила Остропольская һәм Александр Иняхиндың республикала театрҙар араһында үткәрелгән төрлө фестивалдәр һәм конкурстарҙа эксперт сифатында ҡатнашҡаны бар. Тимәк, Башҡортостандың театр сәнғәте өлкәһендә эштәр нисек барыуы тураһында улар ишетеп кенә түгел, ә күреп белә. Шуның өсөн дә Башҡорт драма театры артистары һәм режиссерҙары өсөн мәртәбәле белгестәрҙең фекере бик мөһим. Мәскәү тәнҡитселәренә бигерәк тә "Шәүрәкәй" спектакле оҡшаны. Халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғолов әҫәре буйынса ҡуйылған романитик музыкаль драманы Людмила Остропольская, башҡорт халҡының бай мәҙәниәтен, йолаларын күрһәтеүсе спектакль, тип билдәләп, "Шәүрәкәй"ҙе театрҙың йөҙө, тип атаны.

Туфан Миңнуллин әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған "Яратыу гонаһмы" һәм "Мулла" (режиссеры Айрат Абушахманов) спектаклдәре лә Мәскәү тәнҡитселәренең күңеленә хуш килде.

-Бындай спектаклдәрҙең төп геройҙары ауырлыҡтарҙы еңеп, еңеүсе булыуға өлгәшә, шуға улар тамашасыға ла оҡшай. Үҙҙәрен ошо персонаждар кеүек итеп тойоп, тамашасы театрҙан күңел күтәренкелеге менән ҡайтып китә. Профессиональ тәнҡитселәргә был ғына аҙ. Уларға ҡатмарлыраҡ, төрлө сиселешле тарихтар кәрәк, - ти Айрат Абушахманов.

Мәскәү тәнҡитселәре Америка кинорежиссеры, сценарист, актер Вуди Аллендың "Осоусы лампа" пьесаһы буйынса ҡуйылған "Хәйерле иртә, Энид!" спектаклен дә билдәләп үтте. Антон Чеховтың әҫәре буйынса ҡуйылған "Туй" спектакле лә иғтибар үҙәгенән ситтә ҡалманы. Өфө тамашасыһы тәүге спектаклде Мәскәү режиссеры Нәркәс Искәндәрова, ә рус классигының әҫәрен Санкт-Петербургтан килгән режиссер Борис Цейтлин ҡуйыуында күрҙе. Ике спектаклде лә тәнҡитселәр ыңғай баһаланы.

-Талантлы режиссерҙарҙы саҡырыуҙан театр ота ғына, әлбиттә. Тик Рәсәй театрҙарының спектакль ҡуйырға ситт илдәрҙән режиссерҙар саҡырыуы мине бер аҙ хафаға һала. Бындай саҡырыуҙарға йышыраҡ 20-30 урынға иҫәпләнгән ер аҫты театрҙары режиссерҙары килә, ә уларҙың мәктәбе Рәсәй театрҙары коллективтары мәктәбенә ҡарағанда көсһөҙөрәк булыусан, - тип белдерҙе Людмила Остропольская.

Мәскәү тәнҡитселәренә Айрат Абушахманов ҡуйған "Алтын аҫҡыс" әкиәте лә оҡшаны. Труппа был спектаклде ике телдә - башҡорт һәм рус телендә уйнай.

-Минең фекеремсә, театр ниндәй телгә хеҙмәт итә, шул телдә уйнарға тейеш. Башҡорт дәүләт академия драма театры - башҡорт теленең һаҡсыһы, шуға ла уның сәхнәһендә рус һәм сит ил классикаһы башҡорт телендә яңғырарға тейеш, - тине Людмила Остропольская.

Бөгөн академтеатр артистары Василий Шукшин хикәйәләре буйынса спектакль әҙерләй. Уның премьераһы март айында көтөлә.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕМДЕҢ ӨМӨТӨ БАР,

## уның барыһы ла бар

Икеләнеү - тау, һәм уны бары тик ышаныс ҡына урынынан ҡуҙғата ала.

**(Француз мәҡәле).**

Кем сәләмәт, уның өмөтө бар, ә кемдең өмөтө бар, уның барыһы ла бар.

**(Ғәрәп мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бик матур һарайҙа Шраван тигән принц йәшәгән. Ул байлыҡ һәм муллыҡ, шуның өҫтәүенә матурлыҡ һәм төҙөклөк ратҡан. Үҙенең ҡалаһын туҡтауһыҙ биҙәгән, төҙөкләндергән, уны иң матур ҡалаларҙың береһенә әүерелдергән. Ләкин берҙән-бер көндө был эштәр уны туйҙырған икәнен аңлаған. Шул мәлдә генә уның ҡалаһына Будда килгән. Шраван уның эргәһенә барған, вәғәздәрен тыңлаған һәм ҡапыл ғына Будда эргәһендә йөрөгән монахтар рәтендә ҡалырға ҡарар иткән. Принцтың был ҡарарына барыһы ла аптыраған. Әле генә ҡатын-ҡыҙ һәм шарап менән күңел асыуҙан башы сыҡмаған принцтың нисек дин юлынан китеүе мөмкин, тип уйлағандар. "Һин уны берәй нимә эшләттеңме әллә?" тип һорағандар Будданан. "Мин уның менән бер ни ҙә эшләмәнем, - тигән Будда.- Кешенең аҡылы шулай бер сиктән икенсеһенә күсенергә мөмкин, әлбиттә. Был аҡылдың ҡәҙимге юлы. Кеше байлыҡҡа сумып, аҡылдан яҙған, хәҙер байлыҡтан баш тартып аҡылдан яҙа... Бынbackһы ла аҡылһыҙлыҡ..." Шулай итеп, Шраван монах булып китә. Эргәһендәгеләр уның бер сиктән икенсеһенә ташланғанын ситтән генә күҙәтә башлай. Будда уҡыусыларын бер ваҡытта ла яланғас йөрөргә өйрәтмәй, ә Шраван яланғас йөрөй. Будданың бар уҡыусылары ла көнөнә бер тапҡыр ашай, ә Шраван көн аша бер ашай. Башҡалар ағас күләгәһе аҫтында доға ҡылһа, Шраван ҡояш аҫтында ултырып доға ҡыла. Элек ул бик матур һәм ап-аҡ йөҙлө булһа, алты ай эсендә уны танырлыҡ та булмай. Ябыға, тән тиреһе тупаҫлана. Бер көн кис Будда Шраванға килә һәм:" Шраван, һин монахлыҡҡа киткәнсе музыкант булғанһың, гитарала уйнағанһың икән. Шуға мин һиңә бер һорау бирәм: гитараның ҡылдарын бушатҡанда нимә була?" "Гитараның ҡылдарын бушатһаң, унан бер ниндәй ҙә көй сыҡмай", - тип яуап биргән Шраван. "Ә ҡылдарҙы бик ныҡ тарттырғанда нимә була?" "Ул саҡта ла көй сыҡмай. Көй сыҡһын өсөн ҡылдар бушаҡ та, тарттырылған да түгел, ә уртаса булырға тейеш. Гитарала уйнау ауыр түгел, әммә уның ҡылдарын бары тик оҫталар ғына дөрөҫ көйләй ала. Бында алтын урталыҡ кәрәк ", - тип яуаплаған Шраван. Будда аҙаҡ шулай ти: "Мин дә һине алты ай күҙәткәндән һуң шуны уҡ әйтергә теләгәйнем. Үҙеңдән ниндәйҙер көй сығарырға теләһәң, ҡылдарыңды бушатма ла, тарттырма ла, уртасаға көйлә. Оҫта бул. Артыҡ көс һалып көсәнеү үҙеңде туҙҙырыуға, ә артыҡ бушаныу көсһөҙлөккә килтерә. Үҙеңде уртаса бер кимәлгә көйлә, шул саҡта ғына маҡсатыңа өлгәшерһең..."**

ҺҮҘ АРАҺЫНДА

## КҮҢЕЛЕМӘ ҺЫУЫҠ

*Бөгөн бөтә кешеләр*
*Һөйөү өсөн эсәләр.*
*Байрам табыны артында*
*Сыңк-сыңк килә кәсәләр.*

*Әйҙә, беҙ ҙә һөйөүҙе*
*Батырайыҡ хәмергә.*
*Иртәгә бит барыбер*
*Тура килер үлергә.*

*Тик һин Үлем алдында*
*Һөйөүгә бысраҡ яҡма.*
*Йөрәктәге йыланды*
*Шайтан алдында аҡла.*

*Кемдер һаҡлай һөйөүен.*
*Кемгәләр ул - буш ҡыуыҡ.*
*Шундайҙарҙың янында*
*Күңелемә бик һыуыҡ...*

**Морат СОЛТАНОВ.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## ШАМТЫРЛАП ЙӨРӨМӘ ӘЛЕ...

**Мысыр һайырсыһы** - бушты-бушҡа ауҙарып йөрөүсе кеше.
**Ҡапаҡтама** - ҡурҡытма.
**Шыр ебәреү** - ҡурҡыу.
**Шым тояҡ** - шым ғына аҫтыртын эшләп йөрөгән кеше.
**Алйырыш, йәреш** - әрпеш кеше.
**Бизума** - алаҡандама, иғтибарлы бул.
**Тауыҡ мейе, һыу мейе** - әр һүҙе, хәтерһеҙ кешегә әйтәләр.
**Ҡаты морон** - һаран, һыҡмыр кеше.
**Кәтмәйгән** - үтә арыҡ, ябыҡ кеше.
**Кәбәтәгә ҡатыу** - бысранып йөрөмә.
**Шамтыр** - үҙ-үҙен ҡарамай, теләһә нисек кейенеп йөрөгән әрпеш кеше.
**Ҡойто** - ярлы.
**Йыбытҡы** - ялҡау.
**Тайса** - үҙ ерем. Мин үҙ тайсамда торам, тип әйтәләр.

**Зарифа АБЫҘБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 505